*Хөрмәтле уҡыусы, йортоңда аҙна һайын күңел байрамы, рух ҡуҙғыуы теләһәң, "Киске Өфө" - шундай бер сара. Уға яҙылырға онотма һәм таныштарыңды ла был хаҡта иҫкәрт. Индекстар - 50665, 50673, ярты йылға яҙылыу хаҡтары - 306 һум 84 тин, 294 һум 78 тин.*


ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

2002 йылдан башлап сыға

Һатыуҙа хаҡы ирекле

www.kiskeufa.ru

10 - 16 ОКТЯБРЬ (ҠАРАСАЙ) 2009 ЙЫЛ

№41 (355)



## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Уҡыусыларҙың хеҙмәт емеше...**




5

**Милли йылылыҡ...**

үҙенә тарта барыбер ҙә



6

**Беҙҙе тыуҙырған да,**

туйындырған да ер был...



8-9

**Эсеүҙән ҡотолоп була**



13

**ТВ программа**

14





БАЙРАМ ҺҮҘЕ

# ҺАЙЛАҒАН ЮЛЫБЫҘ ДӨРӨҪ

"Суверенитет идеяһы Рәсәй өсөн генә түгел, ғөмүмән, кешелек һәм Ер шарындағы барлыҡ илдәр, дәүләттәр һәм милләттәр өсөн иң кәрәклеһе ул. Әгәр ҙә ысын мәғәнәһендәге суверенитет идеяһын аңлау донъялағы һәр кемдә йәшәһә, Ер шарында һуғыштар күптән тынып ҡалыр ине. Уның асылы ябай ғына: бер дәүләт, бер ил, бер милләт икенсеһенең эске эштәренә, тормошона, йәшәү ҡанундарына тығылырға тейеш түгел һәм һәр кеше үҙе нисек теләй, шулай йәшәргә хаҡлы. Рәсәй Федерализмын төҙөүҙә лә төп идея булып суверенитет идеяһы ятырға тейешле. Рәсәй тик Мәскәү менән генә көслө була алмай һәм үҙәктең был эш көсөнән дә килмәй. Рәсәй бары тик көслө төбәктәр, өлкәләр һәм республикалар берҙәмлегендә генә көслө була ала. Минеңсә, беҙ суверенитет идеяһына кире әйләнеп ҡайтасаҡбыҙ әле. Бәлки, уның термины ғына үҙгәрер, әммә был идея йәшәйәсәк. Шул идея йәшәгән өсөн дә кешелек йәшәйәсәк".

**Александр ФИЛИППОВ,**
**Башҡортостандың халыҡ шағиры.**

"Республикабыҙҙың үҙаллылығы тигән төшөнсә халыҡ күңелендә барыбер нығынып ҡалды. Декларация ҡабул ителгәндән һуң, республикабыҙҙың Рәсәй Федерацияһы составындағы үҙ аллы демократик дәүләт булыуын бер кем дә инҡар итә алмай хәҙер. Ун туғыҙ йыл үҙ аллы республика һаналабыҙ. Аҙмы был, күпме? Тарих өсөн аҙ, әлбиттә. Ләкин яуланған ҡаҙаныштарҙы барлап сыҡҡанда, ғорурлыҡ тойғоһо кисерергә мөмкин. Тимәк, ваҡытында дөрөҫ юл һайлағанбыҙ".

**Рәшит ШӘКҮР,**
**филология фәндәре докторы, профессор.**

"Суверенитет күктән төшкән нәмә түгел, ә халыҡ тарафынан көҫәп, теләп, яулап алынған еңеү ул. Советтар Союзы ваҡытында уҡ Башҡортостаныбыҙҙың иҡтисади потенциалы юғары булыу һөҙөмтәһендә уны союздаш республика итеп таныу талабы аҫтында йөҙәр меңләп ҡултамғалар йыйылды. Шул нигеҙҙә тыуған талап Дәүләт суверенитеты тураһындағы декларацияға әүерелде. Республикала йәшәгән халыҡтарҙың, милләттәрҙе айырмайынса, берҙәм булыуы, күпселегенең ихтыяжы булып күҙалланды ул. Башҡортостанда бер ҡасан да, Рәсәйҙән айырылабыҙ, тигән һүҙ булманы, маҡсат - Рәсәй эсендә суверенитет төҙөү ине һәм беҙ уға ирештек. Был беҙгә республикабыҙҙың үҙенең социаль-иҡтисади сәйәсәтен алып барыу, ә электән булған иҡтисади потенциал яуланған уңыштарҙы һаҡлап ҡалыу, үҫтереү мөмкинлеген бирҙе".

**Ғәлинур ҠАЛМЫРҘИН,**
**Ғафури район хакимиәтенең мәғлүмәт-аналитика бүлеге начальнигы.**

# Хәҙерге сәйәси шарттарҙа милли хоҡуҡтарыбыҙҙы яҡлау һәм һаҡлау йәһәтенән ниндәй ғәмәлдәргә өҫтөнлөк биреү фарыз?

**Моразым САЛАУАТОВ, хеҙмәткәр:**

- Рәсәй дәүләтселеге баштан уҡ империя формаһын алып, үҙенең йәшәү арауығын киңәйтеү маҡсатын алға һөрә, башҡа ваҡыраҡ милләттәр йәшәгән ерҙәр иҫәбенә ҙурая бара. XX быуат башындағы революцион ваҡиғалар һөҙөмтәһендә империя юҡҡа сыҡҡан кеүек булһа ла, ул Советтар Союзы исеме аҫтында яңы рәүештә тергеҙелде. Үҙегеҙ уйлап ҡарағыҙ: Рәсәйҙең бөтә ер аҫты байлыҡтары - алтын, алмаз, нефть, газ, башҡа ҡиммәтле мәғдән ятҡылыҡтары милли төбәк ерҙәрендә табыла. Ошо ерҙәрҙә йәшәүсе аҙ һанлы милләттәр элек тә, хәҙер ҙә ошо байлыҡтарҙан мәхрүм ҡалып, Үҙәктән һораныр йәшәргә мәжбүр ителә. Советтар осоронда бөтә байлыҡ дөйөм халыҡ милкендә, тип һаналһа ла, яҡуттар, ханты-мансиҙар, алтайҙар, башҡорттар, татарҙар һәм башҡа аҙ һанлы халыҡтар үҙ ерҙәренә үҙҙәре хужа була алманы, был идеологик уйҙырма ғына булып ҡалды.

1917 йылға тиклем бары бер башҡорт халҡы ғына үҙенең ергә аҫабалыҡ хоҡуғын һаҡлап ҡалыуға өлгәшә. Был хоҡуҡҡа хатта урыҫтарҙың үҙҙәрендә лә бары тик дворяндар сословиеһы ғына эйә булған, ә уларҙың һаны бик сикләнгән икәнен яҡшы беләбеҙ. Ҡыҙғаныска ҡаршы, 70 йыл дауамында халҡыбыҙҙың ошо хоҡуғы менән бергә элек иң изгеләрҙән һаналған аҫабалыҡ тойғоһо ла юҡ ителде, был милли тарихыбыҙҙа иң ҙур һәм аяныслы юғалтыуға тиң. Тап ошо сәбәпле халыҡ рухи төшөнкөлөккә бирелә лә инде.

Хәҙерге Рәсәй сәйәсәте лә ошо һыналған тарихи традицияны дауам итә. Совет империяһы тарҡалғас, Рәсәй өҫтөнлөк иткән даирә ныҡ ҡына тарайҙы. Капиталистик мөнәсәбәттәр урынлаштырылып, шәхси милекселеккә ҡоролған иҡтисади система үҙенең йәшәү ресурстарын милли төбәктәрҙән һура. Тап шуның өсөн Рәсәй составындағы республикаларҙың суверенитеты юҡҡа сығарылды, Федераль үҙәк төрлө ысулдар менән халыҡтарҙың үҙаллылығын мөмкин булғанса сикләргә тырыша. Беҙ телебеҙҙе тергеҙеп, тарихи хәтеребеҙҙе яңыртырға ынтылһаҡ, Рәсәй шовинистары быны тапап ташларға әҙер генә тора. Бына Силәбе ҡалаһында исеме халҡыбыҙ хәтерендә һиил йәлләд сифатында ҡалып, мәңгелек ҡарғыш уҙырылған суҡынған татар мырҙаһы Алексей Тевкелевҡа һәйкәл ҡуйырға йыйыналар. Быны беҙҙең милли аңыбыҙҙан, тарихыбыҙҙан усал көлөү тип ҡарамайынса булмай.

Мине милли хоҡуҡтарыбыҙ өсөн көрәшкә сығырға әҙер булған йәштәребеҙ ҡыуандыра. Әммә уларҙы бер ниндәй закон нормаларын боҙмаған хәлдә лә, милли тупланыш юлында әүҙемлек күрһәткәндәре өсөн генә лә яуаплылыҡҡа тарттырырға, эҙәрлекләүгә дусар итергә теләүселәр ҙә бар. Был авторитар система сәйәсәтенең бер сағылышы ғына: йәштәребеҙ йөрәгенә ҡурҡыу тойғоһо һалырға тырыша улар. Ҡурҡытылған халыҡ үҙенең законлы хоҡуҡтарын да яҡлай алмаясаҡ, шуның өсөн янау-эҙәрлекләүҙәргә ҡыйыу рәүештә ҡаршы тора алыу кәрәк. Бына нисек бит ул: бергә тупланып, милли-мәҙәни саралар уҙғарған йәш активистарҙы эҙәрлекләүҙе ойоштороусылар законһыҙ ғәмәлдәрен үҙ эштәрендәге етешһеҙлек тип кенә ҡарай. Тимәк, беҙгә алдағы көндәребеҙҙә лә уяу булырға, үҙ халҡыбыҙ хоҡуҡтарын мөмкин булған барса законлы юлдар менән яҡларға тура киләсәк.

Йәнә, үҙебеҙҙең тарихи ысынбарлыҡ тыуҙырған хоҡуҡтарыбыҙҙы Рәсәй етәкселегенән таныта алыу зарур. Бөгөнгө Рәсәй территорияһын боронғо замандарҙан уҡ берләштереп тороусы төрлө дәүләтселек формалары булған, унда ата-бабаларыбыҙҙың билдәле үҙаллылыҡ шарттарында йәшәй алыуын беҙ милләтебеҙ өсөн үтә мөһим фактор итеп күрһәтә алырға тейешбеҙ. Әгәр федераль етәкселек Рәсәй республикаларындағы титуллы милләттәрҙең дәүләтселек хоҡуҡтарын таныһа, ул тотороҡло йәшәйәсәк. Тарих - беҙҙең нигеҙебеҙ, әгәр ошо нигеҙҙе емерәләр икән, Рәсәй дәүләтселегенең дә емерелеүе бар бит. Рәсәй киләсәгенә ике хәүефле көс янай: береһе уны төрлө аҫтыртын юлдар менән тыштан тарҡатырға ынтылыусылар булһа, икенсеһе - башҡа милләттәрҙең хоҡуҡтарын һанға һуҡмаған шовинистар хәрәкәте. Рәсәй бары тулы хоҡуҡлы милләттәрҙең ирекле федератив берләшмәһе рәүешендә генә йәшәй аласаҡ.

**Румил АҘНАБАЕВ, "Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы (конгресы)" Башҡарма комитеты рәйесе:**

- Телебеҙҙе һаҡлау һәм үҫтереү өсөн тейешле шарттар булдырыу башҡорт йәмәғәтселегенең иғтибар үҙәгендә булды, һәм милләтебеҙ өсөн үтә мөһим булған был мәсьәлә үҙенең әһәмиәтен киләсәктә лә юғалтмаясаҡ. Ҡыҙғаныска ҡаршы, һуңғы йылдарҙа тап ошо юҫыҡта беҙ Үҙәк власть органдарының беҙҙең хоҡуҡтарыбыҙҙы инҡар итергә самалауын күрәбеҙ. Рәсәйҙең Мәғариф министрлығы етәкселеге милли республикаларҙа йәшәүсе халыҡтарҙың балаларын үҙ телендә уҡыта алыу хоҡуғын бар тип тә белмәй, ошо хоҡуҡты ғәмәлгә ашырыу мөмкинлеген юҡҡа сығарған закондар ҡабул итә. Рәсәйҙең "Мәғариф тураһында"ғы Законынан белем биреүҙең милли-төбәк компоненттын алып ташлау тап ошо сәйәсәттең асыҡтан-асыҡ сағылышы булып тора. Беҙ тел буйынса хоҡуҡтарыбыҙҙы инҡар итеүгә ҡырҡа ҡаршы сығып, даими рәүештә төрлө саралар ойоштороп, Федераль Үҙәккә үҙ талаптарыбыҙҙы еткереп торабыҙ. Бына әле ваҡ ауылдарыбыҙҙағы мәктәптәрҙе һаҡлап ҡала алыу, ҡалаларҙағы лицей-гимназияларҙың эшмәкәрлеген тәьмин итеү буйынса проблемалар барлыҡҡа килде, сөнки улар йән башына ҡарап финанслау шарттарында етди ауырлыҡтар кисерә. Башҡарма комитеттың башҡорт телен өйрәнеү һәм һаҡлау, милли мәғариф һәм кадрҙар әҙерләү буйынса комиссияһының сираттағы ултырышында ла мәғариф өлкәһендә ғәмәлгә ашырылған ҡулайлаштырыу программаһының милли мәктәптәр өсөн бик хәүефле булыуы тураһында һүҙ барҙы. Был бик ҡатмарлы мәсьәләне башҡа милли республикалар йәмәғәтселеге менән килешеп, бергәләшеп сығыш яһау һәм Рәсәй етәкселегенә үҙ талаптарыбыҙҙы еткереү аша хәл итеп булыр, тип өмөтләнәбеҙ.

**Риф ИҪӘНОВ, "Урал" башҡорт халыҡ үҙәге рәйесе:**

- Балыҡ башынан серей, тип халҡыбыҙ юҡҡа ғына әйтмәгән. Ниндәй низағ булмаһын, ниндәй хилафлыҡ ҡоролмаһын, милли хоҡуҡтарҙы ҡыҫыу буйынса ниндәй яманлыҡтар ҡылынмаһын, бөгөн барыһы ла Үҙәктән башлана. Ул тел мәсьәләләре булһынмы, ер һатыуымы, сәнәғәт предприятиеларын ҡулға төшөрөүме, бер ғәйепһеҙ йәштәрҙе экстремизмда ғәйепләп маташыумы - былар барыһы ла халҡыбыҙҙың иң әүҙемдәрен, бигерәк тә зыялы заттарҙы ҡурҡытып тотоу маҡсатында башҡарыла. Әгәр беҙ ошоларҙың барыһына ла риза булып, өндәшмәй-нитмәй генә ҡабул итәбеҙ икән, беҙгә шовинистар хужа буласаҡ.

Мине үҙебеҙҙең төрлө министрлыҡтарҙа, ведомстволарҙа ултырған чиновниктар позицияһы хафаға һала. Бына әле генә Ҡоролтайыбыҙҙа милли мәғариф буйынса уҙғарылған фекер алышыуҙа БР Мәғариф министрлығы вәкилдәре, күҙ ҙә йоммай, бына беҙгә фәләнсә йылда фәләнсә инструкция төшөрөлгән, мәктәптәрҙе финанслау формулаһы бирелгән, һәм беҙ шунса мең класс-комплекты, шунса мең уҡытыусыны ҡыҫҡартасаҡбыҙ, тинеләр. Эйе, чиновник хәлен аңлап була, тик уларҙың граждан лыҡ һәм башҡортлоҡ позицияһын, дөрөҫөрәк әйткәндә, ошондай позицияның булмауын аңлатыуы ауыр. Ил, халыҡ мәнфәғәттәрен яҡлау һәм һаҡлау урынына былдай эшем эйәләре үҙҙәре биләгән урынды яҡынырак күрә. Ғөмүмән, үҙебеҙҙең Мәғариф министрлығының Федераль үҙәктән төшөрөлгән һәр күрһәтмәне һис бер ҡаршылыҡһыҙ үтәргә әҙер тороуы аптырата. Әйткәндәремдең гилләһе лә шунда: беҙҙе батша ла, министр ҙа, герой ҙа ҡотҡармаясаҡ, әгәр үҙ хәлебеҙҙе белә тороп, милләтебеҙҙе һаҡлау һәм яҡлау сараларын үҙебеҙ тапмаһаҡ. Халҡыбыҙға бер генә заманда ла ирекле йәшәү еңел бирелмәгән, шуның өсөн милли хоҡуҡтарыбыҙ хаҡына артабан да көрәш юлынан тайпылмау зарур беҙгә.

**Әмир ҒҮМӘРОВ, хәбәрсе:**

- Иван Грозныйға тиклемге Рус батшалығының биләмәһен күҙ алдына килтереп ҡарағанығыҙ бармы? Дөрөҫөн әйткәндә, хәҙерге Рәсәй Федерацияһының 5 проценты самаһы ғына. Тимәк, Рәсәйҙең барлыҡҡа килеүе нигеҙендә башҡа халыҡтарҙың ерҙәрен баҫып алыу механизмы ята. Һәр бер империя ҡасандыр барлыҡҡа килә һәм юҡҡа сыға. Был - аксиома һәм Рәсәй үҙенең киләсәге хаҡында уйлаһа, айырым дәүләт булараҡ һаҡланып ҡалғыһы килһә, үҙенең империал асылын үҙгәртергә тейеш. Элекке Рәсәй патриархы Алексей II үҙенең сығыштарында был фекерҙе бер туҡтауһыҙ ҡабатлап килде һәм "Әгәр ҙә Рәсәй киләсәген бер милләтле, бер динле итеп күрергә теләй икән, уның һәләкәте ошонда башлана. Рәсәйҙең киләсәге - күп динлектә һәм күп милләтле булыуҙа", тип белдерҙе. Аллаһы Тәғәлә хозурына ирешә алған патриарх беҙгә ошондай фекерҙе әйтә икән, был - хәҡиҡәттең үҙе. Тимәк, милләтебеҙҙең үҙ диненә ҡайтыуы, тәриҡәт юлына баҫыуы беҙҙең көрәштең мөһим бер өлөшө икәнлеге көн кеүек асыҡ. Батшалыҡ дәүерендә лә, федерация осоронда ла үҙенең вәкәләтлеге аҫтындағы халыҡтарҙы бер туҡтауһыҙ ҡыйырһытып, хоҡуҡтарын, динен, телен, мәҙәниәтен инҡар итеүселәрҙе күрмәй, белмәй тиһеңме Аллаһы Тәғәлә? Барлыҡ кешелек, донъя халыҡтары икенсе ҡиммәттәр менән яңы эраға аяҡ баҫҡан саҡта Рәсәйҙең һаман да мандый алмауы ла ошоға бәйле бит.

**Вәли ИҘРИСОВ яҙып алды.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✔БР Президенты Мортаза Рәхимов "Электр энергетикаһы ойошмаларының һәм торлаҡ-коммуналь хужалығы предприятиеларының 2009-2010 йылдарҙың көҙгө-ҡышҡы осоронда эшләүгә әҙерлеге барышы" мәсьәләһе буйынса РФ Хөкүмәте Рәйесе Владимир Путин үткәргән селектор кәңәшмәһендә ҡатнашты. Башҡортостан энергетикаһы һәм торлаҡ-коммуналь хужалығы предприятиеларының ҡышҡы осорҙа эшләүгә әҙерлеге тураһында БР Президенты Мортаза Рәхимов хәбәр итте. Путин Башҡортостандың ҡышҡа әҙерлеген юғары баһаланы. Шулай уҡ Башҡортостан тәжрибәһен Рәсәйҙең төбәктәр үҫеше министры В. Басаргин да һыңғай яҡтан билдәләп үтте.

✔Бынан ете йыл элек Фән һәм техника өлкәһендә республика дәүләт йәштәр премияһы булдырылғайны. Быйыл был премияға Өфө дәүләт авиация техник университетынан Роберт Саттаров, Башҡорт дәүләт педагогия университетынан Андрей Бунаков менән Рөстәм Рәхмиев, Башҡорт дәүләт университетынан Рәсих Зәйтүнов лайыҡ булды. Лауреаттарҙы БР Хөкүмәте Премьер-министры Раил Сарбаев тәбрикләне.

✔Башҡортостан делегацияһы 112-се Башҡорт кавалерия дивизияһы һәм уның легендар етәксеһе генерал-майор Миңлегәле Шаймуратовтың данлы яу урындарына - Украинаға барып ҡайтты. Делегация Украинаның бер нисә ҡала-ҡасабаһында булды, арҙаҡлы генералдың һәләк булған урынына сәфәр ҡылды, Петровское ҡалаһында башҡорт атлылары иҫтәлегенә асылған скверҙы, Миңлегәле Шаймуратовҡа арналған һәйкәл-таҡтаташты ҡараны.

✔Билдәле шашкасы, донъя чемпионкаһы Тамара Танһыҡҡужина бер юлы йөҙ ҙә ике кеше менән уйын сеансы уҙғарҙы. Тамара был уйында 77 тапҡыр еңеүгә өлгәште, 18 уйында иҫәп тигеҙ булды. Был рекорд раҫланһа, яҡташыбыҙ Гиннестың рекордтар китабына эләгергә мөмкин.

✔Башҡортостан етештереүселәре "Алтын көҙ - 2009" Рәсәй күргәҙмәһендә ҡатнашырға йыйына. Унда барлыһы 40 предприятие, ойошма үҙ продукцияһын ҡуясаҡ.

*✓ Һалҡын баштар күп. Ҡайнар йөрәклеләрҙе лә табып булалыр әле Рәсәйҙә. Ә бына таҙа ҡуллылар бик һирәк. Әллә ундайҙарҙы Бөйөк Октябрь революцияһынан һуң тарих сүплегенә илтеп түккәндәр инде?*



АҘНА ШАҢДАУЫ

# КОРРУПЦИЯ - БЕҘҘЕМЕ, ӘЛЛӘ БЕҘ - УНЫМЫ,

## йәки Дәүләтте эстән "ашаған" был яман сир менән нисек көрәшергә?

**Коррупция менән көрәшәбеҙ, йәмәғәт! Корр-р-рупция менән! Ниндәй яңғырауыҡлы, матур һүҙ, эйе бит? Бер йыл буйына бара икән был алыш илебеҙҙә. Былтыр октябрь айында РФ Президенты Дмитрий Медведев ҡушҡан булған уның менән көрәшергә. Быйыл иһә һөҙөмтәһен көтәләр, имеш.**

Коррупцияны күп башлы йылан һымаҡ күреп китәм, әй. Самый аждаһа. Йәки сәмреғош. Бер башы көнсығышҡа ҡарай, икенсеһе көнбайышҡа. Һәм һәр береһе үҙенә кәрәген өҙөп алырға, йолҡоп йоторға әҙер генә тора. Уның баштарын сабып өҙөү, ай-һай, еңел эш түгел. Ғәйәт күп көс тупларға кәрәк тә баһа. Әйтергә кәрәк, беҙҙекеләр ятып ҡалғандан түгел. Коррупция менән көрәшкә Рәсәй Федерацияһының Эске эштәр министрлығы, Генераль прокуратура һәм уның эргәһендәге Тикшереү комитеты күтәрелгән. Ниндәй көс, ә? Уға теләһә ниндәй аждаһа ла пүстәк кенә бит. Аждаһа, тигәнен, нимә була һуң, тиһегеҙме? О-о-о, йәмәғәт, аждаһа - ул ябай хайуан түгел. Ул бик мәкерле. Яман шеш кеүек. Тыштан күренмәй ҙә, һиҙелмәй ҙә. Ә эстән ипләп кенә ашай. Кимерепме кимерә. Ҡортоң ары торһон. Яман шештең сере нимәлә? Ул бит күҙәнәктәрҙе үҙенсә үҙгәртеп ҡора. Һөҙөмтәлә улар ике-өсбиш тапҡырға тиҙерәк үсешә һәм йылдам тарала. Береһенән-береһе шәберәк ҡылана. Шеш үҫә лә үҫә. Ҡотора. Бер саҡ организм эшләүҙән туҡтай. Сөнки, уның ағзалары йәшәү көсөн юғалта. Ул үлә. Юҡҡа сыға. Саңға әүерелә. Организм урынына дәүләтте ҡуйып ҡарағыҙ әле. Киләсәгебеҙ аяныслы тойолмаймы? Дәүләтебеҙҙе яман сир баҫып алып бара ла баһа. Дәүләт органдары эстән коррупция менән үтәнәнүтә зарарланған түгелме?

Нимәне аңлата икән был яңғырауыҡлы һүҙ, тип, һүҙлекте асып ҡарайым. Латинсанан "боҙоу" була, имеш. Дәүләт органдарында эшләүселәр боҙолоп барыусан, тимәк. Әллә үҙҙәре боҙола, әллә кемдер ситтән килеп боҙоп китә. Дәүләткә хеҙмәткә, Феликс Дзержинский әйтмешләй, һалҡын башлы, ҡайнар йөрәкле һәм таҙа ҡуллы кешеләрҙе генә алырға ине лә бит. Булмай икән шул. Һалҡын баштар күп әле илебеҙҙә. Ҡайнар йөрәклеләрҙе лә табып булалыр әле Рәсәй киңлектәрендә. Ә бына таҙа ҡуллылар бик һирәк. Әллә ундайҙарҙы Бөйөк Октябрь революцияһынан һуң ҡырып-һеперп, тарих сүплегенә илтеп түккәндәр, лагерь саңына әүерелдереп, елгә осорғандар инде? Әллә дәүләт органдарына эшкә килһә, теләһә кем боҙола һалып бара микән? Әйтәйек, көтөүсе. Ул коррупцияға биреләме? Әлбиттә, юҡ, тиерһегеҙ. Ул бит көтөүсе, ә губернатор түгел! Ул да боҙолорға мөмкин икән шул. Мәсәлән, ул үҙенең көтөүендәге һыйырҙар өсөнән булған власы (йәғни, сыбыртҡыһы) менән файҙаланып, үҙенә ниндәйҙер файҙа күрә башлаһа (һөттәрен һауып алып, үҙе эсһә), уны саф күңел менән рәшәткә артына ябырға була. Сөнки ул, йәмәғәт, коррупционер. Ә көтөүсене губернатор итеп ултыртһаң, ә? Бөгөн ҡайһы бер түрәләребеҙ, тап ана шул көтөүсе кеүек, беҙҙе, көтөүҙә йөрөгән һыйырҙарҙы, "һауа ла һауа" икән. Башҡалар тарафынан бирелгән вәкәләтлектәрҙе үҙ мәнфәғәттәрендә файҙаланыусылар була улар. Дәүләт ҡаҙнаһы менән үҙ кеҫәһен бутаусылар ҙа улар.

Үткән аҙнала өҫтә әйтеп үтелгән ведомстволарҙың етәкселәре Рәсәй Дәүләт Думаһында депутаттар алдында коррупция менән бер йыл көрәштә өлгәшкән уңыштары хаҡында һөйләп үтте. Улар һоҡландыра. Ғәжәпләндерә. Аптырата. Хайран ҡалдыра. Күҙҙе аҡайта. Рәсәй Генераль прокуроры Юрий Чайканың һүҙҙәренә ҡарағанда, 2009 йылдың беренсе яртыһында ғына дәүләт хеҙмәте тураһындағы закондарҙы боҙоуҙың 11 меңдән ашыу осрағы теркәлгән. Бик етди һан был. 2009 йыл эсендә генә коррупция өсөн 532 чиновник һәм 764 хоҡуҡ һаҡлау органдары хеҙмәткәре яуаплылыҡҡа тартылған. Тағы ла 6 меңгә яҡын эш әле ҡарала ғына. Эске эштәр министры Рәшит Нурғәлиевты тыңлаһаң иһә, бар коррупционерҙар урындарҙа - өлкәләрҙә һәм республикаларҙа, ҡалаларҙа һәм райондарҙа ғына тупланған булып сыға. Ул миҫал итеп Карелия вице-премьеры вазифаһын башҡарыусыны, Курган өлкәһенең вице-губернаторын, Ставрополь край думаһы рәйесен, Орел, Волгоград, Курган өлкәләре губернаторҙарының урынбаҫарҙарын атаны. Һәм исемен атамай ғына бер генә бөртөк федераль министрҙың урынбаҫарын телгә алып үтте. Тимәк, властың өҫкө яғында, федераль кимәлдә коррупцияны еңгәндәр булып сығамы? Тимәк, йәмәғәт, илебеҙҙәге барлыҡ таҙа ҡуллылар унда, Мәскәүҙә, министрлыҡтарҙа һәм ведомстволарҙа, Аҡ һәм башҡа төҫтәге йорттарҙа йыйылған булып сығамы? Күп түгел икән беҙҙең илдең таҙа намыҫлы кешеләре. Шуныһы ҡыуандыра - өҫтә еңгәс, аҫта ла өмөтләнергә була бит. Тимәк, йәмәғәт, илебеҙҙә коррупция бына-бына еңелергә тора?

Юҡ икән шул. Ябай коррупциянан тыш, уның тағы ла башҡа төрҙәре лә бар икән. Депутаттар, мәҫәлән, сәйәси коррупция хаҡында бик ҡыҙыҡһынғандар. Баҡтиһән, был мәсьәлә, коммунистарҙы һәм либерал-демократтарҙы, ә ябайыраҡ итеп әйткәндә, Зюганов менән Жириновскийҙы айырыуса борсой, имеш. Ул нимәлә сағыла инде, тип һорарһығыҙ. Йәнәһе, һайлауҙар ваҡытында хоҡуҡ һаҡлау органдары, прокуратура, башҡа "көслө" ведомстволар власть партияһы яғына баҫа, уның мәнфәғәттәрен яҡлай, ә был иһә, депутаттар фекеренсә, сәйәси кимәлдәге коррупция. Йәғни, власты айырым бер төркөм кешеләр өсөн файҙаланыу. Улай булғас, Советтар Союзында бөтәһе лә власть партияһы, йәғни Коммунистар партияһы өсөн булды бит. Илебеҙ коррупция менән элек-электән зарарланған булған да баһа.

Ысынлап шулай микән, тип уйлайһығыҙмы? Әлбиттә, юҡ. Рәшит Нурғәлиев шунда уҡ әйткән бит, "эске эштәр министрлығы сәйәсәт менән шөғөлләнмәй", тип. Генераль прокурор Юрий Чайка ла шул һүҙҙе тиерлек ҡабатлаған. "Беҙ һәр ваҡыт сәйәсәттән ситтә булдыҡ", тип, депутаттарҙы эстәрен ҡатырғанса көлдөргән, имеш.

2008 йылда "Форбс" журналы Рәсәйҙә дәүләт структураларында булған миллиардерҙар һаны буйынса донъяла беренсе урынға ҡуйғайны. Ғорурлана алабыҙ: Рәсәй парламентында, тип яҙа "Форбс", кәмендә 12 миллиардер бар. Уларҙың дөйөм байлығы 41 миллиард долларға етә. Әлбиттә, "Форбс"ҡа ышанырға ярамай. Улар, бәлки, беҙҙән көнләшеп шундай бәләкәй һандар күрһәтәләр. Асылда иһә, миллиардер һәм миллионерҙар Рәсәй власть структураларында улай әҙ түгелдер. Хатта илебеҙҙең баш ҡалаһы менән күп йылдар идара иткән кешенең дә бит хәләл ефетен ярлы тип әйтергә тел әйләнмәй.

Етәксе фәҡир булырға тейеш түгел. Юғиһә, ул урлаша башлай. Йәғни, икенсерәк әйткәндә, коррупция менән шөғөлләнә. Әммә илебеҙҙәге хәл үҙенсәлекле - беҙ барыбыҙ ҙа СССР-ҙа тыуғанбыҙ. Яңы Рәсәйгә буш кеҫә менән килеп индек. Түрә итеп ҡуйырлыҡ байҙарыбыҙ булманы. Шулай булғас, улар хәлләнеп алғансы түҙәбеҙ инде.

Һәм тағы ла... Быға тиклем Рәсәйҙе берҙәм дәүләт булараҡ тарҡатырға, юҡҡа сығарырға маташыуҙа милли республикаларҙы ғәйепләйҙәр ине. Йәнәһе, беҙгә башҡаларҙан күберәк кәрәк, йәнәһе, беҙ айырылырға, бүленеп сығырға ынтылабыҙ. Пүстәк икән ул. Һәр бер коррупционер, ришүәт аламы ул, законды боҙоп, үҙ кеҫәһен тултырамы, дәүләт ҡаҙнаһына ҡулын һуҙамы - дәүләтте юҡҡа сығарыу, бөтөрөү өсөн, ябай кешеләрҙә дәүләт органдарына ҡарата ышанмаусанлыҡ тыуҙырыу өсөн хәләнен килгәндең барыһын да "эшләй". Хәйер, уға бит дәүләт табышлы урын булараҡ ҡына кәрәк.

**Таһир ИШКИНИН.**

ӘЙТКӘНДӘЙ...



**Байрам алды көндәрендә Күгәрсен районы Хоҙайбирҙин ауылында үткән тантанала БР Хөкүмәте Премьер-министры урынбаҫары, мәҙәниәт һәм милли сәйәсәт министры Илдус Илешев быйылғы лауреаттарға - Флүрә Солтанова, Таһир Ишкинин һәм Юрий Ергинга Шәһит Хоҙайбирҙин исемендәге республика журналистар премияһын тапшырҙы. Еңеүселәрҙе ысын күңелдән ҡотлайбыҙ!**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Башҡортостан Республикаһы Президенты Мортаза Рәхимов Рәсәй Президенты кәңәшсеһе Вениамин Яковлев менән осрашты. Ул Башҡортостанға БДУ-ның 100 йыллығына арналған фәнни-ғәмәли конференция эшендә ҡатнашыу өсөн килгәйне.

✓Ҡотороу ауырыуын башлыса бүре һәм төлкөләр тарата. Ә был йәнлектәр беҙҙең республика биләмәһендә байтаҡ ҡына. Ҡотороу ауырыуын иҫкәртеү ниәтендә республикала бүре һәм төлкөләргә һунар итеүселәргә аҡсалата премиялар бирелеүе тураһында хәбәр ителде. БР Һунарсылар һәм балыҡсылар ассоциацияһы һунарсыларҙан бүре тиреһен - 1500 һумға, төлкө тиреһен 200 һумға һатып ала.

✓Армияға көҙгө саҡырыу старт алды. Был юлы Башҡортостандан 11 мең егет Ҡоралы Көстәр сафына алынасаҡ. Иң түәге сиратта үткән йылдарҙа төрлө сәбәптәр менән армияға саҡырыу кисектерелгән егерме йәштән өлкәнерәк егеттәр, шулай уҡ юғары белемлеләр алынасаҡ. Ун һигеҙ йәшлек кисәге мәктәп уҡыусылары әлегә армияға саҡырылмай -уларға уҡыу йорттарына инеп, ниндәйҙер профессиональ белем алыу мөмкинлеге биреләә. Быйыл яҙҙан башлап элек хөкөм ителгән егеттәрҙе лә армия сафына ала башлағайнылар, был әле лә дауам итәсәк.

✓Башҡортостан мосолмандары Диниә назараты эргәһендә Ислам ҡануниәте буйынса хәләл ризыҡ етештереүсе предприятиелар эшен контролләүсе махсус комиссия эшләйәсәк. Комиссия ағзалары ризыҡ етештереү технологияһын күҙәтәсәк, предприятиеларға махсус маркировкалар бирәсәк.

✓Быйыл йыл башынан авгусҡа тиклем Башҡортостанда 36332 бала тыуған, был былтырғы ошо осор менән сағыштырғанда 1,3 процентҡа күберәк. Тәбиғи үҫеш 8 ай эсендә 642 кеше тәшкил иткән. Тыуым буйынса республика Волга буйы федераль округында беренсе урында килә. Ғөмүмән, беҙ тыуымдың кире балансы һыҙатына Рәсәйҙә һуңғылар иҫәбендә, 1993 йылда ингәйнек, беренселәрҙән булып ул һыҙаттан сыҡтыҡ.

✓14-16 октябрҙә Башҡорт дәүләт аграр университетында "Мәғариф. Инновация. Экология" халыҡ-ара фәнни-ғәмәли конференция үтәсәк. Унда БДБ илдәренән, Германия, Дания, Нидерландтар, Рәсәйҙең төрлө төбәктәренән ғалимдар һәм фермерҙар ҡатнашасаҡ.

✓ *Республика көнө алдынан бюджет өлкәһендә эшләгән 120 хеҙмәткәр иң ҡәҙерле бүләккә эйә булды. Президентыбыҙ уларға Шамонино ауылында төҙөлгән йорттарҙың асҡысын тапшырҙы.*



*БАЙРАМ АЙҠАНЛЫ*

# ИЛ АҒАҺЫНАН УҢДЫҠ

**Халҡыбыҙ борон-борондан етәкселек вазифаһына үҙенең иң аҡыллы, батырлыкта һәм саялыкта тиңһеҙ, лайыҡлы ил уҙамандарын һайларға тырышҡан. Бөгөн дә беҙ ошо йолабыҙға тоғробоҙ: тыуған Башҡортостаныбыҙҙағы хәлдәрҙең тотороҡлолоғо һәм төбәктең бай, тыныс тормош менән йәшәүе, тәү сиратта, үҙебеҙ һайлап ҡуйған, үҙебеҙ ышаныс күрһәткән Президентыбыҙ Мортаза Ғөбәйҙулла улы Рәхимовтың исеме менән бәйле.**

Әле мин Мортаза Ғөбәйҙулла улының эшмәкәрлеген һәр яҡлап байҡау яһауҙы, сәйәси терминдар йәки ҡоро һандар, факттар килтереүҙе маҡсат итеп ҡуймайым. Бары тик Республика көнөн байрам иткән көндәрҙә Президентыбыҙҙың хәстәрлекле ил ағаһы һәм һәр хәл-ваҡиғаны алдан күрә белеү һәләтен тағы бер тапҡыр әйтеп үтергә генә уйланым. Әле бына тормош иптәшем менән 90-сы йылдарҙағы ваҡиғаларҙы хәтерләп ултырҙыҡ. Ул саҡта илебеҙҙә колхоз-совхоздар тарҡатылып, хеҙмәтсәндәргә эш хаҡы түләүҙәр бөтөнләй туҡталып торғайны бит. Шул мәлдә беҙҙең Ишембай районынан һәр төрлө ҡатлам вәкилдәре тейәлгән автобус Ырымбур тарафтарына юлланды. Орденлы механизатор булараҡ, ирем Рәсүл Нәсим улы ла улар араһында ине. Ишембайҙарҙы Переволоцкий районының ҡасандыр иң эре, ҡеүәтле һаналған совхоздарының береһенә алып баралар. Унда күргәндәрен ирем әле булһа тетрәнеп хәтерләй: "Гараждар буш, булған техника кешеләргә таратып бирелгән - кемдең ихатаһында, кемдең кәртә артында көрт аҫтында тутығып ултыра. Ҡаҙанлыҡ туҡтатылған, быялаһы ватылған тәҙрәләре өңөрәйеп тора, ә йорттар тәҙрәләренән һерәйеп сыҡҡан торбаларҙан ҡуйы ҡара һөрөмлө төтөн борхой. Буш фермаларҙың ишектәре, ел ыңғайына ыңғырашып, хәлдең ни тиклем аяныслы, ҡот осҡос икәнлегенә ишаралай төҫлө". Шөкөр, Мортаза Ғөбәйҙулла улы бөтөн Рәсәйҙә барған был ҡыйралыштан һаҡланы беҙҙе.

Башҡортостаныбыҙҙа барған матур үҙгәрештәр тураһында матбуғат биттәрендә уҡып, зәңгәр экрандарҙан ҡарап: "Вәт, исмаһам, эшләй ҙә, йәшәй ҙә беләләр!" - тип шатланып, алдынғы ҡарашлы етәксебеҙҙең халыҡтың йәшәү шарттарын яҡшыртыу буйынса алып барған сәйәсәтенә һоҡланыу ҡатыш ғорурланып ултырабыҙ.

Уҡытыусы булараҡ, мәғариф өлкәһендә башҡарылған эштәр, һәр төрлө яңылыҡтар менән даими ҡыҙыҡһынып барам. Яңыраҡ бер ауылдашым тыуған яҡтары Бөрйән районы Аҫҡар ауылына ҡайтып килеүен һөйләп торҙо: "Ауыл иҫ киткес матурланған, өр-яңы ике ҡатлы мөһабәт мәктәп астылар. Мортаза Ғөбәйҙулла улы ике тапҡыр килеп, эш барышын ныҡлы контролендә тотоп, заманса йыһазландырылған, бөтә уңайлыҡтары булған мәктәп астырыуға өлгәште". Артабан ауылдашым хеҙмәт дәрестәре өсөн килтерелгән төрлө-төрлө теген машиналары, станоктар, хатта һауыт-һаба йыуыу комбайны ҡайтарылғанын ғәжәп ҡылып һөйләне.

Сит республикаларҙан ҡайтҡан туғандар, ҙур ҡәнәғәтлек менән: "Һеҙ, башҡорттар, һис тә бирешерлек түгелһегеҙ, һеҙҙән ҡалышмаҫҡа тырышып, ҡайһы бер яҡтарығыҙ менән ярышып, үрнәк алып йәшәргә тырышабыҙ!" - ти һәм ҡайһы берҙә үҙебеҙ ҙә белмәй киткән киҫекһеҙлегебеҙгә, туйып һикереү осраҡтарына ишаралай. Эйе, ил башлығыбыҙҙан уңдыҡ, тип, ауыҙ тултырып әйтергә хаҡлыбыҙҙыр, сөнки хәҙерге заманда республикабыҙ етәкселегенең алдынғы эш алымдары, бай тәжрибәһе күп кенә төбәктәрҙә ентекле өйрәнелә, үҙләштерелә һәм, әлбиттә, өлгө итеп күрһәтелә. Былар тормошобоҙҙоң ҡотло булыуына, һәр яҡлап алға барыуыбыҙға дәлил.

**Райхана ЙӘҺҮҘИНА.**
**Ишембай районы.**

*БАЙРАМ ШАҢДАУЫ*

# ЙЫР-БЕЙЕҮҘӘР ШАУЫ ҺӘМ...



**Республика көнөндә - 11 октябрҙә өфөләләрҙе һәм баш ҡала ҡунаҡтарын ниндәй байрам саралары көтә?**

Байрам саралары иртәнге сәғәт 11-ҙә Дуҫлыҡ монументына сәскәләр һалыу менән башланып китә. Иртәнән алып кискәсә баш ҡаланың бөтә райондарында концерттар, фестивалдәр, конкурстар үткәреү ҡаралған. Төп байрам саралары, ғәҙәттәгесә, ҡала Советы алдындағы майҙанда үткәрелә. "Республикам минең!" йәштәр байрамы сәғәт 4-тә башлана. Байрамда республиканың билдәле фольклор һәм эстрада төркөмдәре, сәхнә йондоҙҙары сығыш яһаясаҡ. Шулай уҡ билдәле йәш Рәсәй йырсыһы, "Йондоҙҙар фабрикаһы" еңеүсеһе Иракли Пирцхалава, йәштәр араһында киң танылыу тапҡан ди-джей "Дино МС"-ның килеүе лә көтөлә.

Өфөләләрҙе быйыл яңы тамаша көтә. Кис майҙанда 20 сәғәт 20 минутта лазер шоуы күрһәтеләсәк. Баш ҡала халҡына бағыусылар тарафынан эшләнгән был байрам бүләге Өфөлә беренсе тапҡыр үткәрелә. Бындай лазер шоуҙар быға тиклем Мәскәүҙә һәм Санкт-Петербургта ғына күрһәтелгән булған. 21 сәғәттә, ғәҙәттәгесә, салют. Салюттан һуң концерт дауам итәсәк.

# ҮҘ ЙОРТОҢА НИ ЕТӘ!



**Республика көнө алдынан бюджет өлкәһендә эшләгән 120 хеҙмәткәр иң ҡәҙерле бүләккә эйә булды.**

Президентыбыҙ Мортаза Ғөбәйҙулла улы Рәхимов уларға Шамонино ауылында төҙөлгән йорттарҙың асҡысын тапшырҙы. Был аҙ ҡатлы торлаҡ төҙөлөшөн үҫтереүгә нигеҙләнгән "Үҙ йортом" программаһы үтәлеше барышында, йәғни киләһе биш йылда әҙ тәьмин ителеүселәр иҫәбенә ингән һәм үҙ йәшәү урындары булмаған 5000 кеше фатирлы буласаҡ. Аҙ ҡатлы йорттар Шамонино, Жуково, Алексеевка ауылдары янында үҫеп сығасаҡ. Шамонино ауылында тәүге йорттар яҙ көнө тапшырылғайны. Бында йәмғеһе 1200 йорт төҙөләсәк. Шуларҙың 450-һе әҙер тиерлек. Киләһе йылда юлға асфальт түшәү ҡарала. Мәктәп һәм балалар баҡсаһы проекты ла эшләнә.

# ФАТИР АСҠЫСЫ - БӘХЕТ АСҠЫСЫ



**Ҡала мәҙәниәт һарайында үткән тантанала бюджет хеҙмәткәрҙәрен республика Президенты Мортаза Рәхимов төп дәүләт байрамы менән ҡотланы.**

Республика көнө алдынан уҡытыусыларға, табиптарға, мәҙәниәт, хоҡуҡ һаҡлау органдары һәм сәнәғәт предприятиелары хеҙмәткәрҙәренә юғары дәүләт наградалары тапшырыу матур йолаға әүерелгән. Был юлы бындай бүләккә 11 кеше лайыҡ булды. Ошо уҡ тантанала бюджет өлкәһендә эшләгән 15 хеҙмәткәргә фатир асҡыстары ла тапшырылды. Яңы фатирға эйә булыусы уҡытыусылар һәм табиптар, артистар һәм участка милиционерҙарын ҡотлап, ҡала хакимиәте башлығы Павел Качкаев был фатирҙарҙа һәр ваҡыт йылы булыуын, балалар тауышы бер ҡасан да тынмауын теләне. Республика көнө алдынан бындай социаль торлаҡҡа бөтәһе 80 кеше эйә буласаҡ.

# ӘСӘ ТЕЛЕН БЕЛЕҮ... ХУПЛАНА



**Башҡортостан Республикаһының дәүләт һәм туған телдәрҙе үҫтереү һәм пропагандалауға өлөш индергән бер төркөм кешеләргә Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы премияһы бирелде.**

Быйыл был премияға 20 кеше лайыҡ булды. Улар араһында уҡытыусылар, журналистар, ғалимдар, ижад йорттары етәкселәре бар. "Һәр сабый үҙенең әсә телен белергә тейеш, - тине йыйылыусыларҙы сәләмләп баш ҡала округы хакимиәте башлығы Павел Качкаев. - Шуға күрә лә милли телдәрҙе үҫтереү өсөн тулы шарттар булдырыу дәүләт власы органдарының төп бурысы". Премияға лайыҡ булыусыларҙың һәр береһе ҡәнәғәтлек белдерҙе. Үҙҙәренең шәхесенә иғтибар, ғаилә бюджетына аҙ булһа ла өҫтәмә булырҙай премия аҡсаһы өсөн генә түгел, ә Өфөбөҙ етәкселәренең туған телдәргә, милли мәҙәниәткә бүленгән иғтибары өсөн дә. Бына нимә тине ошо турала филология фәндәре докторы, профессор Мөхтәр Әхтәмов:

- Әлбиттә, беҙ премия өсөн эшләмәйбеҙ, шулай ҙа бындай иғтибар һәр һөнәр эйәһенә тағы ла янып, дәртләнеп эшләргә ынтылыш, дәрт бирә. Премияны бигерәк тә Республика көнө алдынан алыу ҙур ҡыуаныс булды. Һуңғы осорҙа беҙҙең баш ҡалабыҙ шул тиклем ныҡ үҙгәрҙе, матурайҙы. Өфөбөҙ, гүйә, ҡырҙан килгән ҡунаҡтарға: "Мин Башҡортостандың баш ҡалаһы" тип ғорур ҡыҫҡырып торған кеүек. Туған телдәргә бындай иғтибар башҡа бер илдә лә юҡ. Башҡорт телебеҙҙең дә мәртәбәһе арта бара. Хәҙер һәр бер учреждениеның таҡтаташы дәүләт телендә яҙылған, транспорттарҙа ла мәғлүмәтте ике телдә еткерәләр. Әлегә тиклем бындай премиялар булғаны юҡ ине. Булдырылғас, тимәк, ошо өлкәлә алға китеш бар, ниндәйҙер ыңғай эштәр башҡарыла. Шуларҙы күреп, баһа биргән етәкселеккә ҙур рәхмәт...

## БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы эргәһендәге оператив кәңәшмәлә баш ҡаланың дауалау учреждениеларында "Электрон регистратура" программаһы индереү тураһында мәғлүмәт тыңланды. Был проект өфөләләргә телефон йәки интернет аша врачҡа яҙылыу мөмкинлеге бирә. Ул хеҙмәт төрө бөгөн бик күп дауаханаларҙа ҡулланыла. "Электрон регистратура" хеҙмәте менән файҙаланыу өсөн 246-46-46 телефонына шылтыратырға мөмкин.

✓Баш ҡаланың Сипайлово биҫтәһендә 5-се балалар поликлиникаһының филиалы файҙаланыуға тапшырылды. Жуков һәм Королев урамдары киҫелешендә урынлашҡан яңы филиал сменаға 300 баланы ҡабул итеүгә иҫәпләнгән. Бында 12 педиатрия участкаһы ун мең баланы хеҙмәтләндерәсәк. Реабилитация бүлеге лә эшләйәсәк. Шулай уҡ бында егерме биш урынға иҫәпләнгән көндөҙгө стационар асыу ҙа күҙҙә тотола.

✓Мәғариф өлкәһендәге "РейтОР" бойондороҡһоҙ агентлығы Рәсәй юғары уҡыу йорттарының фәнни ҡаҙаныштар буйынса рейтингын төҙөнө. Исемлектәге 50 вуз араһында Өфө дәүләт авиация техник университеты Мәскәү дәүләт университеты, Санкт-Петербург дәүләт университеты һәм Мәскәү инженер-физик институтынан ҡала дүртенсе урында килә.

✓Сипайлово биҫтәһендә тағы бер шатлыҡлы ваҡиға - Ҡариҙел йылғаһы ярында ташҡынға ҡаршы дамба төҙөлөшөнөң тәүге сираты асылды. Был биш километрға һуҙыласаҡ объектты төҙөүҙең төп маҡсаты - торлаҡ биҫтәһен ташҡындан һаҡлау һәм яр буйҙарын төҙөкләндереү. Ҡариҙел йылғаһы буйы Сипайловолағы иң күркәм ял урынына әйләнәсәк, тип көтөлә. Сөнки дамба баш ҡаланың эстетик йөҙөнә матурлыҡ та өҫтәйәсәк. Әле дамбаның 1, 4 км оҙонлоғондағы өлөшө файҙаланыуға тапшырыла, ҡалған 3,2 км оҙонлоғондағыһы проекттың икенсе сиратына индерелгән.

✓Әхмәтзәки Вәлиди исемендәге республика Милли китапханаһының үҫмерҙәр филиалында Республика көнөнә арналған "Башҡортостан - аҡ тирмәләр иле" тигән күргәҙмә эшләй. Бында килеүселәр халыҡ кәсептәре эштәре - башҡорт милли кейемдәре, археологик ҡаҙыныуҙар мәлендә табылған боронғо һуғыш кәрәк-яраҡтары, балсыҡ, сәйлән, батиктан эшләнгән әйберҙәр менән таныша ала.

ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!

**Үткән шәмбелә Спорт һарайы алдындағы майҙанда уҙғарылған йәрминкәлә йөҙгә яҡын лицей, һөнәри-техник училище, колледждар ҡала халҡына йәшелсә, ит, май, картуф, ярма, иген культуралары, ағастан, тимерҙән яһалған көнкүреш әйберҙәре, тегелгән һәм бәйләнгән кейем-һалым тәҡдим итте. Бигерәк тә ҡымыҙ, һыйыр майы, ҡорот, балға ихтыяж ҙур булды. Бындай йәрминкәләр ике яҡ өсөн дә отошло: уҡыусылар үҙҙәре етештергән тауарҙы һатып, файҙаһын күрергә өйрәнһә, ҡала халҡы экологик яҡтан саф аҙыҡ-түлек тауарҙарын, сифатлы башҡарылған ҡул эштәрен бик түбән хаҡҡа ғына һатып алыу мөмкинлегенә эйә булды. Шулай итеп, көн ямғырлы һәм һыуыҡ булыуға ҡарамаҫтан, йәрминкә йыр-бейеү менән гөрләне, майҙан һатып алыусылар менән шығырым тулды, уның һайын сауҙа ла ҡыҙа барҙы. Ә беҙ иһә төрлө һөнәр оҫталарына үҙ шөғөлдәре хаҡында һөйләп биреүҙәрен һорап мөрәжәғәт иттек:**



# УҠЫУСЫЛАРҘЫҢ ХЕҘМӘТ ЕМЕШЕ...

## ҡала халҡына хуш килде

**Зәлифә АЗАМАТОВА, Аҡъяр ауылы 110-сы һанлы һөнәрселек училищеһының китапханасыһы:** Мин училищела бер үк ваҡытта "Тегәм, бәйләйем, сигәм" тигән түңәрәк алып барам. Уҡыусылар менән шәлдәр бәйләйбеҙ, ултырғыс ябыуҙары, төрлө уйынсыҡтар эшләйбеҙ, сигеү сигәбеҙ. Шуныһы ҡыуаныслы: ҡыҙҙар был түңәрәккә әүҙем йөрөй. Ятаҡта ла ваҡыттарын бушҡа уҙғармай, ҡул эштәре башҡаралар. Был түңәрәктең әһәмиәте ҙур. Беренсенән, улар бында йөрөп, тормошта кәрәкле һөнәргә эйә була, икенсенән, шуны һатып, аҡса эшләргә өйрәнә. Унан һуң, бәйләү, сигеү менән шөғөлләнеү кешене тынысландыра, күңелен байыта, ижади һәләтен аса. Әле беҙ йәрминкәгә йәшелсәләрҙән тыш, балалар үҙҙәре әҙерләгән салаттарҙы, ҡырға сығып йыйған емештәрҙе алып килдек. Ғөмүмән, беҙҙең училищела балалар тәғәйен бер һөнәр алып сығыуҙан тыш, көндәлек тормоштағы эшкә лә өйрәнә.

**Сәйет КҮҘӘШЕВ, Мәләүез ҡалаһы 42-се һөнәрселек училищеһының өҫтәмә белем биреү уҡытыусыһы:** Мин лицейҙа ҡурайсылар түңәрәге алып барам, бынан тыш, балалар ижад һарайында эшләйем. Мәктәп, балалар баҡсаһында лекция-концерттар менән йөрөйөм. Музыканан уҡытыуыма 39 йыл була. Мин башҡорт уйын ҡоралдарының барыһында ла уйнай беләм, уларҙы үҙем эшләйем. Шуға ла әкренләп барыһының да тарихын, эшләнеү технологияһын өйрәнергә тура килде. Бына, әйтәйек, арыш баҫыуын сапҡас, ҡамылы тороп ҡала. Шул арыш һаламынан эшләнгән ҡурай ҡамыл ҡурай тип атала. Унан бик үҙенсәлекле көй сыға. Ҡамыш ҡурай төлкө ҡойроҡ ҡамыштан эшләнә. Ҡумыҙҙың да төрлөһө була: ауыҙ, ирен, яҡут ҡумыҙы. Дөңгөр, думбыра ла эшләйем. Ҡарауылсылар төндә үҙҙәренең уяу тороуын белгертер өсөн вертушка, кокошник ҡулланған. Һорнай башҡорт яугирҙарының йәки һунарсыларының сигнал биреүсе уйын ҡоралы булған. Уны һыйыр мөгөҙөнән эшләйҙәр. Баш йәки түңгәүер ҡурайын (уны тағы ла кире ҡурай тип тә атағандар) сәхнәгә иң тәү башлап Сәйфулла ағай Дилмөхәмәтов сығарҙы. Хәҙер был ҡурайҙа бик һирәк уйнала, унда уйнау өсөн тәрән тын кәрәк. Элек нәҙек тауыш сығарып уйнаған ҡурайсыларҙы, һыҙғыртып ҡыҙҙарса уйнай, тип бик ихтирам итеп еткермәгәндәр, ә бына күкрәккә һалып уйнағандарға ҙур баһа бирелгән. Тап шуға ла баш ҡурайҙа арҙаҡлы ҡурайсылар ғына уйнаған.

**Павел КАШКИН, Өфө ҡалаһының 64-се һанлы һөнәрселек училищеһы мастеры:** Беҙ әле йәрминкәгә ағастан эшләнгән һандыҡтар, өҫтәлдәр, ултырғыстар, туҙҙан яһалған тырыҙдар, гобелен картиналар, һүрәт төшөрөлгән батмустар, батик менән эшләнгән яулыҡтар һәм башҡа бик күп төрлө көнкүреш әйберҙәре алып килдек. Улар барыһы ла уҡыусыларҙың диплом эштәре. Мин үҙем маркетри буйынса мастер булып эшләйем. Маркетри (француз теләндә билдәләп сығыу тигәнде аңлата) - ул төҫө, текстураһы, һәм төрө буйынса айырылып торған ағас киҫәктәренән эшләнгән һүрәт. Ул биҙәү-ғәмәли сәнғәт әйбере иҫәпләнә һәм мебелде биҙәү өсөн хеҙмәт итә. Шулай уҡ ағаста мозаика яһап, үҙ аллы художестволы композициялар һәм панно эшләргә мөмкин. Бының өсөн алдан уйланылған эскиз буйынса төрлө ағас төрҙәренән 0,5-1 мм ҡалынлығындағы мозаика йыйылмаһы ҡырҡып алына. Был киҫәктәрҙе йәбештерә торған махсус таҫма менән бер-береһенә беркетеп ҡуялар. Әҙер йыйылманы нигеҙ итеп алынған ағас материал өҫтөнә йәбештереп, тирәяғын нығытып ҡуяһың. Артабан уны йышлап, тигеҙләп, өҫтөн төҫһөҙ буяу менән буяйһың. Был эштә төрлө ағас төрҙәрен, уларҙың иң сифатлы һәм сағыуҙарын һәм, иң мөһиме, материалдың тәбиғи һүрәтен (текстураһын) ҡулланып, юғары ижади балҡышҡа өлгәшергә мөмкин. Әйткәндәй, маркетри урта быуаттарҙа Көнбайыш Европала барлыҡҡа килгән. Уны беҙҙең илгә Петр батша алып ингән.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**"Һөнәрле булыу гәүһәрле булыуҙан мең артыҡ" тип әйтелә халыҡ мәҡәлендә. Ысынлап та, һөнәре булған кеше бер ваҡытта ла ас ултырмаҫ, ниндәй генә заманда ла малын да табыр, ғаиләһен дә аҫрар. Әлеге йәрминкәлә беҙ тағы ла бер тапҡыр ошоға шаһит булдыҡ. Ә был йәһәттән һөнәрселек училищелары тап ана шул көндәлек тормошта кәрәкле һөнәр эйәләрен әҙерләп сығарыусы уҡыу йорто булып тора ла инде.**

**Динара ЯҠШЫБАЕВА яҙып алды.**

ХОККЕЙ

# ҮКЕНЕСЛЕ ОТОЛОУ

Ситтә дүрт уйын үткәргәндән һуң "Салауат Юлаев" 8 октябрҙә Новосибирскиҙың "Себер" командаһын ҡабул итте. Командаларҙың турнир таблицаһында тотҡан урыны күк менән ер араһы. Юлаевсылар алда барыусылар сафында, ә "Себер" уйынсылары ҡойроҡта һөйрәлеүселәр араһында. Шулай булғас, майҙан хужаларының ҡунаҡтарҙы еңәсәге көйәрмәндәрҙә шик тыуҙырмай ине.

Бына уйын башланды. Юлаевсылар ҡунаҡтар ҡапҡаһы яғына ябырылды. Майҙан хужалары "Себер" уйынсыларын ярайһы уҡ еңел йырып инеүенә ҡарап, шайба оҙаҡламай ҡунаҡтар ҡапҡаһында оялаясаҡ, тип көттө көйәрмәндәр. Әммә бөтөнләй киреһе килеп сыҡты. Һирәк-һаяҡ һөжүм иткән ҡунаҡтар беренсе булып иҫәп асты. Күп тә үтмәй, юлаевсылар ҡапҡасыһы Виталий Колесник ҡапҡаһына икенсе гол индерелде. Ә майҙан хужалары И.Ключников ҡапҡаһын асырға аҫҡыс таба алманы. Һөҙөмтә: юлаевсылар беренсе осорҙо 0:2 иҫәбе менән отторҙо. Икенсе осорҙа "Себер" иҫәпте үҙ файҙаһына 3:0-гә еткерә.

"Салауат Юлаев" уйынсылары бары тик өсөнсө осорҙа ғына ҡунаҡтар ҡапҡаһына аҫҡыс тапты. Тәүҙә Виктор Козлов, унан Дмитрий Калинин 1-се һәм 2-се шайбаны индерҙе. Ә Сергей Зиновьев иҫәпте тигеҙләне: 3:3.

Матчтың яҙмышын буллиттар һуғыу хәл итте. Ҡунаҡтар мәргәнерәк булып сыҡты. Һөҙөмтәлә уйын "Себер" файҙаһына 4:3 иҫәбе менән бөттө. Шулай итеп, ҡойроҡта һөйрәлеүсе команда юлаевсыларға онотолмаҫлыҡ һабаҡ бирҙе. Үкенесле, үтә үкенесле.

**Юныс ӘХМӘҘИЕВ.**

ХАЛЫҠ ДАУАҺЫ

# ЯМАН ШЕШТӘН ҠУРҠҺАҢ...

## баҡсаңдағыларҙы эшкә ек



❖Кәбеҫтә менән шалҡан яман шештең үҫеүен туҡтата. Үкенес, ниңәлер хәҙер шалҡан сәсмәйбеҙ. ❖Томат - ул ир-ат йәшелсәһе: простата яман шешенән һаҡлай, тик ир-ат томатты ашай һалып бармай. ❖Яңы һығылған сөгөлдөр һуты ашҡаҙан, эсәк, бауыр, бөйөрҙәге яман шеште иҫкәртә, йүнәлтә. ❖Яман шештән һаҡланғығыҙ килһә, балыҡ, бигерәк тә диңгеҙ балығын ашағыҙ, улар ҡатын-ҡыҙҙы күкрәктәге яман шештән һаҡлай. ❖Туң майҙы күп ашау яман шешкә килтереүе ихтимал. ❖Бер үк майҙа аҙыҡты бер нисә рәт ҡыҙҙырмағыҙ һәм бешермәгеҙ: унда барлыҡҡа килгән ыҫмала яман шеш булдыра. ❖Күберәк майһыҙ һөт ризығы, майһыҙ эремсек ҡулланығыҙ. ❖Күгәргән ризыҡтарҙы ташлағыҙ, таҙа ерен дә киҫеп алмағыҙ, сөнки күгәргән аҙыҡ унға яҡын төрлө ағыу сығара һәм бауырҙа яман шеш тыуҙыра.

### Тәмәкеселәргә кәңәш

Урамға сыҡһаң да, телевизор тоҡандырһаң да, ир-ат та, ҡатын-ҡыҙ ҙа тәмәке борхота. Берәйһе кәңәшемә ҡолаҡ һалмаҫмы, тип яҙам. Сей муйылботағынан "шырпы"лар яһап алырға һәм тартҡы килһә, шуны сәйнәргә генә кәрәк. Бер ни тиклем ваҡыттан һуң тартыуҙы ташлайһың да ҡуяһың.

### Аяҡ-ҡул һыҙлаһа

Быяла банкаға бәпембә сәскәһен, бөрөләрен тултырып, өҫтөнә спирт ҡояһың һәм 30 көнгә ултыртып ҡуяһың. Шунан ошо төнәтмә менән һыҙлаған урыныңды ыуаһың. Бик уңайлы ысул, төнәтмә боҙолмай ҙа, ә бәпембә көҙгә тиклем сәскә ата.

### Сөйәл сыҡһа

❖Һуған ҡабығын аш һеркәһендә ике аҙна төнәтергә һәм сөйәл өҫтөнә һалып, сепрәк менән бәйләргә, төн сыҡҡансы тоторға. ❖Ирис япрағын иҙгеләп, бәйләргә. ❖А, Е витаминдарын, улар булған ризыҡтарҙы ашарға. ❖Элек беҙгә сөйәлде ай нуры төшкән ергә ышҡырға ҡушалар ине.

**Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.**




## ИР БАЛАЛАР ӨСӨН НӘСИХӘТ

### Мәктәп

● Мәктәпкә кергәндә аяҡ кейемдәрегеҙҙе, бүрек, тун кеүек тыш кейемдәрегеҙҙе билдәле ергә ҡуйып, мөғәллим һәм башҡа иптәштәрегеҙгә асыҡ йөҙ менән сәләм бирегеҙ һәм улар менән дәрес уҡырға башлағыҙ.

● Дәрес башланасаҡ ваҡыт етһә, һис кемде ҡыҫтамай, рәнйетмәй, әҙәпле генә урындарығыҙға ултырығыҙ. Әгәр урындарығыҙ ҡыҫтау булһа, көс ҡулланмай, тартҡылашмай, бәлки: "Шулай итһәгеҙ ине", - тип иптәшегеҙҙән урын һорағыҙ.

● Үҙегеҙ һис бер яҡҡа ауышмай, туп-тура мөғәллимгә ҡарап, иптәшегеҙ менән бер тигеҙ булып, тирә-яҡҡа ҡарамай, боролмай, күңелегеҙҙән шатланып ултырығыҙ. Мәктәпкә инеп-сығып йөрөгәндә инсафлы булығыҙ.

● Мәктәп эсендә булған тауыштарға ҡатнашмағыҙ, шаярыусы һәм тәрбиәһеҙ балалар менән иптәш булмағыҙ. Улар менән бер урында ултырмағыҙ, үҙегеҙгә билдәләнгән урындан рөхсәтһеҙ ҡуҫмағыҙ.

● Дәрес бирелгәндә икенсе дәрестәргә ҡарамағыҙ. Мөғәллим тарафынан бирелгән дәрескә тулыһынса күңел һалығыҙ. Һәр нәсихәтте зиһенегеҙгә урынлаштырығыҙ. Дәрес ваҡытында һөйләшмәгеҙ, башҡа нәмәләргә күңелегеҙҙе ебәрмәгеҙ. Бының өсөн остаздарығыҙҙан ризалыҡ алығыҙ. Ғилемегеҙҙән файҙа күрегеҙ.

● Мөғәллим һораған ваҡытта аяҡ өҫтө тороп, ҡулдарығыҙҙы ҡуҡрәгегеҙгә ҡуйып, хөрмәт менән мөғәллимгә ҡарап тороғоҙ, һорағанын яҡшы аңлағыҙ, һуңынан белгәндәрегеҙ менән яуап бирегеҙ. Иптәштәрегеҙгә бирелгән һорауға ҡыҫтырылмағыҙ.

● Һүҙҙәрегеҙҙә йәки яҙыуҙарығыҙҙа булған яңылышлыҡтарығыҙҙы мөғәллимдәр төҙәтһә, ҡайғырмағыҙ. Сөнки мөғәллимдәр һеҙҙе ярата һәм янылышлыҡтарығыҙҙы бөтөрөргә тырыша.

● Мөғәллимдәрегеҙ уҡырға, яҙырға ҡушҡан эштәренең барыһын да мөхәббәт менән еренә килтерегеҙ.

● Кескенә ваҡыттан таҙалыҡ һәм тәртипте хөрмәт итеүсән булыу - баланың аҡыллы һәм тәрбиәле буласағына олуғ билдә. Шуның өсөн кейемдәрегеҙ таҙа, билдәле урында, китап һәм яҙыу әйберҙәрегеҙ тәртипле булһын. Бармаҡтарығыҙ һәм дәрес әсбаптарығыҙ ҡараға буялып йөрөмәһен.

● Ҡәләмдәрегеҙҙе кейемдәрегеҙгә йәки сәстәрегеҙгә һөртмәгеҙ, ауыҙығыҙға ҡабып йөрөмәгеҙ - быңдай нәмәләр бысраҡ йөрөүгә һәм ауырыуға сәбәп була. Ҡәләм һөртәр өсөн яңығыҙҙа айырым киндер киҫәге булһын.

● Әгәр ҡулығыҙ ҡараға йәки башҡа нәмәгә буялһа, тиҙ генә йыуып, таҙарығыҙ. Кейемдәрегеҙ һәр ваҡыт таҙа йөрөһөн.

● Мәктәп һәм башҡа урындарҙың бүрәнә һәм стеналарына, асып ҡуйылған карталарға йәки китаптарға, урамда йөрөгәндә ҡойма һәм ҡапҡаларға, баҡсаларҙағы эскәмйәләргә яҙмағыҙ.

АФАРИН!

**Дүртөйлө ҡала башҡорт гимназияһы тупһаһына баҫыу менән, күңелгә йәйгор төҫтәрендәй бер нур ҡунды. Йылмайып-көләп, ихлас шатланып ҡаршы алды беҙҙе гимназияның директоры Гөлшат Хөсәйенова һәм уның коллективы. Дөрөҫөн әйткәндә, Дүртөйлө яҡтарына яҙыусылар ҙа, артистар ҙа йыш йөрөгәс, ҡунаҡтарҙан туйып бөткәндәрҙер инде бында, тигәнерәк уй менән килгәйнек. Шуға ла быңдай ихлас ҡаршылауға бер аҙ аптырабыраҡ та ҡалдыҡ. Һуңынан аңланыҡ: башҡорт гимназияһы икән, башҡорт халҡының бар матур сифаттары, йолалары күҙәтелергә тейеш, тип иҫәпләйҙәр бында, балаларҙың рухына ла ошо миллилекте һалырға тырышалар икән. Бик күңелле ваҡиға булды беҙҙең гәзит хеҙмәткәрҙәренең ошо Дүртөйлө башҡорт гимназияһы коллективы һәм районды башҡорт теле уҡытыусылары менән осрашыуы. Шул арала гимназия директоры Гөлшат Нәбиулла ҡыҙы ХӨСӘЙЕНОВА менән бер аҙ хәбәрләшеп алырға ла өлгөрҙөк:**

# МИЛЛИ ЙЫЛЫЛЫҠ...

## үҙенә тарта барыбер ҙә

**▸ Район кимәлендәге башҡа мәғариф учреждениелары араһында башҡорт гимназияһы нисегерәк итеп таныта үҙен?**

- Беҙҙең балаларҙы Дүртөйлө урамдарында әллә ҡайҙан танып торалар - башҡортса сәләмләүҙәре һәм һөйләшеүҙәре менән генә түгел, улар әҙәплелеге, тыйнаҡлығы, үҙҙәрен тотошо менән дә башҡаларҙан айырылып тора. Беҙ гимназиябыҙҙа сифатлы белем биреү менән бер рәттән, балаларҙа милли рух уятыуҙы, уларға күркәм тәрбиә биреүҙе беренсе урынға ҡуябыҙ. Тәрбиә эшендә ата-бабаларҙан ҡалған хазиналарыбыҙға, милли үҙенсәлектәребеҙгә таянып эш итәбеҙ. Уҡыусыларҙың һәләтен арттырыу, камиллаштырыу маҡсатында гимназиябыҙҙа төрлө түңәрәктәр эшләй, улар дәрестәрҙән һуң үҙҙәре һайлаған түңәрәктәрҙә шөғөлләнә. Нисектер, беҙҙең балаларҙа һәр нәмәгә ҡыҙыҡһыныу, күңелдәрендә ынтылыш, маҡсат бар. Шуға ла улар төрлө конкурстарҙа, олимпиадаларҙа ҡатнашырға атлығып тора. Былтыр хатта беҙҙең гимназия командаһы "Урал батыр" эпосы буйынса республика конкурсында беренсе урынға сыҡты.



**▸ Ата-әсәләр һеҙҙәге рухи һәм милли тәрбиә менән ҡәнәғәтме, башҡорт телендә уҡыуға мөнәсәбәттәре нисек?**

- Ата-әсәләр менән уҙғарылған беренсе йыйылышта уҡ үҙебеҙҙең маҡсатыбыҙҙы - башҡорт гимназияһында уҡыған һәр бала башҡорт телен, үҙенең тарихи тамырҙарын өйрәнәсәк, милли рухта тәрбиәләнәсәк, тип белгерттек, барыһы ла быға риза булды. Әлеге көндә милләте башҡорт булып та, туған телен белмәгән ата-әсәләр үҙҙәре лә тырышып-тырышып башҡортса өйрәнә.

Әлбиттә, бөгөнгө көндә күп ата-әсәләр балаларының математика, физика, химия фәндәрен яҡшы үҙләштереүен, инглиз һәм рус телдәрен яҡшы белеүен теләй. Ысынлап та, быға ҡаршы килеп булмай. Әммә шуның менән бергә беҙ туған телебеҙҙе, рухыбыҙҙы, динебеҙҙе лә онотмаҫҡа тейешбеҙ. Үҙем уҡыусыларға тормош һабаҡтары дәрестәренән белем бирәм. Балалар уны теләп өйрәнә. Алдыбыҙға ҡуйған маҡсатыбыҙҙы яйлап бойомға ашырып килəбеҙ. Гимназиябыҙҙа шәжәрә байрамдары, төрлө кисәләр уҙып тора. Шәжәрәһен өйрәнгән һайын уҡыусыларҙа үҙҙәренең башҡортлоғо менән ғорурланыу, милли үҙаң уяна, тамырҙарын белеп, туғандарын табып ҡыуаналар. Хатта бер уҡыусының тамырҙары бөйөк мәғрифәтсе Ризаитдин Фәхретдингә барып тоташа икәнлеге асыҡланды.

**▸ Шундай рухлы уҡытыусыларҙы нисек бер коллективҡа туплай алдығыҙ?**

- Гимназия асылғас, Дүртөйлө ҡала һәм район хакимиәте һәм мәғариф идаралығы ярҙамы менән эшендә юғары уңыштарға өлгәшкән, уҡыусылары төрлө олимпиадаларға еңеп сыҡҡан уҡытыусыларҙан коллектив тупланыҡ. Беҙ бер ғаилә кеүек бик татыубыҙ, дөйөм һәм уртаҡ маҡсаттар менән эш итәбеҙ. Матди базабыҙ бик яҡшы булғанға, белемле, көслө уҡытыусылар эшләгәнгә күрә, ата-әсәләр ҙә беҙгә балаларын ышанып тапшыра. Беҙҙә уҡырға теләүселәр йылдан-йыл күбәйә, балалар ҙа, уларҙың ата-әсәләре лә гимназияны яраталар. Уларҙы уҡыу йортобоҙҙағы милли йылылыҡ та үҙенә тарталыр, тим. Беҙҙең башҡорт гимназияһы районыбыҙ тормошон йәйгор нурылай байыта ғыналыр, тип уйлайым.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**
**Күп ата-әсәләр: "Кала мөхитендә балаға милли рух биреүе ауыр", - тип, яңылыша. Был йәһәттән башҡорт гимназия һәм лицейҙары ҙур эш башҡара. Нәҡ милли мәктәптәрҙә уҡыған балалар телен, тарихи тамырҙарын ихтирам итеп, үҙенең кем икәнен белеп үҫә, маҡсатлы ла була үҙҙәре. Дүртөйлө башҡорт гимназияһында булғанда был хәҡиҡәтте тағы бер тапҡыр аңғарттылар беҙгә.**

...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ

# ИҢ БӨЙӨК ДӘҮЛӘТ...

## уҡытыусыларын хөрмәтләгәне

**М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театрында "Мәғариф" милли проекты сиктәрендә федераль грантҡа эйә булыусы уҡытыусыларҙы ҡотлау сараһы уҙҙы. Республикала быйыл 100 мең һум күләмендәге был премияға лайыҡ булыусылар һаны 377-гә еткән, уларҙың 242-һе - ауылда, 135-е ҡалала эшләй. Һөнәри байрамдары алдынан изге һөнәр эйәләрен ҙурлауҙы саранан алған тәьҫораттары менән уҡытыусылар үҙҙәре уртаҡлаша:**

**Тәнзилә ҠУНАФИНА, Әбйәлил районы Ҡырҙас урта мәктәбенең башҡорт һәм рус телдәре уҡытыусыһы:** Мәктәптә оҙаҡ йылдар эшләй торғас, балаларға остаз, уларҙы белем тауҙарына әйҙәүсе булырға күнекһәм дә, бөгөнгө саранан үҙем бала кеүек шатланып сыҡтым. Уйлап ҡараһаң, 37 йыл белем биреү дәүерендә байтаҡ эштәр ҙә эшләнгән икән: ике йыйынтыҡ сығарыуҙа ҡатнаштым, мәҡәләләрем "Башҡортостан уҡытыусыһы" журналында баҫылып тора, "Урал батыр" эпосын яттан һөйләүселәр конкурсы тәүге тапҡыр үткәрелгән йылда минең уҡыусым Венера Баймөхәмәтова Гран-при яулап, бөгөн аспирантурала уҡып йөрөй, башҡа төрлө конкурстар, олимпиадалар призерҙары тәрбиәләй алғанмын. Бала саҡтан уҡытыусы булып үйнап үҫтем, ҡайным-ҡәйнәм дә уҡытыусы булды, бөгөн үҙебеҙҙең балалар ҙа был изге һөнәрҙе һайланы, тимәк, замаларҙың, күп төшөнсәләрҙең үҙгәреүенә ҡарамаҫтан, уҡытыусы һөнәренең баһаһы юғалмай.

**Менәүәрә БОХАРБАЕВА, Хәйбулла районы 2-се Аҡъяр урта мәктәбенең башҡорт теле уҡытыусыһы һәм уҡыту буйынса директор урынбаҫары:** Был сара уҡытыусы һөнәренең бер үк ваҡытта ябай ҙа, бөйөк тә икәнлеген тағы ла бер тапҡыр дәлилләне. Залда ултырған һәр уҡытыусы, мин дөрөҫ юлдамын, тип, һайлаған һөнәренең дөрөҫлөгөнә инанып, ғорурланып ултырғандыр. Йылы һүҙ - йәнгә дауа, бында яңғыраған һүҙҙәр һәр беребеҙҙең хеҙмәтен ҡуҡкә күтәрҙе. Илдә уҡытыусыларҙы хөрмәтләйҙәр

## БУЛҒАН ШУНДАЙ ЗАМАН

**1867 йылда Император Рус географик йәмғиәтенең Ырымбур бүлеге асылыуы төбәкте тарихи һәм географик яҡтан төптәнерәк өйрәнеү мөмкинлеге бирә. Ырымбур бүлегендә 1870 йылдан "Записки", ә 1893 йылдан "Известия" нәшер ителә башлай. Өфө һәм Ырымбур губерналарының тупрағы, үҫемлек һәм йәнлектәр донъяһы тикшерелә. Ырымбур архив комиссияһы һәм башҡа фәнни ойошмалар барлыҡҡа килә. 1908 йылда Өфөлә урындағы крайҙы өйрәнеү йәмғиәте ойошторола.**

**1890 йылда П.П. Жакмондың "Очерки быта Оренбургских инородцев" хеҙмәте тыуа. Автор унда башҡорт ерҙәренең таланыуын, тартып алыныуын тикшерә, мал аҫыраусылар һанының кәмеүе, игенселек менән шөғөлләнеүселәрҙең аҙ булыуы тураһында яҙа. Жакмон төп массаның - башҡорт халҡының фәҡирлектә көн итеүе мәсьәләһен күтәрә.**

**1898-1917 йылдарҙа крайҙың ер ресурстарын комплекслы тикшереү маҡсатында С.С. Неуструев, Л.И. Прасолов, А.Г. Бессонов; 1916 йылда "Географический очерк Оренбургской губернии" китабын яҙыусы Д.Н. Соколов һәм Н.Н. Тихонович экспедициялары ойошторола. Был осорҙоң мөһим географик хеҙмәте булып С.С. Неуструевтың "Естественные районы Оренбургской губернии" китабы тора.**




**XIX быуат аҙағы - XX быуат башына ҡараған тарихи-географик хеҙмәттәрҙә Ырымбур губернаһы башҡорттарының тарихы һәм этнографияһы буйынса төрлө материал тупланған. Улар үткән быуаттың башында нәшер ителгән энциклопедияларға, һүҙлектәргә һәм белешмәләргә индерелгән. Был һүҙлектәр һәм белешмәләрҙә төбәктең территорияһы, тәбиғәте, халҡы нисек тасуирланыуын, ул заман кешеләренең башҡорт халҡын һәм ул йәшәгән төбәкте нисегерәк итеп күреүен асыҡлар өсөн түбәндә өҙөктәр килтерәбеҙ.**

# БАШҠОРТТАР ТУРАҺЫНДА...

## тарихи-географик белешмә

* * *

"... Башҡорттар менән осрашҡан ваҡытта уларҙың айыҡ аҡылы ғына түгел, ә уйлап табыу һәләтенә маһир икәне асыҡ күренә. Ғөмүмән, уларҙың аҡылы зирәк һәм отҡор булыуы менән айырылып тора, был сифаттар башҡорттарҙың холҡонда ла ярылып ята; механик ғәҙәт кенә түгел, ә төрлө алымдар талап иткән һәм шәхси хыялдарға урын булған шөғөлдәргә тартылыуҙары ла шуның менән аңлатылалыр. Ер һөрөп, бер төрлө генә эш менән булышыу уның күңеленә ятып бөтмәй - был хәрәкәтсән холоҡтоң үҙенсәлеге.

... Башҡорттоң аҡыл ҡеүәһе тураһында һүҙ йөрөтөүе ауыр, сөнки уларҙың шөғөлдәре был сифаттарға тулыһынса асылырға мөмкинлек бирмәй; шулай ҙа уларға тәбиғәттән тапҡырлыҡ, тиҙ отоп алыусанлыҡ бирелеүен инҡар итеп булмай. Был сифаттар башҡорттоң килеп тыуған хәлдән һәм кәртәләрҙән сыға белеүендә, үҙҙәренә оҡшаған эште башҡарыуында күренә..."

***(Живописная Россия: Отечество наше в его земельном, историческом, племенном, экономическом и бытовом значении. - Т.8. Среднее Поволжье и Приуральский край. - Ч.2. Приуральский край. - СПб.; М., 1901. )***

* * *

"...Көньяҡ Урал һырттарында үҙенсәлекле бер ҡәбилә йәшәй, уларҙы тау башҡорттары тип атап йөрөтәләр. Улар оҙон буйлы. Йөҙ төҙөлөштәре менән татарға оҡшап торалар. Ҙур булмаған һоро йәки ҡуңыр күҙҙәре йөҙҙәренә изгелеклелек бирә. Ҡолаҡтарының ҙур булыуы күҙгә ташланып тора. Сит кешеләрҙе ҙур ихласлыҡ менән ҡунаҡ итәләр, тик "ҡунаҡтар" ҡайһы саҡта уларҙың был ябайлығы һәм йомартлығы менән файҙаланыуҙан да тартынмай. Улар бик аҡрын, әммә сифатлы итеп эшләй. Татарҙар кеүек, улар ҙа ҡатындарын һатып алалар. Әгәр ҡыҙҙың атаһы риза булһа, ҡалымды бүлеп түләйҙәр һәм шундай килешеү булғанда ярты ҡалым түләгән көйө лә кәләшен алып ҡайтып китә ала. Беренсе йылда йәш килен ҡайныһы һәм ҡәйнәһе менән һөйләшергә тейеш түгел, был йола башҡорттарҙа ғына түгел, башҡа халыҡтарҙа ла бар. Башҡорттар әле малсылыҡтан игенселеккә күсеү осоронда. Элек уларҙың ерҙәре күп булған, тик уның күп өлөшө арзанға ғына һатылған. Ырымбур һәм Пермь губерналарындағы рудник һәм тау заводтары урынлашҡан ерҙәр башҡорттарҙыҡы булған. Ҡыштым тау заводы урынлашҡан 150 000 дисәтинәнән ашыу ер башҡорттан 150 һумға һатып алынған. Быңдай ғәҙелһеҙлеккә ҡаршы башҡорттар бер нисә тапҡыр баш күтәреп ҡараны, әммә уларҙың тырышлығы бушҡа булды...

... Хәҙер башҡорттарҙа үҙ еренең өстән бер өлөшө генә ҡалған. Ҡайһы бер өйәҙҙәрҙә хөкүмәт уларға һатыуҙы тыйып, яңы ерҙәр бүлеп биргән. Ерҙәрҙең яйлап ҡыҫҡарыуы һөҙөмтәһендә башҡорттар йәшәү шарттарын үҙгәртергә мәжбүр. Улар ер эшкәртеүгә тотона башланы. Тәүҙә һөрөнтө ерҙәрен припущенниктар тип йөрөтөлөүсе урыҫтарға айырым хаҡ тәғәйенләп, биреп торһалар, хәҙер үҙ ерҙәрен үҙҙәре эшкәртәләр. Әммә ҡайһы бер төбәктәрҙә башҡорттар элекке ғәҙәттәрен һаҡлай һәм йәйләүҙәргә сығып, малсылыҡ менән көн күреүҙе дауам итә. Улар һунарға йөрөргә ярата, шуға ла урман йәнлеген баҫтырыуға маһир тоҡомло эттәр үрсетәләр. Шулай ҙа бөркөт менән һунар итеүҙе айырыуса хуш күрәләр.

Башҡорттарҙың эре мөгөҙлө малы, һарыҡтары күп, әммә төп байлыҡтары - көтөү-көтөү аттары. Был көтөүҙәр ит, һөт, тире бирә, тиренән улар кейем, һауыт-һаба тегәләр. Элегерәк башҡорттар араһында йөҙәрләгән, меңәрләгән ат тотоусыларҙы осратырға була ине, хәҙер был халыҡ ярлыланған".

***(Южный Урал и горные башкиры//Новая библиотека. Приуральский край, его население и минеральные богатства/Сост. Н.А. Дьячков. - М., 1901).***

* * *

"Намыҫлылыҡтары һәм киң күңеллелектәре менән башҡорттар башҡа сит-яттар алдында маҡтана ала: малтыуар төндә иркенләп урман ҡыҙыра; йәшәү рәүешенә әүерелгән хәйерселек башҡорт ауылдарына бөтөнләй ят күренеш".

***(Россия: Полное географическое описание нашего Отечества / Под ред. В.П.Семенова-Тянь-Шанского. - СПб.: Изд-во А.Ф.Девриена, 1914).***

**(Роза Буканова, Вячеслав Фешкин. "Башҡорттар рус ғалимдары һәм тикшеренеүселәре хеҙмәттәрендә" китабынан).**

**(Дауамы бар).**

икән, тимәк, бында көн күреүсе кешеләр күңелендә изгелеккә юл ябылмаған, был ил йәшәйәсәк, уның киләсәге буласаҡ. Баланы атай ҙа, әсәй ҙә тәрбиәләй, тик мәктәп ишеген асып ингәс тә кешеләр араһындағы мөнәсәбәткә, аҡылға, тәртипкә уҡытыусы өйрәтә. Ерҙең башҡа мөйөштәрендә лә уҡытыусыларҙы данлайҙарҙыр, әммә беҙҙең республикалағы кеүек хөрмәт бер ҡайҙа ла юҡтыр. Рәхмәт уҡытыусыны данлаған өсөн, йәмғиәткә уны нисек бар, шул бөйөклөгөндә күрһәткән өсөн.

**Зөһрә АҠДӘҮЛӘТОВА, Нуриман районы Павловка интернат-мәктәбенең башҡорт теле уҡытыусыһы:** Был грантты яулауым - 38 йыл балаларҙы, башҡорт телен яратып эшләүемдең һөҙөмтәһе. Халҡымдың йырҙары, легендалары, әкиәттәре нигеҙендә тәрбиәләнгән уҡыусыларым бөгөн ҡайҙа ғына йөрөһә лә туған телен, тыуған илен данларға тырыша - улар минең оло ғорурлығым. Эшләгән коллективым да яҡшы булды, ғаиләм дә гел аңлап ҡараны, бөгөн балаларым сәскә гөлләмәләре тотоп, мине ҡотларға килеп еткән - уҡытыусы, әсә кеше өсөн был бик оло баһа. Милләт тотҡаһы булған башҡорт теле уҡытыусылары исеменән республикабыҙ Хөкүмәтенә, Президентыбыҙға рәхмәтемде белдерәм.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Исемдәре Башҡортостан мәғарифы тарихына уйылып яҙылған ошондай уҡытыусыларҙың фиҙаҡәр хеҙмәте һәм республика етәкселегенең милли мәғарифҡа булған иғтибары һөҙөмтәһендә республика төбәк мәғариф сәйәсәте сифаты буйынса илдә беренсе урында тора ла инде. Киләһе йыл Рәсәйҙә Уҡытыусы йылы тип иғлан ителде, тимәк, был бөйөк тә, изге лә һөнәрҙең баһаһы тағы ла артыр, тигән ышаныста ҡалабыҙ.**

**Ләйсән НАФИҠОВА яҙып алды.**

## ҮӘТ, ШУЛАЙ!

# МӘҒРИФӘТСЕЛЕККӘ ТОҒРОЛОҠ... уҡытыусы һәм журналист һөнәренә хас

**Бөтә донъя уҡытыусылар көнөн һәм республикабыҙҙың Дәүләт суверенитеты тураһында декларация ҡабул ителеүенә 19 йыл тулыуын билдәләгән көндәрҙә Мифтахетдин Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университеты байрамса төҫ алып, айырыуса күркәмләнеп китә. 40 йылдан ашыу Башҡортостан мәғарифына хеҙмәт иткән юғары уҡыу йортонда хәҙер инде матур традицияға әйләнгән сираттағы Мәғариф көндәре уҙғарыла.**

1 октябрҙән башланып, һигеҙ көн буйына дауам иткән быңдай йоғонтоло сараның тап беҙҙең университетыбыҙҙа уҙғарылыуы юҡҡа түгел, сөнки башҡорт халҡының бөйөк мәғрифәтсеһе исемен йөрөткән педагогик вуз буласаҡ педагогтарҙы тап ошондай юғары ватансылыҡ рухында тәрбиәләүҙе үҙенең төп бурысы итеп һанай. Мәғариф көндәре йыл һайын бик үҙенсәлекле уҙғарылып, төрлө яңы саралар менән байытылып тора. Быңа быйыл да студенттарыбыҙ РФА Өфө ғилми үҙәгенең Механика, Молекула һәм кристалдар физикаһы институттары ғалимдары менән осрашып, заманса нанотехнологиялар хаҡында мәғлүмәт аласаҡ, мәғарифта интернет селтәрҙәре тәжрибәһен өйрәнеү буйынса республика веб-конференцияһында ҡатнашасаҡ. Шулай уҡ сәнғәт күргәҙмәһе ойоштороу, этнопедагогика һәм фольклор ғилми-тикшеренеү үҙәген, "Мин йәшәгән ҡала" ижтимағи һәм белем биреү акцияһы сиктәрендә "Өфөнө өйрәнеү" курсын презентациялау, төрлө конкурстар, түңәрәк өҫтәлдәр, ғилми уҡыуҙар, шәфҡәтлелек концерттары һәм студенттар әүҙем ҡатнашҡан башҡа һөҙөмтәле саралар уҙғарыу ҡаралған.

Быйылғы Мәғариф көндәре республикабыҙҙың киң мәғлүмәт сараларында мәғариф проблемаларын иң яҡшы яҡтыртыусы журналистар өсөн ректорыбыҙ Рәил Әсәҙуллин башланғысы менән булдырылған М. Аҡмулла исемендәге премияларҙы тапшырыу тантанаһы менән асылды. Был премия икенсе тапҡыр ғына тапшырыла, әммә ул журналистарыбыҙ иғтибарын мәғариф өлкәһенең иң ҡатмарлы проблемаларына йүнәлтеү йәһәтенән һөҙөмтәле сара булыр, тип ышанабыҙ. Быйыл ошо премияға "Башҡортостан" дәүләт телерадиокомпанияһының мәғлүмәти-сәйәси программаларының баш редакторы Сергей Захаров, "Истоки" гәзите редакцияһы һәм "Киске Өфө" гәзитенең яуаплы сәркәтибе Вәлиәхмәт Бәҙретдинов лайыҡ тип табылды. БДПУ-ның тәрбиә эштәре буйынса проректоры, филология фәндәре докторы, профессор Рәйсә Хәйруллина филология факультеты студенттары һәм университеттың йәш журналистары алдында ректорат исеменән рәхмәт белдереп, яңы лауреаттарыбыҙға диплом тапшырҙы. Беҙ уларҙың киләсәктә лә республикабыҙ мәғарифын үҫтереүгә әүҙем булышлыҡ итәсәгенә өмөт итеп, тынғыһыҙ журналист эшмәкәрлегендә ижади уңыштар теләйбеҙ.

**Элеонора ФӘЙЗУЛЛИНА, БДПУ-ның Мәҙәниәт үҙәге директоры.**

# БЕҘҘЕ аҫыраған, туйындырған

**Башҡортостандың көньяҡ-көнсығыш өлөшөн рәсми телдә "Урал арьяғы" тип атап йөрөтәләр. Баш ҡалабыҙ Өфөнөң урынлашҡан урынына Мәскәү позицияһынан сығып ҡарағанда ғына ул шулай аталалыр, әммә Ҡояш апай һәр таң һайын башлап үҙ нурҙарын һипкән төбәкте "арьяҡ" тип атау логика күҙлегенән дөрөҫ түгелдер. Икенсенән, әйтәйек, совет осоронда был төбәкте "арьяҡ" тип атау "бирьяҡ"тың мәнфәғәтен күберәк ҡайғыртыуға ҡоролғанын да беләбеҙ. "Арьяҡ" һүҙендә "беҙҙең яҡ түгел" тигән мәғәнә лә ята. Совет осоронда был төбәккә мөнәсәбәт хаҡында беҙҙең гәзиттә Башҡортостан Фәндәр академияһы академигы, иҡтисад фәндәре докторы, профессор, Рәсәй Федерацияһының һәм Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған фән эшмәкәре Мәзһәр Насип улы Иҫәнбаев ("Беҙ һауған һөттөң ҡаймағын башҡалар ашаған икән дә...", 2007 йыл, 13-сө һан) яҙып сыҡҡайны. "Күпселеген башҡорттар йәшәгән Учалы, Әбйәлил, Хәйбулла, Баймаҡ, Йылайыр, Ейәнсура, Күгәрсен райондарында күп кенә колхоздарҙы бөтөрөп, эре-эре совхоздар төҙөнөләр. Совхоздың рентабелһеҙ хужалыҡ итеү ысулы икәнлеген заман иҫбат итте инде. Ә колхоз - ул прогрессив һәм хужалыҡ итеүҙең тәбиғи формаһы. Колхоздарҙы яһалма рәүештә бергә ҡушып, эре-эре совхоздар төҙөү ауыл хужалығына ҙур зыян килтерҙе. Тап шул мәлдән элек-электән ауыл хужалығында эшләгән белгестәрҙе ҡыҫырыҡлап сығарыу башланды. Һөҙөмтәлә, ошо райондарҙан тиҫтәләгән мең-мең кеше эш эҙләп ситкә китеп бөттө...", тигәйне Мәзһәр Насип улы был төбәктең артта ҡалыу сәбәптәрен барлап. Ысынлап та, был төбәк иҡтисадын үҫтереү иң тәүҙә заман тыуҙырған ауырлыҡтарҙан миктәгән ауыл хужалығын тергеҙеүҙән башланырға тейешлеген һәр кем аңлай хәҙер. Шуға күрә Башҡорт дәүләт аграр университетының Урал арьяғы филиалы директоры, биология фәндәре докторы, профессор Йәлил Төхфәт улы ҺӨЙӨНДӨКОВТЫҢ был тәңгәлдәге уй-фекерҙәре ошондай башланғысҡа етди ишара булып тора.**

## Юғары белемгә юл

Дөрөҫөн әйткәндә, совет осоронда Башҡортостандың Урал арьяғы төбәгенә иғтибар биреп еткерелмәгән, тип уйлайым. Был иң тәүҙә кадрҙар мәсьәләһенә ҡағыла. Мәҫәлән, бына мин Башҡортостан ауыл хужалығы институтының агрономия факультетында уҡыным һәм Баймаҡ районынан үҙебеҙҙең курста бер үҙем генә инем. Ә Өфөгә яҡын райондарҙан, төньяҡ-көнбайыш төбәктән һәр райондан - 5-әр, 6-шар студент ине. Бында, әлбиттә, баш ҡаланың был төбәк райондарынан алыҫ урынлашыуы ла йоғонто яһағандыр. Үҙегеҙ беләһегеҙ, "һуҡа бабай" ысулы менән ауыл хужалығын күтәреп булмай, ул замандар күптән тарихта ҡалды, шуға күрә был төбәктәге ауыл хужалығының башҡаларҙан күпкә артта ҡалыуы иң беренсе нәүбәттә кадрҙар мәсьәләһенә бәйле. Икенсенән, был төбәктән фән дә бик алыҫ торҙо. Сибайҙа баҡыр-көкөрт комбинаты асыу төбәкте геологик яҡтан өйрәнеү мөмкинлеген бирҙе биреүгә, тик ауыл хужалығы был өлкәлә лә күпкә артта ҡалды. Башҡортостан ғилми-тикшеренеү институтының Ҡуянтауҙағы базаһын иҫәпкә алмағанда, ун-ун биш йыл элек Урал арьяғы иң аҙ өйрәнелгән "окраина" булып ҡала килде. Ә бит һәр үҫештең нигеҙендә фән һәм ғилем ята. Был йәһәттән Урал арьяғы бер ауыл хужалығы өлкәһендә генә түгел, башҡа өлкәләрҙә лә күпкә артта ҡалған төбәк һаналды. Шуға күрә лә заман бында юғары уҡыу йорттарының асылыуын талап итте. Шунһыҙ алға китеү мөмкин түгел ине.

Бары тик үҙгәртеп ҡороуҙар башланғас ҡына был төбәктә юғары уҡыу йорттары филиалдары асыла башланы. Иң тәүҙә Башҡорт дәүләт педагогия институтының филиалы асылды. Ул саҡта Сибайға тәүге профессор Ғөбәйҙулла Илешев эшкә килде. Артабан фән кандидаттары Сәбилә Сөләймәнова, Ғәҙилә һәм Илдус Бүләковтар, Вәкил Хажин, Сәфәрғәле Йәнтүрин килеп эшләй башланылар. Саҡ ҡына һуңлатып Башҡорт дәүләт университетының Сибай филиалы асылды. Һәр яңы уҡыу йорто асылған һайын, берәмләп-берәмләп, баш ҡаланан, Стәрлетамаҡтан фән кандидаттары һәм фән докторҙары ағыла башланы. 10 йыл элек Башҡортостан Фәндәр академияһының Сибай филиалы барлыҡҡа килде.

Шулай итеп, Сибайҙа фәнни потенциал туплана башланы. Хәҙер бында 100-ҙән ашыу фән кандидаты бар. Баймаҡ тәжрибә хужалығында ла элек бер генә фән кандидаты була торғайны,



филиалына килгәндә, ул хәҙер 5-се йыл эшләй. Филиалға йыл һайын 150 студент ҡабул ителә. Уларҙың 99 проценты ошо төбәк ауылдарынан. Улар беҙҙең филиалда ике йыл уҡығандан һуң, өсөнсө йылында Өфөләге төп уҡыу йортонда уҡыуын дауам итә. Уларҙың бик аҙҙары ғына баш ҡалала тороп ҡала, күбеһе был төбәккә кире әйләнеп ҡайта. Белгестәр булһа, һис шикһеҙ, алға китеш буласаҡ, бары тик республика Хөкүмәтенең ошо төбәк ауыл хужалығын үҫтереү буйынса аныҡ ярҙамы ғына кәрәк. Был йәһәттән тәүге аҙымдар эшләнә лә. Ундай саралар Урал арьяғында барлыҡҡа килгән МТС-ты индерергә була. Был

***Капиталистик мөнәсәбәттәр беҙгә ауылды хуторҙарға бүлеүҙе талап итә, ә беҙ, башҡорттар, бергәләшеп йәшәп өйрәнгәнбеҙ һәм киләсәктә башҡорт ауылын һаҡлайбыҙ, тиһәк, махсуслашыу, минеңсә, иң дөрөҫө буласаҡ. Беҙҙең ауыл кешеһе хәҙер бөтә эштә лә эшләй, йәғни йыл әйләнәһенә бер туҡтауһыҙ үҙ хужалығында бил бөгә, әммә мандый алмай. Тимәк, шәхси хужалыҡта хеҙмәткә мөнәсәбәтте тамырынан үҙгәртеп ҡороу фарыз. Беҙҙең ауыл кешеһе бөтә нәмәне лә етештерә, бөтәһенә лә өлгөрә, әммә етештергән тауарының мәнфәғәтен күрә белмәй. Беҙгә ана шул үҙ эшеңдең файҙаһын күреүҙе ойоштороорға ғына кәрәк.***

хәҙер улар күбәйҙе. Өфөнән килгән фән докторҙарын һанамағанда, бер нисә фән докторы ошо ерлектә үҫеп сыҡты. Бигерәктә шуныһы ҡыуандыра: Сибайҙа эшләгән егерменән ашыу фән кандидаты - үҙебеҙҙә уҡып сыҡҡан йәштәр. Әлбиттә, фәнни потенциал туплангас, фән менән бергә был төбәктең тормошо ла алға китергә тейеш. Сибайҙа шунсама юғары уҡыу йорттарының филиалдарын асыу ҙа тап шул маҡсаттан сығып эшләнде бит.

## Беҙҙең уҡыу йортонда

Беҙҙең Башҡортостан аграр университетының Урал арьяғы төбәктә ергә, экологияға ҡараш ыңғай яҡҡа үҙгәреп килә. Экологияға килгәндә, мин үҙебеҙҙе Европа илдәре менән сағыштырып ҡарайым. Уларҙа ҡасандыр тәбиғәт йыртҡыстарса ҡараш һөҙөмтәһендә танымаҫлыҡ хәлгә еткерелгән. Уларҙың тәбиғәте тәүхәленә ҡайтып уҡ етмәһә лә, был йәһәттән бик ҙур эштәр башҡарылған. Беҙ ҙә, тәбиғәтебеҙ ҡырылып бөтмәҫтән алда, был мәсьәләгә ҡарашыбыҙҙы үҙгәртеп өлгөрҙөк. Аллаға шөкөр. Сит илдәрҙәге кеүек, яһалма шишмәләр барлыҡҡа килтереү ихтыяжы юҡ беҙҙә. Элек беҙ экологияны нисек аңлай торғайныҡ һуң? Мөрйәнән йә завод торбаһынан төтөн сығып тора, был зыянлы. Шулай тип кенә билдәләй инек экологик проблеманы, хәҙер инде беҙ уны комплекслы рәүештә ҡарайбыҙ. Һәр бер урта һәм юғары белем биреү учреждениеларында "Экология" предметы индерелде. Үҙем эколог булараҡ, шуны ғына әйтә алам: бөгөн производство кешеһен тик тәбиғәткә экологик зыян килтермәгән өсөн матди яҡтан ҡыҙыҡһындырып ҡына нимәлер эшләргә була.

## Ер - йәшәүгә хоҡуҡ

Пай ерҙәрен һис һүҙһеҙ алырға кәрәк. Сөнки беҙҙең халыҡ элек-электән ерле халыҡ булған. Әгәр ҙә ерле халыҡ ерһеҙ тороп ҡалһа, ул юғалыуға дусар. Тик ер менән ни эшләргә тейеш һуң ул? Быныһы инде бөтөнләй икенсе мәсьәлә. Бында урындағы власть вәкилдәренең мәсьәләне үҙағышына ебәрмәүе мөһим. Һәр хәлдә, ауылда йәшәгән кеше тарафынан алынған ауыл хужалығы тәғәйенләнешендәге ер тауарға, йәғни баҙар объектына әйләнергә тейеш түгел. Минеңсә, бында ауыл кешеһе алдында дүрт юл бар.

1.Үҙе эшкәртә, йәғни ул ерҙәге барлыҡ ауыл хужалығы эштәрен үҙе алып барып, шул еренең мәнфәғәтен күрә.

2.Урындағы крәҫтиән хужалығына, колхозға арендаға биреп тора. Аренда хаҡын уңыштың бер өлөшө рәүешендә, йәғни рентаһын ала.

3.Үҙе һымаҡ бер нисә пайсы менән берләшеп, айырым күмәк хужалыҡҡа (колхозға) ойошоп эш итә.

4.Урында (ситтән килгәндәр түгел) барлыҡҡа килгән МТС-тарға, агрохолдингтарға пай ерен арендаға биреп, шуның рента хаҡын ала.

Нисек кенә булмаһын, хәҙерге ауыл кешеһе үҙ пайын алып, юғарылағы 4 юл менән ул ерҙе үҙенә хеҙмәт иттереп, аҙаҡ шул ерен үҙененң балаларына капитал итеп ҡалдырырға тейеш. Ер беҙҙең матди байлығыбыҙ ғына түгел, йәшәүгә хоҡуғыбыҙ ҙа.

Беҙҙә артыҡ күп булған әйбергә ҡараш та насар. Мәҫәлән, ергә мөнәсәбәт шундай. Ул күп булған һайын, ҡәҙерһеҙгә әүерелә башлай. Япон кешеһе, мәҫәлән, бер квадрат метр майҙан ере булһа, шул еренән әллә ниндәй уңыш йыйып алырға иҫәп тота. Улар ерҙе устарына һалып, үбеп йөрөтә, сөнки унда ер әҙ. Беҙҙә урмандың да ҡәҙере юҡ. Эшкәрткәндә, уның 40 проценты юғала. Тапалып ҡала, һына, серей, урлайҙар, яндыралар, һ.б. Ә инде беҙҙең урманды сит илдәр һатып алһа, улар уны тамырына, япрағына тиклем алып китәләр, сөнки улар урмандың ҡәҙерен белә. Беҙҙең Рәсәйҙә мебелде, нишләптер, опилканан, ә ҡапҡаны таҡтанан эшләйҙәр. Опилканан яһалған мебелдең һаулыҡ өсөн ниндәй зыян килтергәнен белһәк тә, һаман да был эш дауам итә килә.

## Таяҡтың ике осо...

Академик Мәзһәр Иҫәнбаевтың "Киске Өфө" гәзитендәге сығышында колхоздың әһәмиәте хаҡында әйткән фекерҙәре менән килешәм. Эйе, колхоз һүҙенән ҡурҡырға ярамай, уның мәғәнәһе "күмәк хужалыҡ" тигәнде генә аңлата. Минеңсә, бында мәсьәлә "колхоз" һүҙенең совет осорона бәйле булыуында ғыналыр. Әйтәйек, бер нисә фермер берләште икән, ти. Уларҙың берләшмәһе күмәк хужалыҡты, йәғни шул уҡ колхозды аңлата бит. Бында һүҙгә түгел, төшөнсәнең асылына ҡарарға кәрәктер. Шул уҡ ваҡытта совет осороноң колхоз моделе хәҙерге заман өсөн ярамай. Сөнки совет осоронда күмәк хужалыҡ эшмәкәрлеген саманан тыш үҙәкләштереү арҡаһында халыҡтың йәшәү кимәле түбән булды. Ырҙын табағынан ҡырып-һепереп ашлыҡты, ҡураларҙан һөттө, итте, тирене, йөндө, йомортҡаны алып китеп торҙолар. Әгәр ҙә беҙ шундай колхозды тергеҙергә уйлаһаҡ, бер ни ҙә килеп сыҡмаясаҡ. Кеше ерҙе үҙе эшкәртеп, уңышын үҙе йыйып алып, үҙенә ҡалдырһа, үҙе һатһа, уның эшенә бер кем дә ҡыҫылмаһа, уның йәшәү кимәле лә юғары булыр ине. Бөгөн килеп, халыҡтың колхоздан ваз кисеүе дәүләттең колхозды талауына бәйле ҡурҡыуына ла бәйле. Шул уҡ ваҡытта бөгөнгө пайсы ерен МТС-тан эшкәрттерһә лә, уңышының иң ҙур өлөшөн уға бирергә мәжбүр, йәғни МТС-тың суперзаманса аты-техникаһы ашарға күп һорай. "МТС-тың тоҙлоғо әсе", тиҙәр хәҙер үҙ ерендә эшләгән ауыл кешеләре. МТС шәп нәмә ул, әммә ауыл халҡы күҙлегәнән ҡарағанда, улай

✓ *Дөрөҫөн әйткәндә, беҙ үҙебеҙҙең тыуған еребеҙҙе беләп йәшәр өсөн дә уны эшкәртергә бурыслыбыҙ. Сит-яттар килеп, ул ерҙе яуламаһын өсөн. Был ер беҙҙе туйҙырған ғына ер түгел, тыуҙырған да ер.*



түгел. Таяҡтың бер осо йыуан булһа, икенсе осо нәҙек була ла ҡуя шул. МТС хәҙерге көндә "Йылайыр", "Ирәндек" совхозы кеүек, ҙур майҙанлы эре хужалыҡтарҙы хеҙмәтләндереү өсөн ҡулайлы. Уларҙың техникаһын айырым кешеләрҙең пай ерҙәренә индерә башлаһаң, "Бер тинлек ҡуян - ун тинлек зыян" һымаҡ килеп сыға инде. Фермерҙарға ла МТС-ҡа мөрәжәғәт итеү, минеңсә, файҙаға булмаясаҡ. Сөнки үҙем эшләйем, тигән кеше генә фермер булып китә ала.

### Тотороҡло уңыш өсөн

Ауыл хужалығы тигәндә, беҙ һәр ваҡыт иң тәүҙә игенселекте, һөт, ит етештереүҙе күҙ уңында тотабыҙ. Урал аръяғы зонаһының тәбиғәте уның тармаҡтарын арттырыу өсөн бик күп мөмкинлектәр бирә. Шуларҙы иҫкә алып, әле бына башҡорт тоҡомло бал ҡорттарын үрсетеү, умартасылыҡ буйынса үҙебеҙҙең фәнни базаны йылдарҙа ла яҡшы үҫә. Уның Башҡортостанға яраҡлы сортын барлыҡҡа килтерһәк, шәп булыр ине. Шәхси баҡсаларҙа виноград та үҫтереп маташалар, ҡайһы саҡ уңышлы ла килеп сыға был эш. Мауығырға була, әммә ҙур масштабта уның менән шөғөлләнеү тураһында уйлап ҡарарға ла ярамайҙыр.

Әлбиттә, Башҡортостандың, бигерәк тә Урал аръяғының тупрағы уңдырышлы, әммә уның ҡеүәтен ныҡлап файҙаланыр өсөн йыл һайын шарттар булып тормай. Шуға күрә беҙҙең Урал аръяғы тотороҡһоҙ игенселек зонаһына инә. Ошо юҫыҡта ҡарағанда Хәйбуллала, мәҫәлән, игенселек өсөн майҙандарҙы ҡыҫҡартыу маҡсатҡа ярашлы булыр ине. Сөнки был районда 5-6 йылға бер тапҡыр ғына яҡшы уңыш алына. Ҡалған йылдарында түгелгән сығымдарҙы нисек ҡапларға был осраҡта? Шунан, нисек итеп халыҡтың йәшәү кимәлен күтәрергә була һуң? Беҙ юғары уңышҡа түгел, тотороҡло уңышҡа ынтылырға тейешбеҙ. "Уңыш быйыл йә була ла, йә юҡ", тип йәшәгән кешенең тормошҡа, хеҙмәткә ҡарашы нисек булырын күҙ алдына килтереүе ҡыйын түгел. Ундай кешенең психологик хәле лә тотороҡло булмай. Был йәһәттән Урал аръяғы төбәгенең ауыл хужалығын адаптация ысулы менән яңынан ҡороу талап итәлә.

беҙ ҙә ауыл хужалығы менән шөғөлләнергә, кешеләрҙе эш менән тәьмин итергә тейешбеҙ. Мәктәп тә бюджет аҡсаһына эшләй, әммә мәктәп табыш килтермәй, тип, балаларҙы уҡытмай тормайбыҙ бит. Шуның кеүек, ауыл хужалығы хәҙерге заман күҙлегенән сығып ҡарағанда рентабелле булмаһа ла, уны һаҡларға, үҫтерергә кәрәк. Ауылды һаҡлау, уға дотация ярҙамы күрһәтеү халыҡтың социаль хәлен яҡшыртыуҙың бер формаһы ла булып тора.

### Махсуслашыу - ауылдың киләсәге

Хәҙерге ауылда һау булмаған конкуренция өҫтөнлөк итә. Сөнки ауылда йәшәүселәрҙең барыһы ла һөт, ит, май, йомортҡа етештерә, картуф сәсә һәм шәхси хужалығында етештергән тауарын баҙарҙарҙа һата алмай бер була. Күбеһенең тауарын эре ҡалаларға алып барырға техникаһы юҡ. Техникаһы булғаны ла алып барған тауарын осһоҙ хаҡҡа ҡалдырырға мәжбүр, йәғни ҡала баҙары иерархияһы ауыл етештереүсеһен үҙ итмәй бөгөн. Ошондай шарттарҙа ауыл бөгөн нимә эшләй ала? Әлбиттә, пай ерҙәрен өләшеп алған ауыл туғанлыҡ принцибы йә теләк-мөмкинлек буйынса бер нисә етештереү тармағы төркөмөнә бүленә ала. Бер төркөм, әйтәйек, ит, икенсеһе - бал, өсөнсөһө - ҡымыҙ, дүртенсеһе - һөт аҙыҡтары, бишенсеһе - йәшелсә-емеш, алтынсыһы - тамыраҙыҡтар, һ.б. етештерә. Ауылдың ҡалаларҙа эшмәкәрлек итеүсе күсмә баҙары ла булһын, уны ла айырым, был эшкә барымы булған төркөм хеҙмәтләндерһен, шул уҡ ваҡытта был ауылдың натуралата тауар алмаштырыусы үҙенең эске баҙары ла булһын. Бына бындай ауыл хәҙерге беҙҙең типик башҡорт ауылынан күпкә айырылып торор, ул ауылда эш урыны мәсьәләһе һәм башҡа социаль мәсьәләләр үҙенән-үҙе хәл ителер ине. Шул уҡ ауылда техникалы егеттәр үҙҙәре бер төркөмгә ойошоп, ауылдың мини-МТС-ын төҙөй ала. Әйткәндәй, был хәрәкәт әле ауылда тәбиғи рәүештә үҙенән-үҙе бара. Яңыраҡ бер ауылдан бура һатып алып, шуны алып ҡайтырға тип, шундағы егеттәрҙе ялларға уйлағайным: "Әлегә булмай, беҙҙең заказдар күп, шуларҙы эшләгәс, һеҙҙекен дә алып барырбыҙ", - тинеләр. Ул егеттәрҙең Т-150 тракторы бар икән һәм улар ауылда кешеләргә йөк ташыу эше менән шөғөлләнә. Улар үҙ эшен сифатлы итеп башҡара һәм шуның менән көн итә, аҡса эшләй, ғаиләһен ҡарай. Хәҙер ауылдарҙа бер нисә ағай-эне берләшеп, пилорама һатып ала. Шунан диләнкә алалар ҙа, шуны ауылға алып ҡайтып, ярҙырып, кәсеп итә башлайҙар. Был күренеш тә беҙ башта килтергән ауылдың яңыса һулыш алыуына миҫал. Ысынлап та, ауылда яйлап-яйлап, рәсми тел менән әйткәндә, махсуслашыу процесы бара һәм уны тормош үҙе талап итә. Беҙ ауылдың киләсәген фермерлыҡта, крәҫтиән хужалығында, колхоз-совхоздар ҡоролошонда, МТС-тар эшмәкәрлегендә күрергә теләйбеҙ, кем белә, бәлки, ауылдың киләсәге бына ошондай махсуслашыу ысулындалыр. Капиталистик мөнәсәбәттәр беҙгә ауылды хуторҙарға бүлеүҙе талап итә, ә беҙ, башҡорттар, бергәләшеп йәшәп өйрәнгәнбеҙ һәм киләсәктә башҡорт ауылын һаҡлайбыҙ, тиһәк, махсуслашыу, минеңсә, иң дөрөҫө буласаҡ. Беҙҙең ауыл кешеһе хәҙер бөтә эштә лә эшләй, йәғни йыл әйләнәһенә бер туҡтауһыҙ үҙ хужалығында бил бөгә, әммә мандый алмай. Тимәк, шәхси хужалыҡта хеҙмәткә мөнәсәбәтте тамырынан үҙгәртеп ҡороу фарыз. Беҙҙең ауыл кешеһе бөтә нәмәне лә етештерә, бөтәһенә лә өлгөрә, әммә етештергән тауарының мәнфәғәтен күрә белмәй. Беҙгә ана шул үҙ эшенең файҙаһын күреүҙе ойошторорға ғына кәрәк.

Элек колхоздың техникаһы ғына булды. Шәхси хужалыҡта транспорт ҡына түгел, хатта ат торорға ла рөхсәт итмәнеләр. Хәҙер ауылдарҙа өс-дүрт өйҙөң береһендә бер трактор күрергә була. Былар барыһы ла шул хаҡта һөйләй: ауылда яңыса хужалыҡ итеүҙе яйға һалырлыҡ нигеҙ бар, бары тик был эште ойоштороусылар ғына кәрәк.

# ТЫУҘЫРҒАН ДА,

## да ер был...

асырға иҫәп тотабыҙ. Әлегә Бөрйән районында бәләкәй генә умарталығыбыҙ бар. Ошо арала Баймаҡ районы территорияһынан ер алырға йыйынабыҙ. Шунда башҡорт бал ҡорттарын яһалма аталандырыу юлы менән үрсетеү һәм башҡорт балы етештереү буйынса эште яйға һалырға торабыҙ.

Әле яңыраҡ баҙарға инеп сыҡтым. Ҡайҙан ғына килтермәйҙәр беҙгә йәшелсә-емеште. Ғөмүмән, йәшелсә-емеш үҫтереү буйынса ла төбәк күпкә артта ҡалған. Бәләкәй предприятиелар ойоштороп, Сибайҙы һәм был төбәкте йәшелсә-емеш менән тултырырға булыр ине. Әлбиттә, "Алексеевка" һымаҡ совхоздарҙың был төбәктә кәрәге юҡ, әммә айырым фермерҙар был йүнәлештә үҙенең эшен ҡора ала. Беҙгә, мәҫәлән, ҡыяр менән помидорҙы Туймазынан алып киләләр. Әгәр ҙә үҙебеҙҙекеләр был эш менән шөғөлләнә башлаһа, йәшелсә-емештең хаҡы ла төшөр ине. Йәшелсәселек тармағын үҫтереү буйынса беҙҙең филиалда белгестәр әлегә әҙерләнмәй, әммә ундай бүлекте асырға тулы ерлек, иң мөһиме, төбәктә быға ихтыяж бар.

Беҙҙең яҡта бөтөн нәмәне лә үҫтереп булмай. Уға ынтылырға ла кәрәкмәй, тип һанайым. Беҙ үҙ еребеҙгә ҡулайлашҡан культураларҙы үҫтерһәк, күберәк уңыш йыйып аласаҡбыҙ. Мәҫәлән, ҡаты бойҙай. Шул уҡ борсаҡ урынына һәм параллель рәүештә беҙҙең ергә адаптация үткән нут тигән культураны ғына алайыҡ. Сәсеп үҫтерә торған бесәндәрҙән сорғаны алырға була. Сорга ҡоролоҡҡа бирешмәй, ямғырһыҙ йылдарҙа ла яҡшы үҫә. ...

### Рентабелле булмаһа ла...

Урал аръяғында ер етерлек, һәм беҙ үҙебеҙгә етерлек кенә иген йә башҡа төрлө ауыл хужалығы продукцияһы етештерһәк, был төбәктең ауыл хужалығы иҡтисады күптән алға киткән булыр ине. Икенсе яҡтан ҡарағанда, иген беҙҙә йыл һайын уңмай һәм уны үҫтереүгә киткән сығымға йыйып алған уңыштан ике-өс тапҡырға күберәк игенде ситтән һатып алырға мөмкин булыр ине. Әммә беҙ ерҙә йәшәйбеҙ икән, еребеҙҙе эшкәртергә, сәсергә, уның уңышын йыйып алырға тейешбеҙ. Үҙебеҙҙең иген үҫтереүселәрҙе ҡыҙыҡһындырыу өсөн ситтән иген һатып алыуҙы ҡыҫҡартырға ла була. Ерҙә йәшәгән, эшләгән кеше уға тик файҙа алыу күҙлегенән генә ҡарап йәшәй алмай. Дөрөҫөн әйткәндә, беҙ үҙебеҙҙең тыуған еребеҙҙе беләп йәшәр өсөн дә уны эшкәртергә бурыслыбыҙ. Сит-яттар килеп, ул ерҙе яуламаһын өсөн. Был ер беҙҙе туйҙырған ғына ер түгел, тыуҙырған да ер.

Күп илдәрҙә ауыл хужалығы дәүләттән дотация алып йәшәй. Рентабелле булмаһа ла, ...

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Йәлил Төхфәт улының төбәктең ауыл хужалығын күтәреү өсөн килтергән тәҡдим-фекерҙәре бик ҡыҙыҡлы һәм нигеҙле. Шул уҡ ваҡытта һәр төрлө сара-ысулдарҙың асылында был тармаҡта тик күмәкләп эшләгәндә генә ниндәйҙер уңышҡа өлгәшеп була, тигәнде лә аңларға була. Һәр хәлдә, быны элеккесә колхоз-совхоз формаларына кире әйләнеп ҡайтырға туранан-тура саҡырыу, тип тә аңларға кәрәкмәйҙер. Бында "күмәкләп" тигән һүҙҙе ауылды бер маҡсатта туплау, ошо юл менән уны һаҡлап алып ҡалыу тип аңларға кәрәктер.**

**Әхмәр ҮТӘБАЙ әҙерләне.**

*БЕР КӘЛИМӘ ФЕКЕР*

## АЛДАНҒАН АЙЫУ ХӘЛЕНДӘБЕҘ...

Рус халҡының бер әкиәтен иҫкә төшөрҙөм дә, көрсөк хәлдәренә тап килтереп, тағы ла үҙемсә һығымталар яһап йөрөйөм әле. Ул әкиәтте балаларығыҙға уҡығанығыҙ барҙыр, "Вершки и корешки" тип атала. Кем оноткан, ҡыҫҡаса ошолай. Бер мужик айыу менән бергәләп ялан тултырып шалҡан сәскән, ти. Мужик айыуға: "Һинә был үҫентеләрҙең һабағы, ә миңә тамыры булыр", тип һүҙ ҡуйышҡан. Ә икенсе яҙына бойҙай сәсәләр былар. Айыу: "Былтыр һин мине үҫентенең һабағын биреп, алданың, быйыл миңә тамыр өлөшө тейеш", - тип, алдан әйтеп ҡуйған һәм... тағы ла алданған, ти. Иҫегеҙгә төшкәндер.

Үҙебеҙҙе ошо әкиәттәге айыуға оҡшатып ҡуйҙым. Ҡалай итһәң дә, беҙ, ябай һәм ярлы халыҡ, алданабыҙ. Рәсәй Хөкүмәте лә көрсөк осоронда икмәкһеҙ ултырғандарға түгел, ә аҡсалалырға ярҙам итеүҙе үҙ бурысы итеп күрә, булып сыҡты. Ана бит, аҡсалата ярҙамды банкирҙарға, олигархтарға бирҙе, ә беҙ, ярлылар, тағы ла нығыраҡ ярлыландыҡ. Урамдан үтәм, уң яҡта - "Русьбанк", һул яҡта - "Альфабанк". Аҙым һайын банк...

Ярлыларҙың тағы ла ярлыланғанын ҡайҙан беләһең, әллә "Опрос населения" тип аталған ойошмала эшләйһеңме, тип һорарһығыҙ. Юҡ, эшләмәйем. Урамдан үткәндә халыҡтың өҫ кейеменә ҡарап та белеп була быны. Һикһән йәшкә етеп барыусылар СССР заманында һатып алған кейемен кейеп йөрөй (уңмай ҙа, туңмай ҙа, ныҡлы туҡыманан тегелгән инде улар). Замансараҡ яңы кейемгә аҡсалары етмәй. Ә күптән түгел пенсияға сыҡкан 60-65 йәшлек кешеләр балалары кейеп ташлаған сәйер модалы кейемдә. Ҡыҫҡа салбар кейгән апайҙар бигерәк ҡыҙыҡ күренә миңә. Былар ҙа аҡса юҡлыҡтан инде. Пенсия аҡсаларын үҙҙәренән өҙөп-йолҡоп, исмаһам, ейән-ейәнсәрҙәре бүтәндәрҙән кәмхур булмаһын, тип, уларҙы кейендерәләр бит. Пенсионерҙарға өс айға бер тапҡыр йөҙәр һум аҡса өҫтәй ул дәүләт, тик ҙур итеп һөйләһәләр ҙә, ул аҡса күҙгә лә күренмәй. Бер йәшлек ейәнсәренә бер күлдәк алып бирергә лә етмәгәс, пенсия өҫтәнеләр, тип һөйләүе лә оят бит.

Шуныһы: баяғы айыу кеүек хәйләһеҙ булһаҡ та, аңра түгелбеҙ. Бөтәһен дә аңлап, көлөп йөрөйбөҙ. Айыуҙы алдап кинәнеү тураһындағы әкиәттең Рәсәйҙә ижад ителеүе юҡҡа түгелдер, тип тә уйланыла...

**Фәүзиә ЯХИНА.**



СӘҒИТ АГИШ исемендәге хикәйәләр конкурсы

Әмир СӘЙФУЛЛИН

# ИНӘ БҮРЕ

(хикәйә)



Колхоздың баҫыу ҡараусыһы Янбаев Әхмәт атын эсерергә йылға буйына төштө. Йәйге көн бигерәк эҫе шул. Баҫыу ҡараусының бурысы - иген, бигерәк тә сөгөлдөр сәселгән майҙандарҙы ауыл малы тәләфләүенән һаҡлау. Хәйҙәров Хәлим дә баҫыу ҡарай. Уларҙың һәр ҡайһыһының үҙ биләмәһе. Ҡай саҡта шулай ҙа булғылай: улар бинокль аша яландарҙы байҡап, көтөүҙән айырылған малдың баҫыу тапап йөрөүен күреп ҡалһа ла, ҡасҡалаҡтың үҙ яғында түгеллеген самалап: "Әһә, иртәгә рәйестән эләгәсәк уға!" - тип әсе көләмһерәп кенә ҡуя. Иртәгәһенә, бергәләшеп хәмер һемереп ултырғанда, араларында ошондайыраҡ әңгәмә сығасаҡ.

- Һин, күргәс, ниңә миңә өндәшмәнең? Ҡәһәрең, йоҡлап кителгән!

Яуабы ла шулайыраҡ яңғырай:

- Мин балыҡсылап йөрөнөм бит, күрмәй ҡалдым!

Атын эсереп, һалҡын һыуҙа ҡойоноп сыҡҡас, Әхмәт ағас күләгәһенә ятты ла, серемгә талды. Көн кискә ауышҡайны инде. Күк аяҙ, зәңгәрлеге күҙҙе сағылдыра. Ауыл көтөүе ҡайтырға иртә әле. Әхмәттең төп эше ана шул көтөү ҡайтыуҙан башлана ла инде. Көтөү ҡайтҡас, һәр хужабикә үҙ малын ҡаршы ала, һыйырҙарҙы быҙауҙарынан айырып бикләй. Елендәре ташҡан бәғзе һыйырҙар түҙемһеҙләнеп, ҡапҡаны мөгөҙҙҙәре менән асып, хужабикәһе янына ашыға. Ә елғыуарыраҡтары иһә, киреһенсә, өйҙән ситкә, ауыл янында уҡ йәйрәп ятҡан иген, сөгөлдөр баҫыуҙары яғына баш ҡайыра. Ана шунда Әхмәткә көс төшә.

Әхмәтте насар кеше тип әйтеп булмай. Йорто ныҡлы, ҡатыны, ике балаһы бар. Әрмелә хеҙмәт итеп ҡайтып, башта шофер булып эшләне. Аҙаҡтан, һаулығы насарланғас (ул хеҙмәттә ашҡаҙан сиренә тарығайны), ремонт мастерскойына күсерҙеләр. Ашҡаҙанына операция яһағас, баҫыу ҡараусыһы булырға тәҡдим иттеләр. Риза булды инде.

...Әхмәт йоҡо аралаш бер нәмәне хәтерләне. Ул кисә, эш юҡлыҡтан ғына тирә-йүнде биноклдән байҡап, теге ярҙағы урман ситендә ҙур ғына бурһыҡ йөрөгәнен күреп ҡалғайны. "Тимәк, яҡын-тирәлә өңө бар", тип уйлап ҡуйҙы ул. Көтөү ҡайтҡансы барып, эҙләштереп ҡарарға кәрәк.

Атын эйәрләп, атаһынан ҡалған иҫке генә 16-сы калибрлы мылтыҡты алып, йылғаны кисте лә, урманға инде. Бер аҙ бара биргәс, йәйәүләне, атын бәйләп ҡуйҙы. Бер нисә яһауҙы кеҫәһенә тыҡты һәм ары юлланды...

Бер нисә сәғәт урман ҡыҙырҙы. Бер ни тапмағас, күләгәгә ял итергә ултырҙы ла, тәмәке тоҡандырҙы. Белә ул, бурһыҡтар өңдәрен шундай оҫта йәшерә, хатта эргәһенән үтеп китһәң дә, абайларлыҡ түгел.

Ләззәтләнеп тәмәке көйрәткәндә, ул ҡайҙалыр сыйылдаған тауыш ишеткәндәй булды. Көсөкмө, бесәй балаһымы тауышына оҡшаш. Әммә тауыш асығыраҡ ҡабатланды. Тәмәкеһен ташлап, Әхмәт тауыш килгән яҡҡа китте. Ҡуйы, оҙон үләндәрҙе ҡайырып ҡарағайны, бүре өңөн күреп ҡалды. Моронон саҡ ҡына сығарып, йәшкелт күҙҙәрен аптыраулы йылтыратып, бәләкәй генә бүре балаһы уға ҡарап тора.

Әхмәттең тәне зымбырлап китте. Ул ҡапыл артҡа һикерҙе, йүгереп барып мылтығын эләктерҙе лә, тирә-яҡты байҡаны. Әммә эргәлә тып-тын, бер ни күренмәй. Башына беренсе килгән уй - тиҙерәк ҡасыу булды. Инә бүре әйләнеп ҡайтһа... Әҙерәк тынысланғас, фараз ҡылырлыҡ хәлгә инде. "Бүре бер ҡасан да үҙ өңө эргәһендә һунар итмәй. Тимәк, ул кисә кис үк һунарға сыҡҡан. Мылтығын әҙер тотоп, Әхмәт яңынан өң янына килергә батырсылыҡ итте. Өң ауыҙында сыйылдап ике көсөк ултыра.

Бүре балаларына ҡарап тора биргәс, был кескәй мәхлүктәр йәл булып китте уға. "Улар бер нисә тәүлек ашамағандарҙыр инде, әгәр инәләре ҡайтмаһа, астан үләсәктәр", тигән уй үтте башынан. Шул арала, көсөктәр оянан килеп сыҡтылар ҙа, Әхмәт янына уҡ килеп, итектәрен ялай башланы. Ниһайәт, Әхмәт ҡырҡа ҡарарға килде: "Ярай, ни булһа ла булыр, алып китәм! Ашатып, үҫтерә биргәс, урманға ебәрермен әле, бигерәк йәлкеләр бит", - тип үҙен йыуатты ул.

Әхмәт өйөнә ашыҡты. Барыһы ла йыйылышып, сәй эсәләр ине. Әхмәт иҙеүен ысҡындырҙы ла, бүре балаларын иҙәнгә тәгәрәтте. Өйҙәгеләрҙең күҙҙәре шарҙай булды. Иң тәүҙә кинйә ҡыҙы иҫенә килде.

- Ой, ҡалай матур!

Икенсеһен улы эләктерҙе.

- Һөт бир шуларға, ҡыҙым! - тине Әхмәт, тынысланып. Ҡыҙы йүгереп йөрөп шәшке аҫтындағы һөттө иҙәнгә ултыртты. Бүре балалары, уның еҫен тойоп, сынаяҡҡа төртөлдө. Этешеп-төртөшөп, пырхылдап сәсәй-сәсәй, ҡомһоҙланып булашып, һауытты бушаттылар ҙа, морондарын сөйөп тағы ла ҡыҙыҡайға текәлде.

- Ысынлап та, бик астар икән, тағы берәй тәүлектән үлерҙәр ине, - тип ҡуйҙы Әхмәт. Шунан өҫтәне:

- Ярай, ҡыҙым, күп эсермә, етер.

Тамаҡтары туйғас, бүре балалары үҙҙәре өсөн ят булған әҙәм донъяһын - өйҙө тикшерергә кереште. Береһе диван аҫтына инеп китте лә, ҡасандыр кемдер ташлап ҡуйған йомшаҡ айыу балаһын һөйрәп сығарҙы, нескә тауыш менән ырылдап, уны тегеләй-былай һелкетә лә башланы. Янына икенсеһе лә килеп етте, бахыр уйынсыҡҡа икәүләп йәбештеләр.

Ниһайәт, хужабикә лә аңына килде. Ул был ығы-зығыға оҙаҡ ҡарап тик кенә ултырҙы ла, ҡото осоп өндәште:

- Әхмәт! Былар бит - бүре балалары! Уларға тейергә ярамай! Әгәр инәләре...

* * *

Иртәгәһенә төш Әхмәткә күптәнге дуҫы Кәрим килеп инде. Ул күрше ауылда, колхоздың үҙәгендә йәшәй. Әрмелә бергә хеҙмәт иткәйнеләр. Ул аҡ "Волга"ла колхоз рәйесен йөрөтә.

- Бөгөн минең ялым. Машинаны ремонтҡа ҡуйҙым, һеҙҙең яҡҡа йомош менән килеп сыҡҡайным, - тип һөйләнә-һөйләнә, ул муҡсаһынан ике шешә араҡы, колбаса сығарып өҫтәлгә теҙҙе. Әхмәт ҡаршы килмәне.

- Был нимә? - тип аптыраны Кәрим, тәүге рюмканы һуҡҡас уҡ, түпһа төбөндә тыныс ҡына йоҡлап ятҡан көсөктәрҙе күреп ҡалып. Әхмәт хәлде ентекләп һөйләп бирҙе.

- Бәхет йылмайған икән! - тип көлдө Кәрим.

- Йә, ярай, ҡой тағы ла.

Икенсе шешәнең төбөндә генә ҡалғанда, уларҙың теле сиселеп, эс серҙәренә күскәйнеләр инде. Ҡапыл Кәрим, ниҙелер иҫләргә маташып ултыра бирҙе лә, әйтеп һалды:

- Ҡарале, Әхмәт! Шәп уй бар! Кисә Гүзәл ҡыҙым, район үҙәгенә зоопарк килгән, атай, алып бар, тип мыжығайны...

- Шунан ни? - тип мығырҙаны Әхмәт.

- Нисек инде - ни? Әйҙә, һинең бүре балаларыңды шунда илтәбеҙ ҙә, һатабыҙ! Иртәгә шул яҡҡа юл да төшөп тора.

- Юҡ, бирмәйем, мин уларҙы кире ебәрәм, - тип тиҫкәреләнде Әхмәт.

- Нимәгә улар һиңә? Ә зоопаркҡа уларҙы кинәнеп алаҫаҡтар! Ҡараулы булырҙар, беҙгә ситлек аша ирәйеп кенә ҡарап йәшәрҙәр...

Ултыра биргәс, Әхмәткә Кәрим хаҡлы һымаҡ күренә башланы. Ул ризалашты.

Иртәгәһенә таң менән "Волга"һында Кәрим килеп тә етте. Йоҡоло көсөктәрҙе ҡумтаға һалып, улар ауылдан ҡырҡ саҡрымдан алыҫлыҡтағы район үҙәгенә юлланды. Ысынлап та, ҡаласыҡ паркының үҙәк майҙанында ҡайҙандыр килеп сыҡҡан зоопарк урынлашҡан икән. Бейек ҡойма менән уратылған майҙансыҡта тәгәрмәсле ситлектәрҙә төрлө хайуандар күренә. Сәғәт ундан ғына эшләй икән. Әлегә "иртәнге аш" ейеү бара. Тәғәм еҫен тойған януар-кейектәр ығы-зығы килә. Тирә-яҡ арыҫлан һәм юлбарыҫ ырылдауынан, ҡабан мырҡылдауынан, бүре олоуынан, ат кешнәүенән, ҡоштар сырылдауынан, тағы ла әллә ниндәй тауыштарҙан шау-гөр килеп тора.

- Ни йомош, туғандар?- тип ҡаршыланы уларҙы администратор.

Кәрим менән Әхмәт өнһөҙ генә ҡумтаны асып күрһәтте.

- Оһо! Шәп! Ниндәй нәфистәр! - тип ҡыуанып китте администратор.

- Алаһығыҙмы? - тип ҡәтғи һораны Кәрим.

- Күпме?

- Икеһе өсөн биш йөҙ, - тине Кәрим.

- Ҡиммәтерәк, - тине администратор, һаман ҡулында тотҡан көсөктө әйләндереп ҡарай-ҡарай. - Икешәр йөҙ бирәм, ризаһығыҙмы?

Кәрим менән Әхмәт уйлап та торманы.

* * *

...Инә бүре, балаларын имеҙгәс, елкәләренән тешләп кенә өңдөң иң мөйөшөнә һалды ла, тышҡа сыҡты. Төн эсендә ашарға табып, әйләнеп килгәнсе йоҡлаясаҡтарын белә ул. Йәйге көн тамам. Ҡояш байыған. Ҡош тауыштары тына. Моронон өҫкә сөйөп, инә бүре тирә-яҡты еҫкәне. Өйрәнелгән урман еҫенән башҡа мәғлүмәт таба алманы. Бүре бер ҡасан да үҙ өңө янында һунар итмәне, кәрәк аҙыҡлыҡ ҡорбандарын егермешәр саҡырым ситтә эҙләр булды. Балалары өсөн хәүефләнеү уны мөмкин тиклем һаҡ булырға өйрәткән. Ул ауға төндә генә сыға, көндөҙ өңөндә боҫоп ята, хатта урманға ла сыҡмай.

Бер нисә саҡырым сабып үтеп, асыҡ үҙәнгә сыҡҡас, ул осраҡлы ғына үрғуянды тап итте. Ҡурҡыуҙанмы, яңылыштанмы, ҡуян боҫоп ятҡан ышығынан килеп сыҡты ла, ситкә сапты. Бүре уны бер нисә ырғыуҙа ҡыуып етте, быуып ташланы. Ҡартыраҡ, әммә һимеҙ ине үрғуян. Уны тиҙ генә ботарлап ашағас, бүре туймауын тойҙо. Таңға тиклем ваҡыт бар ине әле. Ары сапты. Әммә өмөттәре аҡланманы...

Ҡуйы шырлыҡ эсендә ул ҡабан эҙҙәре еҫен тойомланы. Тиҙҙән һуҡмаҡтарын да тапты. Саҡ ҡына беленеп ятҡан һуҡмаҡ ҡуйы ҡыуаҡлыҡ эсенә инеп китә ине. Бүре шунда сумды. Ҡапыл әсе сыйнап ебәрҙе лә, әйләнеп барып төштө. Ҡабандарға тип бик оҫта көйләнеп ҡуйылған тоҙаҡҡа эләккәйне ул. Һикереп тороп, тағы тартылды, тик тоҡан муйынын нығыраҡ һығына ғына төштө. Сыйнай-сыйнай, бүре төрлөсә үрһәләнде, әммә бушҡа ғына. Тоҙаҡ бәйләнгән ағас тирәләй өйөрөлә торғас, томшоғо менән барып һырлыҡты, кирегә әйләнә башланы. Күпме этләнгәндер шулай, таң беленә башланы. Тамам хәлдән тайып, бүре ятты ла, тынып ҡалды. Яҡтылыҡтан, көндән ҡурҡа ул. Көндөҙ хәүеф-хәтәрҙең күберәк икәнен белә. Тоҙаҡтарын тикшерергә Кеше килеп ҡуйһа? Көн асыртҡас, бүре тимер сымды осонаса тарттырҙы ла, һуҡмаҡтан ситкәрәк шылып, бөгәрләнеп ятты. Үҙе тимер сымды осло тештәре менән эләктереп, сәйнәй башланы. Ул йыуан ғына ине, әммә тимер түгел, йомшағыраҡ. Бөгөлә, тик һынмай. Көн шулай үтте. Тағы төн килде...

Өңдә ҡалдырған балаларын иҫләп, ул сымға ажарланыбыраҡ йәбеште. Көсәнеүҙән тештәре ауырта башланы, ауыҙы ҡанға буялды, ләкин ул быны тойманы ла. Башында бер генә уй өйөрөлдө: тиҙерәк ҡотолорға ла - балалары янына.

Ҡай саҡта үрә баҫып кинәт тартылып та ҡараны ул, әммә тоҙаҡ тағы һығыла ғына бирҙе. Мәтәлләп төшөп, бүре йәнә сәйнәнергә тотондо. Тағы ла таң атты. Ситкәрәк шылып, инә бүре сымды иҙгеләүен дауам итте. Кискә ҡарай ул ағас төбөнә тиклем килде лә, түҙемлеге бөтөп, бар көсөнә алға ташланды. Тимер сым шыртлап өҙөлдө. Аяҡтары менән муйынындағы тоҡанды сапсып сығарып, ул алға йомолдо...

Ҡараңғы төшкәс кенә өңө янына сабып килеп етте бүре. Эскә инеп китте лә, кире килеп сыҡты, таныш булмаған еҫтәрҙе тойоп, өң тирәһендә әйләнгеләнде, балаларын саҡырып ырылданы. Әммә улар күренмәне. Шунан бүре өң тирәһен ентекләп тикшерергә кереште. Бына ағас төпһәһе, унда кеше ултырған, хатта тәмәке төпсөгө ята. Ул эҙ буйлап йүгерҙе. Бына ат еҫе, тиҙәге лә ҡалған. Бүре ат юлы буйлап сапты. Улар йылға ярына килтерҙе. Эҙ буйлап кирегә китте, улар йәнә йылға ярына төртөлдө. Яңылышыу мөмкин түгел. Бүре йылғаны йөҙөп сыҡты ла, теге ярҙа тағы шул ат эҙҙәренә юлыҡты. Ул эҙҙәрҙе еҫкәп, яйлап ҡына юллап барғанда, бөтөнләй ҡараңғы төшкәйне инде. Ауыл янындағы убаға менеп ултырғас, ул тауыштарҙың тыныуын көтөргә ҡарар итте. Эттәр өрмәй, кешеләр һөйләшмәй башлағансы, ятып торорға кәрәк.

(Дауамы бар).

КӨН КҮРГӘН ШӨҒӨЛ

# ӘГҮРСӘ ҮҪТЕР...

## етеш йәшәрһең

**Был яҡта ҡыярҙы "әгүрсә" тип йөрөтәләр. Уны һәр йортта яратып үҫтерәләр, ҡышҡылыҡҡа тоҙлайҙар, әммә аҡса эшләү маҡсатында күпләп ҡыяр сәсергә баҙнат итеүселәр юҡ иҫәбендә. Ә бөгөнгө геройҙарым, шартына килтереп үҫтерә белһәң, ҡыярҙан да ҙур төшөм алып була икәненә күптән инанған.**
**Әбйәлил районының Байым ауылында йәшәүсе Зөлфиә һәм Мирза ҒӘСКӘРОВтар ғаиләһе бына өсөнсө йыл ҡыяр үҫтереп һатыу менән шөғөлләнә. Әбйәлилдәр өсөн ят иҫәпләнгән шөғөлгә тотонорға нимә этәргән уларҙы, бының өсөн ниндәй сығымдар түгергә тура килгән, нисек документтар юлларға, теплица төҙөгәндә ниндәй материал ҡулланырға була? Ҡыяр үҫтереү серҙәре менән йорт хужаһы Мирза ағай уртаҡлаша.**

### Артыҡ мәшәҡәте юҡ кеүек

Колхоз тарҡалғанға тиклем мин унда шофер, тракторсы булып эшләнем. Ҡатыным Зөлфиә ғүмере буйы бухгалтер булды. Баҡсасылыҡҡа бер ҡыҙыҡлышыбыҙ ҙа юҡ, тиер инем, Зөлфиә электән баҡса үҫтерергә ярата. Шуға ла Туймазыла йәшәгән ҡәйнешем, ҡыяр үҫтереп ҡарағыҙ, тип тәҡдим иткәс, уйлана башланыҡ. Әйтергә кәрәк, Туймазы яҡтары ҡыяр үҫтереү менән күптән шөғөлләнә, унда өй һайын тиерлек ҡыяр теплицалары бар. Ҡунаҡҡа барған мәлдәрҙә уларҙы инеп ҡарап, бер йыл тирәһе уйлағандан һуң, беҙ ҙә тәүәккәлләнек. Туймазылар Өфө районы "Алексеевка" совхозының агрономына барып, тәүҙә эште нисек ойоштороу тураһында һөйләшегеҙ, тип кәңәш итте. Ул: "Юҡ менән булышмағыҙ, эше ҡыйын, килеме юҡ, ана, рефрижератор һатып алығыҙ ҙа, ҡыярҙы беҙҙән килеп алып, һатыу менән генә шөғөлләнегеҙ", - тип сығарҙы. Тик был ғына ҡурҡытманы беҙҙе, уйлаған эшебеҙҙе аҙағына тиклем алып барып еткерергә булдыҡ. Эш, ысынлап та, ауыр булып сыҡты. Ҡыяр үҫтереп һатам, тип әйтеүе генә анһат, эштең айышына төшөнөп киткәнсе байтаҡ ваҡыт кәрәк булды.

Кеше ниндәйҙер эш башлар алдынан тәүҙә рөхсәт алырға, күп һанлы документтар юлларға тейеш булып сыға. Шуға ла күптәр ҡағыҙ эшенән ҡурҡып, ҡул һелтәй ҙә ҡуя. Беҙгә был яҡтан еңелерәк булды: теплица картуф баҡсаһында урынлашҡас, махсус рөхсәт кәрәкмәй, сөнки был һинең ерең һәм һин унда нимә теләйһең, шуны үҫтерергә хоҡуғың бар. Шулай ҙа сәсә торған орлоҡҡа рөхсәт мотлаҡ кәрәк. Беҙ тәүге йылда орлоҡто Өфөнән һатып алғайныҡ, хәҙер Туймазынан алабыҙ, унда баҡсасылыҡ менән шөғөлләнеүселәр өсөн махсуслашҡан магазиндар күп, йәғни орлоҡто ситтән индереп, тикшереү үткәртеп йөрөгәнсе, махсус магазиндан һатып алыу күпкә ҡулайлыраҡ. Ҡыяр өлгөргәс, уның сифатын тәүҙә райондың ауыл хужалығы идаралығында тикшерәләр, һуңынан Өфөгә ебәрәләр һәм сифат сертификаты бирәләр. Һатҡан саҡта ауыл биләмәһе хакимиәтенән шәхси хужалыҡҡа справка алаһың. Ҡайһы саҡта баҙарҙа анализ алалар, сөнки, үзебеҙ үҫтергән ҡыяр, тигәнгә береһе лә ышанмай, алыпһатарҙар тип уйлайҙар.

### Эште нимәнән башларға

Көҙҙән, ер туңмаҫ элек, теплица өсөн бағаналар ултыртып ҡалдыҡ, ҡалғанын ҡыш эшләнек. Беренсе йыл бер нәмә лә әҙер булмағас, ҡыйынға тура килде. Теплицаны декабрҙә төҙөй башлағайныҡ, ғинуарҙа полиэтиленын тартып, мейестәрен эшләп ҡуйҙым. Беренсе йылды өс мейес ине, икенсе йылына дүртенсеһен ултырттым, теплица насарыраҡ йылығас, быйыл мейестәрҙе бишәү иттек. Февралдә мейескә яға башлайһың, ер яйлап емшей һәм мартта ҡояш нуры һыбыраҡ йылыта башлау менән тиҙ генә ирей. Мин тәүҙә картуф баҡсаһына ҡыяр ултыртыр алдынан ерҙе ял иттереү маҡсатында арыш сәстем. Шуның да файҙаһы булды, ер өс йыл рәттән яҡшы уңыш бирҙе. Быйыл ерҙең көсө бөткәне һиҙелә, йыл да ҡоро килде, был да тәьҫир итә, етмәһә, төнөн һыуыҡ, көндөҙ эҫе - быныһы ла насар. Температура төндә 17-нән төшһә, көндөҙ 32-нән артһа, ҡыяр үҫмәй, бөтөнләй аталанмай.

Йыл һайын ергә самалап тиреҫ индерәбеҙ. Тиреҫте артыҡ индерергә лә кәрәкмәй. Ерҙе ҡаҙған саҡта "Кемира - Универсал" хлорһыҙ комплекслы ашлама менән туҡландырабыҙ. Әсетелгән һыйыр тиҙегән даими һибеп торабыҙ. Ҡыш буйы мейес яҡҡас, көлөн йыйып, ҡыярҙы сәсер алдынан ғына һибеп сығабыҙ, алданыраҡ һипһәң, көлдөң көсө бөтә. Башҡа бер төрлө лә ашлама ҡулланмайбыҙ. Үҫенте өсөн торфты 50-шәр килограмлыҡ тоҡтар менән Туймазыға юл төшкән һайын алып ҡайтырға тырышабыҙ. Унда торф һатып алыу өсөн генә махсус рәүештә барһаҡ, торфыбыҙ алтынға төшөр ине, былай юл сығымы һиҙелмәй.

8 сутый ер өсөн полиэтиленды километрҙан ашыуыраҡ алабыҙ, уны йыл һайын алыштырып торорға кәрәк. Бының өсөн 10 мендән ашыуыраҡ аҡса китә. Теплица өсөн полиэтилен ҡулланыу - иң дөрөҫө. Әлбиттә, былай йәки хәҙерге ваҡытта киң таралыу тапҡан кәрәҙле поликарбонат ҡулланыу уңайлыраҡ, тип уйлай күптәр. Бәлки, сыҙамлығы яғынан был материалдар ныығыраҡтыр, әммә ҡар, ямғыр төшмәһә, ҡояш нуры үтмәһә, ер ярылылана һәм юғары уңыш алыу мөмкинлеге бермә-бер кәмей. Поликарбонат ҡулланғанда тупраҡты йыл да алыштырырға кәрәк, ә тупраҡты алыштырыу еңел эш түгел. Беҙ август аҙағында уҡ полиэтиленды алып ташлайбыҙ, ямғыр, ҡар һыуҙары, ҡояш нурҙары туранан-тура төшөп, ерҙе байыта, туҡландыра.

Утын табыуы ауырыраҡ, сығымы ла байтаҡ ҡына, яҙға сыҡҡансы, 70 кубометрлап утын кәрәк, йәйен дә яғыуҙы иҫәпкә алғанда, 100 кубометр утын бер миҙгелгә етә. Беҙҙең яҡтарҙа май айынан алып июнь уртаһына тиклем һыуыҡтар тора, көндәр ныҡыраҡ һыуынып китһә, төнөн дә мейестәргә яғырға тура килә. Быйыл, мәҫәлән, июль башында ла мейескә яҡтыҡ. Һыуҙы ҡоҙоҡтан һауыҡҡа тултырып, ут яғып йылытып һибәбеҙ. Йәй буйы һыу йылытыуға ғына бер машина утын китә. Быйыл ҡыярҙы февралдең 16-лары тирәһе сәстек, ергә марттың 24-тәре тирәһе күсерҙек. Ҡыяр ике ай тирәһендә өлгөрә, апрелдең 15-тәрендә беренсе уңышты һаттыҡ. Иртәрәк уңыш алырбыҙ, тип, быйыл иртәрәк сәсеп ҡарағайныҡ, тик ҡояш булманы һәм ҡыяр насар үҫте. Шуға ла артыҡ ҡабаланыуҙан файҙа юҡ, йыл һайын бер үк ваҡытта ултыртыу яҡшыраҡ. Беҙ ҡыярҙы бер тапҡыр ғына сәсәбеҙ ҙә, ул йәй бөткәнсе уңыш бирә, тик иҫкергән япраҡтарҙы өҙөп торорға кәрәк. Бар эш Зөлфиә иңенә төшә. Тәүге йылы ул теплицанан бөтөнләй сыҡманы. Балаларыбыҙ Руслан менән Алһыу ҙа ярҙамлаша, быйыл



күрше килен, ағайымдың ҡыҙы ярҙам итте.

### Һатырға ла өйрәндек

Үҫтереүен үҫтергәс, ҡыярҙы һатырға ла кәрәк бит инде. Башта магазиндарға тапшырып ҡарағайныҡ, хаҡы сыҡмай, сөнки магазиндар тауарҙы осһоҙ хаҡҡа алырға тырыша. Шуға ла хәҙер баҙарға сығарып һатабыҙ. Тәүге тапҡыр баҙарға 10 килограмм тирәһе генә ҡыяр алып барҙыҡ. Ни мин һата белмәйем, ни Зөлфиә, ҡыярҙарҙы полиэтилен ҡапсыҡтарға һалып ултырттыҡ та, үҙебеҙ ситкәрәк ҡастыҡ. Берике кило һаттыҡ та, ҡабат һатмаҫтай булып ҡайттыҡ. Ныҡ ҡыйын булғайны шунда. Яйлап өйрәнелде инде, йәшәйем, донъя көтәм, тиһәң, йүнен күрергә тура килә. Хәҙер ҡыярҙы һатыуға иртәрәк сығарып ҡалырға тырышабыҙ, шул сағында май айында уҡ бөтә сығымдар ҡапланып бөтә. Ҡыяр төндә үҫә икән, иртә таңда өҙөлгән ҡыяр кистән өҙөлгәненә ҡарағанда тәмлерәк һәм хуш еҫлерәк булыуын күптәр белмәйҙер әле. Тәжрибәле ҡыяр үҫтереүселәр иң тәмле ҡыяр иртәнге 4-тә өҙөлгәне тиҙәр, өс йыл ҡыяр үҫтерәбеҙ, әммә быныһын һынап ҡарағаныбыҙ юҡ.

Ҡыярҙы быйыл килоһын 100 һум менән һата башланыҡ, былтыр ошо уҡ ваҡытта 80 һум ине. Йәй аҙағына ҡыяр 25, 15 һумға тиклем төшә. Үҙебеҙҙең даими һатып алыусылар ҙа бар. Тәүге йылы Магнитогорскиҙа һатып ҡарағайныҡ, унда кеше ҡыярҙы грамлап, берәрләп кенә ала. Улай һатһаң, оҙаҡ була. Аҫҡарҙа ла һәйбәт алалар, һабантуйҙа, байрамдарҙа, күпләп кеше йыйылған саҡта сығырға тырышабыҙ. Шулай ҙа беҙҙең өсөн Белорет баҙары иң ҡулайы, ул яҡыныраҡ та. Ауылдаштарға осһоҙораҡҡа, туғандарға бушҡа ла бирәбеҙ. Йөрөтөп һатыу өсөн махсус йөк машинабыҙ юҡ, 12-се модель машинаға 300 килограмға яҡын ҡыяр тейәп йөрөйбөҙ.

Тағы ла шуны әйткем килә: теплица эсендә дүрт-биш йыл рәттән эшләгәндән һуң, сәләмәтлек ҡаҡшай башлай. Шуға ла Туймазы яҡтарында ошо осор үтеү менән был эште йә ташлайҙар, йә кеше ҡушып эшләтәләр. Быныһын да иҫәпкә алырға кәрәк, аҡса табам, тип, һаулыҡҡа ҡул һелтәп ҡарарға ярамай. Әйткәндәй, быйыл помидор ҙа ултыртып ҡарағайныҡ, файҙаһын тапманыҡ. Етмәһә, теплица эсендә помидор үҫтереүе ныҡ ауыр икән, еҫе насар, сәғәт-сәғәт ярым эшләһәң, көнө буйы баш ауырта, тәнгә тейһә, шул ер сабыртып сыға.

Һүҙ аҙағында тағы ла бер сер менән уртаҡлашайыҡ әле: ҡыяр яҡшы үҫһен өсөн улар менән даими рәүештә һөйләшергә кәрәк. Гел тауышланып йөрөп булмай бит инде, шуға ла теплицала "Юлдаш" радиоһы көнөн дә, төнөн дә тынмай.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Ғәҙәттә, төшөмлө эш менән шөғөлләнгән кешеләр уңыш серҙәре, аҡса табыу юлдары менән бүлешергә ашҡынып тормай. Ә Зөлфиә апай менән Мирза ағай кәңәш һорап килгән һәр кемгә ярҙам итергә тырыша. Ана шулай ихлас күңелле, ябай булғандары өсөн дә эштәре уңып торалыр, тигән уйҙар менән сыҡтым уларҙың йортонан. Арағыҙҙа Ғәскәровтар кеүек үҙ көнөн үҙе күреүсе эшһөйәр кешеләр булһа, улар тураһында беҙгә яҙып ебәрегеҙ, хөрмәтле уҡыусыларыбыҙ.**

**Ләйсән НАФИҠОВА**
**яҙып алды.**

ЗАУЫҠ

# ОЛПАТ ҠАРТЛЫҠ ҮҘЕ ҠЫУАНЫС...

### Ҡартлыҡ дәрәжәһе

"Ҡартлыҡ - шатлыҡ түгел",- тиҙәр, яңылышалар,
Ҡартлыҡтың да шундай мәле бар.
Уңыш йыйыр сыуаҡ көҙҙәре лә,
Ярһыу яҙы, йәшнәр йәйе бар.

"Ҡартлыҡ - шатлыҡ түгел",- тиҙәр, яңылышалар,
Сал сәстәрҙә ҡыштың аҡлығы.
Йыйырсыҡтар - үткән ғүмер эҙе,
Ә күҙҙәрҙә йәшәү шатлығы.

Үткәндәрен барлау, хәтирәләр
Күңеленә уның йыуаныс.
Дәрәжәһен белеп ҡартлыҡ килә,
Олпат ҡартлыҡ үҙе ҡыуаныс.

### Түрә

Танау күптән күккә сөйөлгән,
Һөйләшә ул тамаҡ төбөнән.
Ярар өсөн ошо түрәгә,
Хамелеонға кеше әйләнә.

Кемдәр уға элек юл киҫкән,
Кемдәр уға "яман" һүҙ әйткән,
Күргән уның етешһеҙлектәрен,
Һәм күрһәткән кәмселектәрен.

Бөгөн күрә шуның ыҙаһын,
Дөрөҫ һүҙҙең күрә язаһын.
Ялағайҙар һәм дә ҡуштандар,
Яндарында урын алғандар.

Сөнки улар майлай беләләр,
Майлағанды һөйә түрәләр.
Нахаҡ, ялған улар ҡоралы -
Унһыҙ теймәй түрә ярҙамы.

Ябай халыҡ ҡына аптырай,
Әйтә алмай һүҙен - ҡалтырай.
Оҡшамаһа һүҙең түрәгә,
Тыңлап бөтмәй бороп ебәрә.

Нисек табырға һуң көй-яйын,
Булырғамы әллә хамелеон?
Баш ваталар: нишләп ҡарарға?
Был түрәгә нисек ярарға?

**Зәйтүнә АЙЫТБАЕВА.**
**Бөрйән районы Ҡолғана ауылы.**

*✓ Хәйер биргәндән һуң күңелдәребеҙ үҙенән-үҙе көрәйеп, зиһендәребеҙ яҡтырып, матур кисерештәребеҙ ҙә яңырып китә. Ниндәй фәһемле, фәтеүәле һәм күңелдәребеҙҙе таҙартыусы сығанаҡ!*



ПСИХОЛОГ ЫҢҒАЙҒА КӨЙЛӘЙ

**Беҙ белгән бар фани донъя ҡапма-ҡаршылыҡтарҙан тора: аҡҡа - ҡара, утҡа - һыу, дуҫҡа - дошман, шатлыҡҡа - ҡайғы, йәшәүгә үлем ҡаршы ҡуйыла. Был бер-береһенән айырылғыһыҙ иштәр теҙмәһенең аҙағына ла етеп булмаҫ, сөнки, йыһан мәңгелек һәм төпһөҙ булған кеүек, береһен икенсеһе инҡар иткән нәмәләрҙе лә һанап бөтөрлөк түгел. Әҙәм балаһы ана шул аҡлы-ҡаралы ҡатмарлы, серле һәм сетерекле донъяла көн итергә мәжбүр. Уйлай китһәң, тормошобоҙ ҙа, үҙебеҙ ошо икһеҙ-сикһеҙ донъяның бер туҙан бөртөгөләйе генә булыуыбыҙға ҡарамаҫтан, әллә күпме бер-береһенә һис оҡшамаған, хатта ҡаршы килгән сифаттарҙан, хәл-ваҡиғаларҙан, эреле-ваҡлы ғәмәлдәрҙән туҡылған.**

# ТИҪКӘРЕНЕҢ КӘРЕ ҠУРЫЛЫР,

## ыңғай ыңғырашмай йәшәр

Донъяның ҡапма-ҡаршылыҡлы тәьҫир итеүен бала үҙе тыумаҫ борон, әле әсә ҡарынында ятҡан сағында уҡ тоя башлай. Элегерәк үҙем уҙғарған психологик тәжрибәләрҙең береһендә ҡатнашҡан ҡыҙ әсәһенең уның менән йөклө сағында лимон ашарға яратыуы, үҙенә ошо арҡала әсә ҡарынында бик тә насар булыуы хаҡында һөйләгәйне. Ошо ҡыҙҙа тыумыштан уҡ цитрус емештәренә көслө аллергия барлыҡҡа килә. Бала организмының нимәнелер ҡабул итә алмайынса ыҙаланыуы кеүек үк, тормош күренештәре лә уның шәхес булараҡ үҫешендә ыңғайҙары менән бер ҡатар, төрлө кире тойғолар ҙа уята. Ғөмүмән, кешегә тормош ағымының ыңғай һәм кире тәьҫир итеүсе көстәре менән килешеп, ошо аҡлы-ҡаралы донъяға яраҡлашып йәшәргә тура килә. Тик әҙәм балаларының һәр ҡайһыһы ҡабатланмаҫ йән эйәһе булғанлыҡтан, улар ошо ҡапма-ҡаршылыҡлы көстәр йоғонтоһон үҙенсә кисерә, ә уларҙың үҙ тормошон нисек баһалауы, тирә-йүнгә ыңғай йәиһә кире ҡарашы ошо хис-кисерештәрҙең ҡайһыһы өҫтөнлөк алыуы менән бәйле формалаша. Кеше донъяға йә позитив, йә негатив күҙлектән ҡарай башлай, һәм уның хис-кисерештәренә ярашлы фекерҙәре лә ыңғай йәки кире төҫ ала. Быны тормошобоҙҙоң кисектергеһеҙ бер ҡануны сифатында ғына ҡарап та булыр ине, әммә тап ошо арҡала күпме кешенең яфа сигеүе, фани донъяла йәшәүенән йәм дә, ғәм дә таба алмай ыҙаланыуы, хатта үҙ-үҙенә ҡул һалыу сигенә етеүе тураһында ла онотоорға ярамай.

Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, хәҙерге быуын кешеләре боронғо ата-бабаларыбыҙҙың көнитмешен ыңғайға көйләгән тормош фәлсәфәһен бөтөнләйгә онотҡан тиергә ерлек бар, сөнки күптәр үҙҙәренә бирелгән ғүмерҙе Илаһи Бөйөк Көс (Тәңрелектә ул Мәңге зәңгәр күк тип атала) бүләге итеп ҡабул итә һәм кисерә алмай. Иғтибар итегеҙ: "Урал батыр" эпосының башынан аҙағына тиклем тиерлек ҡапма-ҡаршылыҡлы көстәрҙең, йәғни изгелек һәм яуызлыҡ яғында тороусыларҙың тиңдәшһеҙ көрәше тасуирлана, күп кеше һәләк була, Урал батыр халҡы өсөн үҙен ҡорбан итә, әммә эпос кешелекте үлемһеҙ иткән тәбиғәткә дан йырлау менән тамамлана. Ер йөҙөндә ниндәй генә бәлә-ҡазалар булмаһын, айырым кеше ниндәй генә ауырлыҡ-һынауҙарға дусар ителмәһен, тормошобоҙ асылындағы йәшәүгә ынтылыш юғалмауы мөһим. Йәшәйештең мәңгелек нурынан ҡот алып, фанилыҡтың һәр мәленән йәм табып, изгелек юлындағы ғәмәлдәрҙән шатлыҡ-ҡыуаныс алып йәшәһен ине һәммәбеҙ ҙә.

Бөйөк фекер эйәләренән кемдер уй-кисерештәрҙең матдиләшә алыуы хаҡында һығымта яһаған, һәм быны раҫлаусы факттар ҙа етерлек. Йәнеңде ҡара уйҙар биләгән мәлдә үҙеңдән тиҫкәре йоғонтоло энергия бүленеп сығасаҡ, ә был йыш ҡабатлана башлай икән, үҙең генә түгел, тирә-йүнеңдәге йән эйәләре лә зыян күрәсәк. Һәм, киреһенсә, йөҙөнән, күҙҙәренән, бөтә булмышынан ихласлыҡ һәм йылылыҡ бөркөлөп торған кешенең күңелен яҡты, изге уйҙар биләгәнлеге әллә ҡайҙан уҡ беленеп, һиҙелеп тора. Ҡара уйҙар ҡартайтһа, яҡтылары йәшәртеп ебәрә бит ул. Кешенең ыңғай уй-хис-кисерештәренең киреләренән өҫтөн булыуы уның физиологик һәм психологик тотороҡлолоғон һаҡлай, эмоциональ һәм психик яҡтан сәләмәт ҡалыуына булышлыҡ итә. Тап шуның өсөн дә психотерапевтар көслө стресҡа дусар булғандарға ыңғай хис-кисерештәр тыуҙырыусы күнегеүҙәр системаһын тәҡдим итә. Махсус психотерапия алимдары менән шөғөлләнмәгән хәлдә лә, көндәлек тормошобоҙ ҡатмарлыҡтарын иҫәпкә алып, психолог кәңәштәренә ҡолаҡ һалыу барыһы өсөн дә урынлылыр, тим.

Иң элгәре һеҙҙең мейегеҙҙең ыңғай энергетикаға көйләнгән булыуы фарыз. "Барыһы ла яҡшы буласаҡ!" - бына ошо девиз аҫтында йәшәү күпкә отошлораҡ. Йәнә: "Мин үҙ маҡсаттарыма мотлаҡ өлгәшәсәкмен, сөнки мин дә, башҡалар кеүек үк, уңыш ҡаҙана алам, һәм шуға лайыҡлымын!" психологик формулаһы һеҙҙең барса фекерҙәрегеҙҙең, кисерештәрегеҙҙең һәм ғәмәлдәрегеҙҙең башында һәм аҙағында ҡаттан-ҡат ҡабатланып тороуы зарур. Күп осраҡтарҙа ошо фекер тураһында уйлап алыу ҙа етә, әммә ошо ыңғай формула иҫтән сығып китмәһен өсөн уны ҙур хәрефтәр менән ватман ҡағыҙына яҙып, күҙегеҙгә салынып торған ергә элеп ҡуйыу артыҡ булмаҫ. Бәлки, кемгәлер был сәйерерәк булып та тойолор, әммә ошо аҙымды бер эшләп ҡараһағыҙ, файҙаһын бик тиҙ арала тоясаҡһығыҙ.

Ваҡыты-ваҡыты менән үҙ-үҙегеҙҙе маҡтап-хуплап алырға ла онотмағыҙ. Бала сағығыҙҙа һеҙҙең турала кемдер яҡшы фекер әйткәнендә, яҡшы баһа биргәнендә нисек шатланып-дәртләнеп китеүегеҙҙе иҫкә төшөрөгөҙ. Сабыйҙарҙың иртәнән кискә тиклем һис бер арымай уйнап-сабышып йөрөүе уларҙың тирә-йүнде яҡты һәм нурлы итеп ҡабул итә алыуындалыр ул, моғайын. Ана, бөйөк Пушкин да, яҡшы шиғырын тамамлағас, шаяртып-көлөп, үҙен-үҙе нисегерәк маҡтап ҡуйған бит әле: "Ай да Пушкин, ай да с-н сын!"

Һәр көнөбөҙ иртәнге мәшәҡәттәребеҙ менән башлана ла, киске тынғылыҡ менән тамамлана. Көндәлек дәрт-дарманыбыҙ ҙа, халәти торошобоҙ ҙа башҡа кешеләр менән бәйле. Улар менән булған мөнәсәбәттәребеҙ бер иш түгел, төрлө саҡтар булып китә. Әммә бәғзе берәүҙәрҙең ҡаты һәм әхлаҡһыҙ ҡағылыуынан рәхимһеҙләнеп, бар донъяға үпкәләп-үсләшеп йәшәүҙең иң элек үҙеңә күберәк зыян килтерәсәген белеп, тиҙерәк тыныслана алыу хәйерлерәктер. Оҙон һәм сәләмәт ғүмер кисергән бер аҡһаҡалдан уның ошондай оло йәшкә тиклем имен-аман йәшәй алыу сере хаҡында һорайҙар икән. "Мин, уландар, бер ваҡытта ла һис бер кемгә ҡаршы һүҙ әйтеп, низағлашып йөрөмәнем, башҡалар әйткән менән ризалаша белдем. Шул минең серем", - тигән был ҡарт. "Юҡ, бабай, быны күҙ алдына ла килтереп булмай, барыбер бер генә кешегә булһа ла ҡаршы һүҙ әйткәнһегеҙҙер ул", - тиҙәр икән быға. "Йә, балалар, булһа булғандыр, бәлки, әйткәндермен дә", - тип ыңғай һыпырмаһынмы бабайыбыҙ! Был миҫалды ыңғайлыҡ психологияһын ҡеүәтләп тороусы бер дәлил итеп ҡарау бик урынлы.

Һәйбәт эштәрҙең, изге ғәмәлдәрҙең сауабы була, тиҙәр. Һис шикһеҙ, шулай, сөнки бер ни ҙә эҙһеҙ үтмәй. Яҡшы ниәттең, яҡты уйҙың, мәрхәмәт тойғоһо менән биҙәлгән кисерештәрҙең дә сауабы бар, сөнки һәр ғәмәлебеҙ ошо изге энергетикалы мәлдән башлана. Бына ябай ғына бер миҫал. Беҙ, мосолмандар, ваҡыты-ваҡыты менән кемгәлер хәйер бирергә күнеккәнбеҙ, ошо ғәмәлебеҙҙе билдәле бер ниәт менән дә башҡарабыҙ. Һәм беҙҙең һәр ҡайһыбыҙға мәғлүм: хәйер биргәндән һуң күңелдәребеҙ үҙенән-үҙе көрәйеп, зиһендәребеҙ яҡтырып, матур кисерештәребеҙ ҙә яңырып китә. Ниндәй фәһемле, фәтеүәле һәм күңелдәребеҙҙе таҙартыусы сығанаҡ! Ә иманлы заттар Ислам диненең тотошлай изге һәм яҡты энергетика сығанағы булыуына күптән инанған инде. Динебеҙҙең бөйөклөгөнә, үҙ халҡын Аллаһ хозурына алып барыусы тәриҡәт юлдарын асҡан суфыйәүлиәләрҙең ирәклегенә сикһеҙ һоҡланған уҡымышлы таныштарымдың береһе ошо хаҡта һөйләшкәндә миңә бик үҙенсәлекле булып тойолған бер фекер әйткәйне. "Ҡөрьән сүрәләрен төрлө халыҡ вәкилдәре уҡығанын ишеткәнем бар. Бик аһәңле итеп, еренә еткереп, көйләп уҡый белгәндәр ҙә күп. Әммә береһе лә беҙҙең халҡыбыҙҙа ҡабул ителгәнсә уҡый алмай. Башҡорт кешеһе намаҙ уҡығанда уның тауышынан ихласлыҡ бөркөлөп тора, уның доғаһында күңел күтәренкелеге лә, Аллаһҡа мөрәжәғәт иткәндәге ҡыуаныс һәм шатлыҡ ауаздары ла, бөткөһөҙ рухи дәрт тә айырым асыҡ булып һиҙелеп тора. Күрәһең, был Ҡөҙрәт Эйәһенә ысын күңелдән инанған инсандың үҙ иманына тоғро булыуынан киләлер", - тине милләттәшебеҙ.

Эйе, фанилыҡ менән баҡыйлыҡ араһында һәр беребеҙгә үҙ өлөшөнә яҙғанын үҙенсә йәшәп уҙғарыу мөмкинлеге бирелгән. Тормош - ҡатмарлы күренеш, ләззәт-рәхәтлектәре менән бергә күңелдәрҙе һыҙлатҡан, үҙәктәргә үткән, күтәрә алмаҫтай булып тойолған ҡайғыларға ла дусар итә ул. Әммә уларҙы кисерә тороп та, тормош оптимизмынан, йәғни Хоҙай Тәғәләнең миһырбанлығынан, йәшәү матурлығынан биҙмәү зарур: Ерҙәге тормошон иманлы итә алған йән эйәләре сикһеҙ баҡыйлыҡ даирәһендә йән тыныслығын, уның бөтөнлөгөн, рухи үлемһеҙлеген табыр.

**Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ.**

АТА-ӘСӘЛӘР ЙЫЙЫЛЫШЫ

# ҠӘНӘҒӘТЛЕК ТАМСЫЛАРЫ

**Күләүек - һәр сабый өсөн шатлыҡ сығанағы булһа, әсә кеше өсөн бөтмәҫ көйөнөүҙәр генә килтерә. Баланы урамдағы был бәләкәй "күл"дәргә ебәрмәй маташыу файҙаһыҙ, һеҙ уны тотоп өлгөргәнсе, сабыйығыҙ бәхетле йөҙ менән уның уртаһында торасаҡ.**

Ә ни өсөндөр күләүектә уйнау насар, тип иҫәпләйһегеҙ һуң? Бала һәр нәмәне үҙе тотоп, тойоп ҡарарға тейеш һәм был нормаль күренеш. Бала менән күләүектә бергәләп уйнау - үҙегеҙҙең бала сағығыҙҙы иҫкә төшөрөү өсөн яҡшы сәбәп. Шуға ла өйөгөҙҙән йыраҡ урынлашмаған төрлө тәрәнлектәге һәм формалағы күләүектәр күреп ҡалһағыҙ, сабыйығыҙҙы етәкләп, уйнарға ашығығыҙ.

**Күләүекте үлсәйбеҙ**

Бергәләп күләүектең сите буйлап йөрөп, аҙымдарҙы ҡысҡырып һанағыҙ. Ошо уҡ ысул менән башҡа күләүектәрҙе лә үлсәгеҙ, уларҙы сағыштырығыҙ, ҡайһыһы ҙурыраҡ икәнен асыҡлағыҙ.

Хәҙер тәрәнлеккә күсәйек. Итектәргә һыу инмәһен өсөн, уны ниндәй ҙә булһа таяҡ менән үлсәү яҡшыраҡ. Күләүек артыҡ ныҡ тәрән булмаһа, балаға уның буйлап йөрөргә, хатта тамсылар сәсрәтергә рөхсәт итегеҙ. Әгәр ҙә һеҙҙең кеүек алдынғы ҡарашлы әсәйҙе сабыйы менән урамда йөрөгәндә тап итһәгеҙ, кем күберәк тамсы сәсрәтә тигән ярыш ойоштороорға ла була. Был уйын барыһына ла оҡшаясағына һәм шатлыҡ тыуҙырасағына шигегеҙ булмаһын.

Паркка китешләй юлда осраған һәр күләүекте һанап, үлсәп барырға була, аҙаҡтан уларҙың ҡайһыһы ҙурыраҡ, тәрәнерәк икәнен бергәләп асыҡларһығыҙ. Балағыҙ велосипедта икән, уны күләүек уртаһынан үтеү бәхетенән мәхрүм итмәгеҙ. Етмәһә, аҙаҡтан асфальтта еүеш тәгәрмәс эҙе ҡалдырып барыуы ла бик күңелле буласаҡ.

**Тәүге физика дәрестәре**

Икенсе юлы "Бата-батмай" тигән уйын уйнай алаһығыҙ. Уның өсөн өйҙән пластмасса уйынсыҡтар, пластик шешәләр алып сығығыҙ, урамда төрлө ҙурлыҡтағы ағас, таш, япраҡтар йыйығыҙ. Уйын барышында бала үҙе асыштар яһаясаҡ, төрлө предметтарҙың үҙенсәлектәре менән танышасаҡ. Уйындың икенсе этабы булып ағас таяҡ менән һыу төбөнән "диңгеҙ хазиналары"н эҙләү буласаҡ - һыуға батҡан әйберҙәрҙе унда ҡалдырырға ярамай ҙа инде.

**Караптар**

Паркта шишмә йәки һыу менән тулы канау тапһағыҙ, уның буйлап мотлаҡ карап ебәрегеҙ. Карапты шунда уҡ ағас таптарынан йәки пластмасса шешәнән яһарға була. Алдан өйҙә карап әҙерләп алып сығыу уйынды тағы ла мауыҡтырғыс итәсәк.

ТӘҮБӘ

# ЭСЕҮҘӘН ҠОТОЛОП БУЛА



## 16-сы һабаҡ: "Характер", йәғни кеше бер тапҡыр ғына яңылыша...

Яңыраҡ дүртенсе ире үлеп ҡалған бер апай менән осрашып һөйләшергә тура килде. "Барыһының да үлеүендә тик эскелек ғәйепле. Яҙмышым шулайҙыр инде, минә күҙ тейгәндер..." - тине ул миңә күңелһеҙ генә итеп. Эйе, уның һүҙҙәре аңлашыла. Ундай саҡта әллә нәмәләр хаҡында уйланаһың инде, барлыҡ уңышһыҙлыҡтарыңды, бәлә-ҡазаларыңды, ҡайғы-хәсрәтеңде яҙмышыңа япһараһың, башҡа төрлө сәбәп-аңлатмаларҙы ла уйлап сығараһыңдыр. Һәр хәлдә, ошо юл менән ҡайғыны үҙеңдән ситкә этәргәндәй булаһыңдыр, әҙгә генә булһа ла күңелеңде йыуатаһыңдыр. Күңел тигәнең һәр саҡ нимәнәндер йыуаныс эҙләй шул.

Апайҙың күҙенә тура ҡараным да, оҙаҡ ваҡыт тел осомда тотоп торған һүҙемде әйттем дә һалдым: "Беләһеңме, апай, һинең барлыҡ бәләләреңдең башы үҙеңдә бит..." Ул ҡапыл әйткән һүҙемдән тынып ҡалды. Бер аҙ шаңҡып, өндәшмәй торғандан һуң: "Нинә?" - тигән аптыраулы һорау ҡуйҙы. Уның был һорауына әҙер инем. Үҙемсә барыһын да уға аңлатып бирҙем. Тураһын әйттем. Апай тәүҙә дәлилдәремә ышанмайыраҡ ултырһа ла, йәйлап-йәйлап күнә башланы.

Мин уға түбәндәгеләрҙе бәйән иттем:

- Һинең дүртенсе ireң эскелек арҡаһында үлгәс, был хәлең осраҡлы тап килеү түгел бит. Ике оҡшаш осраҡ ҡына бер-береһенә тап килһә, шулай тиергә булыр ине. Һин, беренсенән, тәүге ireң үлгәндән һуң, башҡаларына кейәүгә сыҡҡан саҡта уҡ шундай уҡ кешеләрҙе һайлап, яңылышҡанһың. Кеше бер тапҡыр яңылыша. Ҡалған осраҡтарҙа шул яңылышыуҙарҙы кире ҡабатлаһа, йәғни ул алдағыһынан фәһем, һабаҡ алмаһа, ул инде ХАТА тип атала. Моғайын, икенсе, өсөнсө, дүртенсе ирҙәреңә кейәүгә сығыр алдынан уларҙың эскәнен белгәнһеңдер?

- Эйе, белдем, - тине ул.

- Кем белә, бәлки, улар менән яҙмышыңды бәйләмәгән булһаң, бөгөн иҫән дә булырҙар ине, - тип дауам иттем мин.- Ни өсөнмө? Сөнки... Икенсе, өсөнсө, дүртенсе ирҙәреңдең баштан уҡ эскәндәрен белгәс, уларға шунда уҡ "ЙӘ - МИН, ЙӘ - ЭСЕҮЕҢ!" тигән ҡырҡа талап ҡуйырға кәрәк ине. Кешенең донъяға ҡарашы ике юл сатында торған саҡта күберәк үҙгәрә. Тимәк, кешене ыңғай яҡҡа үҙгәртәм, тиһәң, иң яҡшы сара - дилемма. Әгәр улар, ысынлап та, һине яратһа, юғалтырға теләмәһә, моғайын, һине һайларҙар ине. Улай ғына ла түгел, һин, бәлки, өсөнсө һәм дүртенсе ирҙәреңдең донъяла барлығын да белмәҫ инең. Һаман да беренсе һәм йәки икенсе ireң менән бәхетле тормош көтөп йәшәп ятыр инең. Бәлки, барлыҡ ирҙәрең дә иҫән дә булыр ине...

-Нисек инде улар иҫән булыр ине?- тип апай кеше йәнә бер аптыраны.

- Бәлки, улар ҡаты ҡуллы, ҡорос ихтыярлы берәр ҡатынға барып эләкһә, әллә ҡасан уҡ эсеүҙәрен ташлап, айныҡ тормошта маҡсатлы йәшәй башлаған булырҙар ине, - тинем мин. Апай кеше күҙенә йәш алды.

Ҡатыраҡ бәрелдем шикелле, әммә ул һүҙ төбөмдә һиҙгер күңеле менән шундуҡ аңланы.

- Йомшаҡ характерлымын шул, бигерәк кеше күңеллемен. Бахмурҙан ныҡ ауырыған саҡтарында ярты эҙләп күпме саптым. Юҡ аҡсаны бар итеп, уларҙы "үлемдән ҡотҡарырға тырыштым", - тине ул бошоноп.

- Ана бит...Мин үҙ тәжрибәмдән сығып, шуны беләм: бахмурҙан башы сатнаған кешене бер ваҡытта ла йәлләргә, уның хәленә инергә ярамай. Уға яртылыҡ аҡса биреү, йыуатырға тырышыу, киреһенсә, уны ҡәбергә ваҡытынан алда этеүгә тиң.

Апайҙың "йомшаҡ характерлымын" тигән һүҙе менән тулыһынса килештем. Беҙ алдағы һабаҡтарҙың береһендә эскелектең "Сирме, әллә ауырыумы?" булыуы хаҡында фекер йөрөткәйнек. Эскелек ауырыу булһа, унан ҡотолоу еңелерәк, ә инде сиргә әүерелһә, йәғни "хроник" тәҫ алһа, унан бер ниндәй медицина ла, психотерапевт та, нарколог та, күрәҙәсе лә ҡотҡара алмай. Ни өсөн тигәндә, теге йәки был юл менән эсеүенән ваҡытлыса туҡтап торған кеше, теләһә ниндәй экстремаль осраҡта, киренән эсә башлауы бар. Мин, мәҫәлән, ундай кешеләрҙе күп осраным. Тимәк, эсеүҙән бөтөнләйгә ҡотолоу мөмкин түгелме, тип әйтә һалыр ошо ерҙә берәү. Ул шулай ти икән, тимәк, ул үҙенең көсөнә ышанмай. Ни өсөн ышанмай? Сөнки ул, баяғы апай әйтмешләй, "йомшаҡ характерлы".

Фекерләү йомғағы тағатыла килә, ХАРАКТЕР тигән һүҙгә килеп төртөлдөк. Аҡыл эйәләре "Характер яҙмышты билдәләй, характерың ниндәй булһа, яҙмышың да шулай", тиҙәр. Хаҡ һүҙҙәр. Мирзакәрим Норбеков "Ауырыу, сир - матдиләшкән характер", тип был һүҙҙең тағы ла тәрәндәрәк ятҡан мәғәнәһен аса. Характерҙы, холоҡ-фиғелде үҙгәртеп булмай, тиҙәр. Был хәҡиҡәт. Әммә бер хәҙистә: "Әгәр ҙә тау урынынан күсһә, ышанығыҙ, ә кеше үҙ холҡон үҙгәртһә, ышанмағыҙ. Кеше үҙ холҡон үҙгәртә алмай, бары тыумыш асылына ғына ҡайта ала..." тиелгән.

Ә нимә ул томош асылы? Беҙ тыуған саҡта барыбыҙ ҙа изге күңелле, аҡ йәнле булып тыуабыҙ. "Гонаһһыҙ сабый йәне" тигән һүҙбәйләнеш тә тап шул хаҡта һөйләй. Тимәк, тыумыш асылыбыҙҙағы аҡтан-аҡ, пактан-пак сағыбыҙға кире ҡайтыу мөмкинлеге булғас, ХАРАКТЕРЫБЫҘҘЫ ЛА ҮҘГӘРТӘ АЛАБЫҘ!

Был хаҡта алдағы һандарҙа һөйләшербеҙ.

**Әхмәр ҮТӘБАЙ.**
**(Дауамы бар).**

ҠЫҘЫҠ ТАҺА!

# НИНДӘЙ ҺИН,
## киләсәк кешеһе?

**Футурологтар фекеренсә, киләсәк кешеләре хәҙергеләрҙән ҡырҡа айырылып торасаҡ.**

Бер фараз буйынса, киләсәктә ике зат вәкилдәренең дә сәсе булмаясаҡ, ир-аттарға һаҡал-мыйыҡ үҫмәйәсәк. Эстетик йәһәттән был бер аҙ юғалтыу һымағыраҡ булһа ла, сәс йыуыу һәм ҡырыныу өсөн хәҙерге кеүек күп һиу тотонолмаясаҡ. Тикшеренеүселәр фекеренсә, компьютерҙа һәм башҡа ҡатмарлы техникала эшләүгә унайлы булһын өсөн йәйлап кешеләрҙең бармаҡтары нәҙек оҙонға әйләнәсәк. Аҡыл тештәре сығыуҙан туктаясаҡ.

Фәйләсүф Франческо Кавалли Сфорца әйтеүенсә, электроника һәм мәғлүмәт үҫеше һөҙөмтәһендә нервылар системаһында ла үҙгәрештәр буласаҡ. Хәҙерге балалар элекке быуында булмаған ҡайһы бер һәләттәргә әле үк эйә, әммә был өлкәлә тағы ла үҙгәрештәр буласаҡ, артыҡ ауырлыҡ һәм депрессия кеүек яңы сирҙәр барлыҡҡа киләсәк. Кешенең буйы ла оҙонораҡ булыуы фаразлана.

Ғалимдар фекеренсә, кешелә үҙгәрештәр әле үк башланған. Еҫ һәм тәм тойоу насарайған, киләсәктә танау бөтөнләй еҫ һиҙмәй башлаясаҡ, ти улар. Ҡайһы бер футурологтар әйтеүенсә, XXI быуаттың уртаһына Ерҙә йәшәүселәрҙең яртыһының тиреһе ҡараѓусҡыл, ә күҙҙәре ҡыҫыҡ буласаҡ, йәнәһе, шул рәүешле европалы раса балаларҙы аҙ тапҡан өсөн яҙа аласаҡ. Кешенең мускул массаһы кәмеүе бар, һулаҡайҙар күбәйәсәк. Бер теория буйынса, тәбиғәт таш быуатта уң ҡулдар менән бәрелештәрҙә һәләк булған һулаҡайҙар популяцияһын кире тергеҙәсәк.

Америка ғалимдары фаразлауынса, яҡынса 2 мең йылдан һуң атмосфераның бысраныуы арҡаһында кешенең күҙҙәре бәләкәйләнеп, унда өҫтәмә күҙ ҡабағы барлыҡҡа киләсәк. Үпкәләр ҙурайып, атмосферала ҡалған һауаны эшкәртеү өсөн тағы ла ҡуйыраҡ ҡан йөрөү системаһына эйә буласаҡ. Атмосфералағы химик бысраҡтан һәм әүҙем ҡояштан һаҡланыу өсөн тиренең ҡалынайыуы ихтимал. Тауыштан һаҡланыу өсөн ҡолаҡтарҙа йыйырсыҡтар барлыҡҡа киләсәк. Бөйөрҙәр яңы функцияға эйә булып, һейҙектән һыуҙы айырып алып, уны организмда һаҡлаясаҡ. Антропологтар әйтеүенсә, баш мейеһе ҙурайыуы һөҙөмтәһендә баш ҙурыраҡ һәм йомороҡ буласаҡ.

Ысынмы был, әкиәтме, берәү ҙә аныҡ ҡына итеп әйтә алмай, әммә күп ғалимдар фекеренсә, кешенең тышҡы йөҙөндә һәм физиологияһында ниндәйҙер үҙгәрештәр мотлаҡ буласаҡ һәм бының сәбәбе техник прогрестың йылдам үҫеше менән аңлатыласаҡ.

УҢЫШ ҠАҘАН

# ТОРМОШ ҠАНУНДАРЫ

## Артыҡ ҡояш нуры...

**Ҡайһы саҡта беҙ һауа торошоноң һәр ваҡыт ҡояшлы булыуын теләйбеҙ. Әгәр ҙә болот та, ямғыр ҙа булмай, тик эҫе генә булып торһа, беҙҙең ерҙәге тормош нимәгә оҡшар ине икән? Ул саҡта беҙ йәшәйешебеҙҙе тәьмин итә алмаған ҡоро, уңышһыҙ планетала тороп ҡаласаҡбыҙ түгелме?**

Бына шулай, беҙҙең тормош та ҡояшлы һәм дауыллы көндәр, күңелле һәм ауыр мәлдәр, рәхәтлек һәм һыҙланыуҙар менән тулған. Йыш ҡына беҙ тик кинәнес һәм бәхеттән генә торған тормош ҡорорға тырышабыҙ. Әммә беҙ тик ошоно ғына күҙаллайбыҙ икән, ул саҡта хәүеф аҫтында йәшәргә мәжбүр булыр инек.

Үҙ иленең хөкөмөнән ҡасып йәшәгән енәйәтсе тураһында шундай риүәйәт йәшәй. Уға гелән кемдәндер ҡурҡып йәшәү ялҡытҡан һәм үҙен бер аҙ бәхетле тойор өсөн наркотиктар ҡуллана башлаған. Шик-шөбһәнән һәм эске ҡаушауҙан ҡотолоу теләге шул тиклем көслө булған, ул наркотик табыр өсөн теләһә ниндәй аҙымға барған. Наркотиктар уның эске һыҙланыуын баҫҡан һәм уға тынғы бирмәүсе хәтирәләрҙән азат иткән. Борсолоуҙарҙан ҡотолоуҙың бындай ысулы ваҡытлыса үҙ һөҙөмтәһен биргән, әммә күп тә үтмәй, уларҙы ҡыуыу өсөн тағы ла күберәк наркотик талап ителгән. Бының өсөн уға урлашырға тура килгән һәм ул төрмәгә эләккән. Был кешенең борсолоуҙарҙан ҡасып, үҙен күпкә бәхетле итеп тойоу теләге оҙайлы ваҡытҡа тимер ҡоршау менән тамамланған.

Беҙ барыбыҙ ҙа үҙ тормошобоҙҙа ниндәйҙер тигеҙлеккә мохтажбыҙ. Арабыҙҙа бик аҙҙарыбыҙ ғына хәүеф-хәтәр һәм башҡа төрлө кире тойғолар менән тулы мөхиттә йәшәй алыр ине. Ямғыр йәшел үләнгә һутлы булып үҫергә булышлыҡ иткән, ә ҡояш нуры йылылыҡ һәм эске тыныслыҡ биргән кеүек, юғалып ҡалыу һәм икеләнеүҙәр беҙҙе тағы ла тәрәнерәк тормош мәғәнәһен эҙләргә - яңы идеялар һәм ышаныс тыуҙырырға мәжбүр итә ала. Бәхетле мәлдәребеҙ иһә, беҙҙең күңелдә матур хәтирәләр ҡалдыра һәм барыһы ла беҙгә арты менән боролғандай тойолғанда, иҫке дуҫтар кеүек, шул бушлыҡты тултырып тора.

Алдыңдағы юл күрәгәнән артыҡ ташлы булып тойолғанда, "Артыҡ ҡояш нуры сүллек хасил итә", тигән ҡытай мәҡәлен хәтереңә төшөр. Сүллектә ямғырһыҙ бер ниндәй ҙә тормош булыуы мөмкин түгеллеген онотма. Тормошоңда тигеҙлек эҙлә. Әгәр ул юҡ икән, тимәк, уны булдырырға ваҡыт еткән!

**Джон Макс ТЕМПЛТОН.**

БАҠСА

**Октябрь - ул көҙ уртаһы, йәй һәм ҡышты бәйләп тороусы ай. Айҙың тәүге яртыһында әле уныш йыйыу дауам итһә, икенсе яртыһында баҡсаны ҡышҡа әҙерләү башлана.**

# КИЛӘҺЕ УҢЫШҠА НИГЕҘ...

## көҙ һалына



Алма һәм грушаның һуң өлгөрә торған сорттарын октябрҙең 14-нә тиклем йыйырға була. Емештәрҙе ҡоро көндә йыйып, шунда уҡ йәшниктәргә тултырып, һалҡын урынға ҡуйығыҙ һәм һалҡындар төшөү менән ҡышҡылыҡҡа һаҡлау өсөн баҙға төшөрөгөҙ. Ошо уҡ мәлдә ҡара миләште, ай уртаһында айваны йыйып алығыҙ.

Емештәрҙе йыйып алғандан һуң, баҡсаны төрлө ҡоротҡостарҙан һаҡлау өсөн төрлө препараттар менән эшкәртеү яҡшы һөҙөмтә бирә. Көҙ ағас һәм ҡыуаҡтар тамырҙарын нығыта, буйға үҫә. Шуға ла көндәр ҡоро торғанда уларға һыу һибергә кәрәк. Баҡсаны органик йәки фосфор-калий ашламаһы менән туҡландырыу икенсе йыл уңышының нигеҙе булып тора. Баҡса еләгенең араларын ҡаҙып, тиреҫ йәки көл менән ашлағыҙ. Беренсе ҡырауҙан һуң виноград ҡыуағының йәшел япраҡтарын алып ташлап, ергә һалығыҙ. Һыуыҡтар нығлап төшкәс, виноград ҡыуағы мурҭыҡҡа әйләнә һәм уларҙы ергә һалыу ҡыйынға төшәсәк.

Ай аҙағында ҡоро көндә ағастарҙы эҙбиз иҙмәһе менән ағартып ҡуйығыҙ, был февраль-март айҙарында ағас олондарын ҡояштан һаҡлаясаҡ. Ҡыш кимереүселәрҙе йәнлеп итеп ятмаһын өсөн ҡойолған япраҡтарҙы, үләндәрҙе йыйып алырға кәрәк. Ай аҙағында кәрәкмәгән ботаҡтарҙы киҫеп ташлағыҙ.

Октябрь емеш ағастары һәм ҡыуаҡлыҡтар ултыртыу өсөн иң ҡулайлы мәл. Ҡара ҡарағат, крыжовник, ҡурай еләге, алма ултыртығыҙ, был айҙа яҙ ултыртыласаҡ ағастар өсөн соҡорҙар ҡаҙып ҡалдырыу дөрөҫ буласаҡ. Йәш үҫентене элекке ағас урынына ултыртырға ярамай, сөнки был урында тупраҡ ярлылана, зарарлы микроорганизмдар туплана. Яңы ағасты бындай урындан 1,5 м йыраҡлыҡта сәсеү яҡшыраҡ. Соҡорҙо етерлек кимәлдә тиреҫ йәки кәрәкле минераль ашламалар менән тултырығыҙ һәм уны яҙға тиклем шулай ҡалдырығыҙ.

Ҡыш йәш ағастар ҡайырыһына сысҡан һәм башҡа кимереүселәрҙең зарар килтереүе бар. Уларҙы һаҡлау өсөн рубероид, шыршы ботаҡтары, капрон, тимер цилиндрҙар ҡулланығыҙ. Был материалдарҙың барыһын да тупраҡҡа 5-10 см батырып ҡуйырға, ә ерҙе нығлап тығыҙларға кәрәк буласаҡ. Полиэтилен ҡулланыу ярамай, иң яҡшыһы - шыршы ботағы йәки капрон ҡулланыу. Рубероид аҫтына мотлаҡ сепрәк һалығыҙ, өҫтөнән олон йылынмаһын өсөн аҡлау ҙа талап ителә. Тимер цилиндр һәм ағас араһында 3-5 см ара ҡалырға тейеш.

Октябрҙә асыҡ һауала үҫкән бар йәшелсәләр ҙә йыйып алына. Ерҙе ҡаҙған ваҡытта тиреҫ йәки минераль ашламалар индерегеҙ. Ҡышҡылыҡҡа укроп, һуған, сөгөлдөр, петрушка, салат, редис, кишер, сельдерей сәсеп ҡалдырыу өсөн түтәл әҙерләгеҙ.

Айҙың тәүге яртыһында гладиолустарҙың һуғаны ҡаҙып алына, иртә яҙ сәскә ата торған һуғанлы сәскәләрҙе ултыртыуҙы тамамлағыҙ. Бер һәм күп йыллыҡ сәскәләрҙең ер өҫтөндәге өлөшөн алып ташларға. Пиондарҙы һабаҡтарын һулып бөткәс кенә ҡырҡып ташлайҙар. Һауа торошона ҡарап, ай аҙағында бар сәскәләрҙе лә ҡоро торф менән ҡаплағыҙ. Йылы яратыусы ҡыуаҡлыҡтарҙы, мәҫәлән, форзиция, вейгела, рододендронды һалҡындар алдынан ҡаплау кәрәк.

СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ

## Мостай Кәримгә арналған театр фестивале

**Баш ҡала театрҙары бинаһында 14 октябрҙән 20 октябргә тиклем Башҡортостандың халыҡ шағиры Мостай Кәримдең тыуыуына 90 йыл тулыуға арналған республика театр фестивале уҙа. Ул 14 октябрҙә М.Кәрим исемендәге Милли йәштәр театрында "Беҙҙең өйҙөң йәме" спектакле менән асыла.**

**15 октябрҙә** М.Ғафури исемендәге Башҡорт академия драма театры "Оҙон-оҙаҡ бала саҡ" драмаһын, Өфө дәүләт "Нур" татар театры Бәләкәй залда "Киске табын" спектаклен, ә уның Ҙур залында Стәрлетамаҡ дәүләт рус драма театры "Ай тотолған төндә" трагедияһын ҡуясаҡ.

**16 октябрҙә** М.Кәрим исемендәге Милли йәштәр театрының рус труппаһы 17.00 сәғәттә музыкаль-поэтик композиция менән сығыш яһай, ә башҡорт труппаһы **19.00 сәғәттә** "Йәйәүле Мәхмүт" спектаклен күрһәтәсәк. Стәрлетамаҡ дәүләт башҡорт драма театры иһә Башҡорт академия драма театры сәхнәһенә "Ҡыҙ урлау" комедияһын алып сыға.

**17 октябрҙә** М.Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры "Оҙон-оҙаҡ бала саҡ" әҫәре буйынса "Донъяның ярҙары икәү" драмаһын тәҡдим итә. Ул З.Исмәғилев исемендәге Өфө дәүләт сәнғәт академияһының Уҡыу театрында күрһәтеләсәк. Ә БР дәүләт академия рус драма театрында "Ярлыҡау" повесы буйынса "Луна и листопад" исемле лирик драма ҡуйыла.

**18 октябрҙә 14.00 сәғәттә** Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театрының башҡорт труппаһы "Оҙон-оҙаҡ бала саҡ" драмаһын, **18.00 сәғәттә** Башҡорт дәүләт опера һәм балет театры "Ташлама утты, Прометей!" трагедияһы буйынса "Прометей" балетын сәхнәгә сығара. Ә **19.00 сәғәттә** Салауат дәүләт башҡорт драма театры артистары Башҡорт академия драма театры бинаһында "Ай тотолған төндә" трагедияһын уйнай.

**19 октябрҙә** Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры сәхнәһендә **14.00 сәғәттә** Сибай башҡорт "Сулпан" балалар театры "Өс таған" әҫәрен сәхнәләштерә. М.Кәрим исемендәге Милли йәштәр театрында - А.Мөбәрәков исемендәге Сибай дәүләт башҡорт драма театры "Ай тотолған төндә" трагедияһын, Өфө дәүләт "Нур" татар театрының ҙур залында Туймазы дәүләт татар драма театры "Ташлама утты, Прометей!" трагедияһын күрһәтәсәк.

**Фестиваль 20 октябрҙә М.Кәрим исемендәге Милли йәштәр театрында "Йәләлетдин атай" спектакле менән ябыласаҡ.**

## Мәжит Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**12-13 октябрҙә** театр коллективы Мәскәүгә юлланасаҡ. Юбилей гастролдәре сиктәрендә А.С.Пушкин исемендәге драма театры бинаһында Башҡортостандың, Татарстандың һәм Рәсәйҙең халыҡ артистары, С.Юлаев исемендәге Дәүләт премияһы лауреаттары Нурия Ирсаева һәм Фидан Ғафаровтарҙың "Йәшлектәргә ҡайтайыҡ әле..." исемле бай йөкмәткеле ретро-концерты һәм Мөхәмәтша Буранғолов пьесаһы буйынса "Шәүрәкәй" спектакле күрһәтеләсәк.

## Иҫкә алабыҙ



Ап-аҡ ҡышты, буранлы көндәрҙе үткәреп, йәмле яҙ айының 10 апрелендә беҙҙең йөрәктәргә уңалмаҫ яралар һалып, Күмертау ҡалаһында йәшәүсе ҡәҙерле ағайым, Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре ҡурайсы, йырсы **ХӘЛИЛОВ Зыя Ишбулды улы** ҡапыл ғына беҙҙең арабан китеп барҙы. 10 октябрҙә уның баҡыйлыҡҡа күсеүенә ярты йыл була. Оҫта ҡуллы булып танылған (ҡурай, ҡумыҙҙар эшләү оҫтаһы), һәр кемгә ярҙам ҡулы һуҙырға әҙер торған ағайымдың юҡлығына күңел һаман да ышанмай. Ул балаларына, туғандарына һәр ваҡыт ярҙам итә, киләсәгебеҙҙе ҡайғырта, аҡыллы кәңәштәр бирә торғайны. Ваҡыт үткән һайын, ағайымды нығыраҡ һағынабыҙ, юҡһынабыҙ. Ағайымды белеүселәр, ихтирам итеүселәр барыһы ла ошо көндәрҙә уны беҙҙең менән бергә иҫкә алһындар ине. Ҡәҙерлебеҙҙең ауыр тупрағы еңел, ҡараңғы гүрҙәре яҡты, йәне ожмах түрендә булһын.

Ҡәберҙәренә һәр саҡ барайым,
Ҡара тупрағына бағайым.
Төштәремә килеп, моңландырып,
Ҡурай тартып китсе, ағайым.

**Бөтөн туғандары исеменән, Өфөлә йәшәүсе һеңлеһе Әнисә Хәлилова.**

ИЛ-ЙӨРТ ХӘБӘРЕ

# ИҢ МӨҺИМЕ - КЕШЕ БУЛ!

## Шулай өйрәтәбеҙ уҡыусыларыбыҙҙы

**Баймаҡ районының Башҡорт республика компьютер лицей-интернаты эшләй башлауға 16 ғына йыл әле. Ошо осор эсендә 370 уҡыусыға ҙурҙаллы тормошҡа йүнәлтмә бирҙе ул, "Мәғариф" өҫтөнлөклө проекты тормошҡа ашырыла башлағас, 1 миллион һумлыҡ грантты районда беренселәрҙән булып алыу шатлығы ла кисерҙе.**

Уҙ һөнәренә тоғро булған уҡытыусылар эшләй бында. Коллективты Ш. Мәхмүтов етәкләй. Р. Ҡужабәков "Рәсәйҙең иң яҡшы уҡытыусыһы" конкурсында еңеп сыҡты. Химия уҡытыусыһы И. Ғәбәйҙуллин уҡытыусылар династияһының эшен лайыҡлы дауам итә, бик өмөтлө белгес, фәнни эш буйынса директор урынбаҫары вазифаһын да башҡара. Йыл һайын уның уҡыусылары химиянан БДИ-ла юғары күрһәткестәргә өлгәшә һәм БДУ, БДМУ-ға уҡырға инә, тимәк, райондың бөгөн был өлкә белгестәренә ҡытлыҡ кисереүен иҫәпкә алһаҡ, бер нисә йылдан был мәсьәлә ыңғай хәл ителәсәк, тип ышанырға мөмкин. 38 йыл ғүмерен балалар уҡытыуға һәм тәрбиәләүгә бағышлаған Башҡортостандың атҡаҙанған уҡытыусыһы, директор урынбаҫары М. Арыҫлановаһың исеме лицей-интернат тарихының тәүге битенә яҙылған. Башҡа уҡытыусыларыбыҙ һәм тәрбиәселәребеҙ ҙә үҙ эшенең оҫталары. Шуныһы ла ҡыуандыра: лицей-интернаттың элекке уҡыусылары хеҙмәт юлының тәүге биттәрен үҙҙәре уҡыған ошо уҡыу йортонда яҙа.

Һуңғы дүрт сығарылыш уҡыусыларының бөтәһе лә юғары уҡыу йортона уҡырға инде. Быйыл да был традицияға тоғро ҡалды 15-се сығарылыш уҡыусылары. Иршат Йомағолов Плеханов исемендәге Рәсәй иҡтисад академияһы, Любовь Трушина Санкт-Петербург дәүләт техник университеты, Татьяна Аблицова Рәсәй Эске эштәр министрлығының Өфө юридик институты студенты. Шулай уҡ БДПУ-ға, ӨДАТУ-ға, БДМУ-ға, БДУ-ға, БДАУ-ға, Өфө дәүләт сервис һәм иҡтисад академияһына, БДУ-ның Сибай институтына, Стәрлетамаҡ дәүләт педагогия академияһына, Магнитогорск дәүләт техник университетына уҡырға инде уҡыусыларыбыҙ.

Лицей-интернаттың маҡсатҡа өлгәшә килеүе - тәрбиә эшенең дә заман талаптарына ярашлы ойошторолоуына бәйле. Был эште лицейҙа 44 йыл хеҙмәт стажы булған, РФ-ның мәғариф алдынғыһы Х. Рыҫбаева етәкләй.

Һүҙ юҡ, лицей-интернатта бер уҡ уҡытыусыларҙан, тәрбиәселәрҙән белем, тәрбиә һабағы алыу, бер мөхиттә тәрбиәләнеү, бер үк уй-хыялдар, маҡсатынтылыштар менән йәшәү балалар өсөн ҙур әһәмиәткә эйә. Уҡыусылар араһында кемдәр генә юҡ! Ләкин улар ниндәй генә һөнәр һайламаһын, лицей-интернатта бер хәҡиҡәткә өйрәтәләр: иң тәүҙә кеше булыу. Тыуған төйәгебеҙҙең героик үткәне, тарихи традициялары өлгөһөндә уҡыусыларҙа ватансылыҡ, хеҙмәткә һөйөү, хеҙмәт кешеһенә ихтирам, милли аң, кешелекле аҡыл тәрбиәләүҙе, дөрөҫлөк һәм намыҫлылыҡтан ситкә тайпылмайынса йәшәй алыу кәрәклеген төшөндөрөү зарурлығын тәүге урынға ҡуя лицей-интернат уҡытыусылары һәм ошо тәрбиә үҙенең һөҙөмтәләрен бирә.

**Хөснә ӘНУӘРИ.**
**Баймаҡ районы Беренсе Этҡол ауылы.**

✔ *Кем ниндәйҙер эште башлар алдынан уҡ үҙен яртылаш еңелгән тип иҫәпләй, ул, ысынлап та, көрәшкә тотонғанда уҡ яртылаш еңелгән була.*
*(Д. Писарев).*



ӘЙҘӘ, ЯРЫШҠА!

# ОҘОН КӨЙ САҠЫРА

**Башҡортостан Республикаһының Мәҙәниәт һәм милли сәйәсәт министрлығы, Республика халыҡ ижады үҙәге Туймазы районы хакимиәте менән берлектә 2009 йылдың 19-21 ноябрендә Туймазы ҡалаһында Төбәк-ара "Оҙон көй - 2009" конкурсы үткәрә.**



Был конкурс һәләтле халыҡ йырсыларын асыҡлау һәм танытыуҙы, оҙон көйҙө башҡарыу традицияларын тергеҙеү һәм үҫтереүҙе, урындағы башҡорт йыр фольклорын пропагандалауҙы маҡсат итеп ҡуя. Бәйге махсус вокал белеме булмаған төрлө йәштәге башҡорт оҙон көйҙәрен башҡарыусылар араһында үткәрелә. Шулай уҡ унда урта махсус белем биреү йорттарының беренсе һәм икенсе курс вокал бүлеге студенттары ла ҡатнаша ала.

Һайлап алыу туры республиканың ҡала һәм райондарында үтә һәм конкурсҡа һәр ҡала һәм райондан бишәр кеше ҡатнаша ала. Конкурс һәр йәш категорияһында ике турҙа уҙғарыласаҡ.

16 йәшкә тиклемге ҡатнашыусы ике турҙа ла үҙе һайлаған ике оҙон көй башҡарырға тейеш. 16 йәштән 60 йәшкә тиклемгеләр беренсе турҙа микрофонһыҙ һәм музыкаль оҙатыуһыҙ мотлаҡ һаналған һәм үҙе һайлаған оҙон көйҙәр, икенсе турҙа мотлаҡ һаналған (микрофон һәм музыкаль оҙатыу ҡулланырға мөмкин) һәм үҙе һайлаған оҙон көйҙәр башҡарырға тейеш. 60-тан өлкән йәштәгеләргә лә шундай уҡ талаптар.

Мотлаҡ һаналған йырҙарға түбәндәгеләр инә: "Урал", "Буранбай", "Эскадрон", "Тәфтиләү", "Һандуғас", "Ашҡаҙар", "Зөлхизә", "Ғилмияза", "Таштуғай", "Ҡолой кантон", "Азамат", "Ғайса", "Салауат", "Ерән ҡашҡа", "Ҡаһым түрә", "Сибай", "Карауанһарай", "Бейеш", "Сәлимәкәй", "Шәүрә", "Зәлифәкәй", "Кәмәлек", "Мәҙинәкәй", "Йәйләүек", "Зөлхәбирә", "Әрме", "Һыр", "Ағиҙел ағынһыу", "Томан", "Баяс", "Ильяс", "Шафиҡ".

Оҙон көй ҡатнашыусының һайлауы буйынса башҡорт халыҡ йыр классикаһы әҫәре, йә иһә башҡарыусы үҙе йәшәгән төбәктең башҡорт йыр фольклоры өлгөһө була ала. Шулай уҡ мотлаҡ һаналған йырҙар исемлегенән дә һайлау мөмкинлеге рөхсәт ителә. Ҡатнашыусы үҙе башҡарған оҙон көйҙәр репертуарын яҙма рәүештә тапшырырға тейеш (жюри уларҙың береһен йырлап күрһәтеүҙе һорауы ихтимал). Йырҙы башлар алдынан ҡатнашыусы уның риүәйәтен йәки тарихын һөйләп бирергә тейеш.

Башҡортостан Республикаһының билдәле сәнғәт оҫталары һәм мәҙәниәт хеҙмәткәрҙәренән торған жюри ҡатнашыусыларҙы башҡарыу оҫталығына, сәхнә мәҙәниәтенә, башҡарыуҙың үҙенсәлекле һәм ҡабатланмаҫ булыуына, репертуарҙың конкурс талаптарына тап килеүенә ҡарап баһалаясаҡ. Еңеүселәр һәр йәш категорияһында айырым билдәләнәсәк һәм иң яҡшы башҡарыусыға Гран-при биреләсәк. Шулай уҡ һирәк яңғыраған башҡорт йыр фольклорын башҡарыусыға махсус приз тапшырыласаҡ. Конкурста ҡатнашыу өсөн балалар 200 һум, өлкәндәр 300 һум түләргә тейеш.

Конкурста ҡатнашыу өсөн ғаризалар 10 ноябргә тиклем түбәндәге адрестар буйынса ҡабул ителә:

450077, Өфө ҡалаһы, Ленин урамы, 72, Республика халыҡ ижады үҙәге. Телефондар (347) 272-53-25, 8-960-398-02-94 - Әхмәтйәнова Эльвира Искәндәр ҡыҙы.

450752, Туймазы ҡалаһы, Октябрь майҙаны, 1, Туймазы муниципаль район хакимиәте, мәҙәниәт бүлеге. Телефондар: (34782) 7-34-28, 27-24-51 - Зарипова Гөлсәсәк Ғабдулхаҡ ҡыҙы.

**Ойоштороу комитеты.**

ҺЫЙЛАМАҒА ҺЫЙЫҢ БУЛҺЫН!

## Таш ҡабаҡтарҙан икра

1 кг икра яһау өсөн 700 г таш ҡабаҡ, 100 г кишер, 20 г петрушка тамыры, 100 г башлы һуған, 3-4 помидор, тәменә ҡарап тоҙ, борсаҡлы ҡара борос, шәкәр алына.

Таш ҡабаҡтарҙы турап, майҙа ҡурырға. Һуған менән кишерҙе турағас, айырым ҡурып алырға. Помидор менән петрушка тамырын турағас, барыһын да бергә ҡушып болғатырға ла банкаларға тултырырға. 1 литрлы банканы 20 минут стериллергә һәм тимер ҡапҡас менән ябып ҡуйырға.

## Йәшелсәләрҙән икра

Берәр килограмм таш ҡабаҡ, помидор, һуғанды турарға, 1 кг кишерҙе ҡырғыстан үткәрергә. Таш ҡабаҡтарҙы айырым, ә һуған менән кишерҙе бергә ҡурып алырға. Помидорҙы, 300 г үҫемлек майын, тәменә ҡарап тоҙ ҡушҡас, барыһын бергә болғап, 30 минут быҡтырырға. Банкаларға һалып стериллəп, тимер ҡапҡас менән ябырға.

## Төрлө йәшелсәләрҙән икра

700 г сөгөлдөр, 2-3 таш ҡабаҡ, 3 кг помидорҙы ит үткәргестән үткәреп, тәменә ҡарап тоҙ һалып, 400 г үҫемлек майы ҡушҡандан һуң, 1,5 сәғәт быҡтырырға. Икра әҙер булыуға 20 минут ҡалғас, 700 г башлы һуғанды ваҡ итеп турап, майлы табала ҡыҙҙырып, төп массаға ҡушырға, борос, лавр япрағы өҫтәргә. Банкаларға икраны тултырғас, уларҙы ҡапҡастарын бороп япмай ғына ҙур һауыттағы йылы һыуға ултыртып, һыу ҡайнап сыҡҡандан һуң 7 минут самаһы тотоп, ҡапҡастарҙы ябып ҡуйырға.

## Ҡышҡылыҡҡа турама

1,5 кг алма менән 4 кг помидорҙы ит турағыстан үткәреп, тәменә ҡарап тоҙлап, 1,5 кг башлы һуғанды турап, 2/3 стакан шәкәр менән үҫемлек майы ҡушып, 20 минут ҡайнатҡас, бер тотам петрушканы турап, 2 баш һарымһаҡты иҙеп һалғандан һуң тағы 2 минут ҡайнатҡас, стерилләнгән банкаларға тултырып, тимер ҡапҡас менән ябып ҡуйырға.

## Ҡыяр тоҙлау

Банкаларға ҡыяр менән тәмләткестәрҙе тултырып әҙерләгәс, һәр банкаға 2 ҡалаҡ тоҙ, 4 ҡалаҡ шәкәр ҡушылған ҡайнар һыу ҡойғас, 2 ҡалаҡ һеркә өҫтәп, ҡапҡас менән ябырға һәм баштүбән әйләндереп торорға.

## Үҙ һутындағы помидор

Бөтә йәшелсәләрҙе лә, һауыттарҙы ла таҙа итеп йыуғас, киптерергә. Бер күнәк үткәрелгән помидор массаһына 2 стакан тоҙ, 1-әр стакан шәкәр, иҙелгән һарымһаҡ һәм 1 ҡалаҡ һеркә һалып болғатҡас, банкалағы помидорҙар өҫтөнә ҡойоп, полиэтилен ҡапҡастар менән ябып, һалҡын урында һаҡларға.

**Флора БИКЕМБӘТОВА.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә әйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ОЖМАХТАҒЫ УРЫН...

## кемгә тәтей?

**Ул үҙен аҡыл эйәһе тип иҫәпләй һәм үҙенең ҡасан да булһа был донъяны ташлап китәсәген аңлап, бер теләк менән генә янып йәшәй: теге донъяла ожмахҡа эләгергә, бының өсөн фанилыҡта саҡта мөмкин тиклем күберәк изге эштәр башҡарып, Хоҙай алдында яҡшы күренергә. Шуға ла ул мосолмандарға фарыз бар ҡағиҙәләрҙе еренә еткереп үтәй, намаҙҙарын да ваҡытында уҡый.**

**Берҙән-бер көндө ул үҙенең генә гонаһ ҡылмауы етмәй, ә әйләнә-тирәләгеләрҙе лә насар эштәрҙән ҡурсырға кәрәк, тигән ҡарарға килә. Уның иғтибары күршеһенә, бик хәтәр ҡомарлы уйынсыға йүнәлдерелә. Күршеһенең уйынға әүәҫлеге ауырыуға әйләнгән була. Уйнамаҫҡа, тип, әллә күпме ант итһә лә, һүҙендә тора алмай, ташлай ҙа яңынан башлай.**

**Аҡыл эйәһе күршеһен был насар ғәҙәтенән арындырырға була. Ләкин өгөтләүҙәр генә бер файҙа ла бирмәҫен дә аңлай. Ҡомарлы уйын - яуызлыҡ, ә уның менән мауығыу - ул оло гонаһ икәнен кем белмәй! Шуға ла аҡыл эйәһе икенсе төрлө юл һайлай: күршеһе ҡомарлы уйын уйнарға киткән һайын уның өй тупһаһына ауыр гонаһ йөгө тураһында иҫкәртеү өсөн бер таш һалып ҡуя. Уйынсы өй тупһаһы алдындағы таш өйөмө үҫкәндән- үҫә барғанын күрә. Ул күршеһендәге аҡыл эйәһенең уны өгөтләмәй, һүҙҙәр менән битәрләмәй генә уны гонаһы тураһында иҫкәртеүен аңлай. Шуға ла йортона ҡайтҡан һайын уйынсы үҙенең ихтыярһыҙлығы өсөн оялып, шулай тип уйлана:"Күршеһе, бөтөнләй сит кеше, уның насар ғәҙәттәре өсөн көйөнә, Алланан уның гонаһтарын ярлыҡауҙы һорай. Мине ошо насар ҡылығымдан ҡотҡарыуға күпме көс сарыф итә. Ниндәй түбән йәнле әҙәм мин! Ниндәй гонаһлымын мин! Аҡылым менән күршемдең тырышлыҡтарын таныйым, уға рәхмәтле булыуҙан йөрәгем шартлар сиккә етә, ләкин ул да миңә ярҙам итә алмай, мин был бысраҡҡа шул тиклем нығ батҡанмын. Ҡайғы миңә, ҡайғы!"**

**Бер саҡ уйынсы хатта мәсеткә бара һәм уның күршеһенең уға күрһәткән изгелеген тейешенсә баһалаһын өсөн, Хоҙайға ялбара.**

**Күп йылдар үтә. Баяғы гонаһлы уйынсы ла, уны ҡурсалаусы изге кеше лә баҡыйлыҡҡа күсә. Аллаһ илсеһе уларҙы баҡыйлыҡ ҡапҡаһы алдында ҡаршылай ҙа, "Һин минең менән ожмахҡа бараһың", тип, уйынсыға ишаралай. Ә изге кешегә тамуҡ ҡапҡаһын күрһәтә. "Юҡ, юҡ, - тип ҡысҡыра уйынсы. - Һин яңылыштың. Минең урыным ожмахта түгел, мин оло гонаһ эйәһемен. Нисек кенә ҡыйын булмаһын, мин быны яҡшы беләм. Ожмахтағы урын минең изге күңелле күршемдеке..."**

**"Һинең икеләнеүҙәрең урынлы түгел, - ти Алла илсеһе. -Мин Хоҙай ҡушҡанды ғына эшләйем. Күп һөйләнеп, ожмах ҡапҡаһы алдындағы башҡаларҙы тотҡарламаҫ өсөн, аңлатам: һин гонаһ ҡылдың - һүҙ юҡ. Әммә гонаһтарың тураһында иҫкә алған һайын һин оялыу һәм үкенеү кисерҙең. Ә йөрәгеңдә һин оло изгелек йөрөттөң - һинең турала хәстәрлек күреүсе күршеңә рәхмәт тойғоһо ул. Күршеңә килгәндә иһә, ул бөтөн ошо йылдар буйы үҙенең нәфсеһен генә ҡандырҙы. Ул һинең гонаһлы йәнеңдән алда, иң тәүҙә үҙенә сауап алыу тураһында уйланы. Ундай тәкәбберлек һинекенә ҡарағанда ла гонаһлыраҡ. Уның һинең тупһаңа өйгән һәр ташы уның камил булмауын белгерткән үлсәү яғында булып сыҡты..."**


"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

**Баш мөхәррир:**
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**

**Мөхәрририәт:**
Әхмәр ҮТӘБАЙ,
Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ,
Ләйсән НАФИҠОВА,
Динара ЯҠШЫБАЕВА,
Таһир ИШКИНИН.

**Беҙҙең адрес:**
**450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
**Беҙҙең сайт: www.kiskeufa.ru**
**E-mail: info@kiskeufa.ru**
**kiskeufa@ufacom.ru**

«Башҡортостан» нәшриәте типографияһында баҫылды (450079, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| Баш мөхәррир | 253-25-44 |
| Баш мөхәррир урынбаҫары | 246-03-24 |
| Бухгалтерия | 246-03-23 |
| Хәбәрселәр | 252-39-99 |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44**, **246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – 50665, 50673 (льготалы)

Тиражы - 5615
Заказ 4360